**✓ИҒТИБАР! Сентябрğә тиклем 2010 йылдың тәүге яртыһына ваҡытынан алда "Киске Өфө"гә яҙылыу бара. Йәғни ошо осорҙа гәзитебеҙгә элекке хаҡтар менән: 50665 индекслыһына - 294 һум 84 тингә, 50673 индекслыһына - 282 һум 66 тингә яҙылыу мөмкинлеге бар. Ә сентябрҙә хаҡтар бер аҙ ҡиммәтләнер, моғайын. Бергә ҡалайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

www.kiskeufa.ru

1 - 7 АВГУСТ (УРАҠАЙ) 2009 ЙЫЛ

№31 (345)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һәйкәлдәр - терелəргә**



2

**Һай, башҡорт аштары!**



6-7

**Титуллы халыҡ үҙенә держава йөгөн ала,**

йәки Этномиллəтселектең хәҙерге сәйәси роле тураһында



8-9

**Әҙәм күрке сепрәк икән -**

тимәк, сепрәктән мөгжизә тыуҙырыу кәрәк



12

**ТВ программа**

14


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Мәктәптәрҙә дин тарихын, дини мәҙәниәт нигеҙҙәрен уҡытыу маҡсатҡа ярашлымы?*

*Илдар МАЛАХОВ, Мәрйәм Солтанова исемендәге мәҙрәсә директоры:*

Рәсәй Президенты Дмитрий Медведевтың илебеҙҙең дүрт төп дини конфессияһы етәкселәре менән осрашыуында ошо мәсьәләнең күтәрелеүе бик ваҡытлылыр, тип уйлайым. Һуңғы йылдарҙа йәмғиәтебеҙҙә әхлаҡһыҙлыҡ күренештәре киң таралыу табып, Рәсәй халыҡтарының киләсәгенә хәүеф янай башланы. Бигерәк тә йәш быуынға бала саҡтан уҡ дөрөҫ әхлаҡи йүнәлеш биреү мөһим, бының өсөн дини-мәҙәни тәрбиә эштәрен дә юлға һалыу фарыз. Дини мәҙәниәткә ылыҡтырылған балалар әхлаҡлы вә иманлы булып үҫер. Дин тарихын, уның әхлаҡи мәҙәниәтен белеү олораҡ быуындарға ла кәрәк, сөнки бик күптәр бөгөн бер ниндәй нигеҙе булмаған астрология, йә төрлө секталар менән мауыға башланы.

Ил Президенты ҡуйған проблема үтә ҡатмарлы булып, башҡа бик күп мәсьәләләр менән бәйле. Уларҙы хәл итеү өсөн иң кәмендә 2-3 йыл ваҡыт кәрәк буласаҡ. Иң әүәл әҙерлекле педагогик кадрҙар булыуы мөһим. Был дәрестәр тарих йә мәҙәниәт предметы уҡытыусыларына тапшырылған хәлдә лә, улар өсөн тәүҙә махсус курстар ойоштороу зарурлығы бар. Шулай уҡ был предметтың программаһын төҙөү, уҡыу әсбаптары, методик ҡулланмалар баҫыу эшен дә яйға һалыу кәрәк буласаҡ.

Мәктәп программаларына ошо яңы предметты индереүҙе йәмәғәтселек ыңғай ҡабул итер, тип уйлайым. Халыҡта дингә ынтылыш бар һәм әлеге ҡатмарлы заманда дингә, иманға ҡайтыу милләт өсөн дә бик файҙалылыр. Йәнә, ошо дәрестәр телебеҙҙе, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе, рухи мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлау вә үҫтереү сараһы буласағын да иҫәпкә алыу фарыз.

*Закир ЗИННӘТУЛЛИН, журналист:*

Иң элек беҙҙә әле генә йәмғиәт алдына сығарылған мәсьәләнең донъяның башҡа илдәрендә нисек хәл ителеүен иғтибарға алыу мөһим. Цивилизациялы илдәрҙә мәктәптәрҙә дини тәғлимәт уҡытылмай. Әлбиттә, мәктәп йәшендәге балаларға христиан дине тарихы һәм мәҙәниәте буйынса донъяуи фәндәр аша бер ни тиклем мәғлүмәт бирелә, әммә Европала һәм Американа мәктәптәрҙә руханиҙарға урын юҡ. Беҙҙә лә дин әһелдәрен мәктәпкә индереү, уларҙы уҡытыу эшенә йәлеп итеү ил Конституцияһы нормаларын боҙоу булыр ине. Дин әһелдәре дини мәҙәниәтте түгел, дини тәғлимәтте балалар аңына һеңдереүҙе өҫтөн күрәсәк. Теге йәки был динде балаларына өйрәтеү - һәр кемдең, һәр ғаиләнең шәхси эше, бының өсөн мәктәптән тыш ойошмалар, махсус уҡыу йорттары бар. Ғөмүмән, был дәрестәр мәктәп программаларына индерелә ҡалһа, уны уҡытыуҙы мәғариф органдары даими күҙәтеү аҫтына алып, ҡәтғи контролдә тоторға тейеш. Мин үҙем мәктәптә дин тарихын һәм мәҙәниәтен махсус рәүештә уҡытыуҙың бер кәрәге лә юҡ, тип иҫәпләйем, сөнки ошо уҡ мәғлүмәтте уҡыусыларға тарих һәм мәҙәниәт предметтары аша ла еткереп була бит.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ яҙып алды.**

### ҺИММӘТЛЕ ФЕКЕР!

**"Башҡортостан һәм Татарстан - дәүләт сәйәсәте һаҡланып ҡалған усаҡтар ул. Ә Президент Рәхимов идара итеүселәрҙең юғала барған формацияһына инә. Ул идара итеүсе генә түгел, милләт атаһына, уның символына әйләнгән шәхес. Европа кимәлендәге сәйәсмәндәргә бындай сифаттар бөтөнләйгә хас түгел. Ул республика өсөн бик ҡиммәтле кеше".**

**Александр ПРОХАНОВ, яҙыусы.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАР ДОНЪЯНЫ ХАЙРАН ИТКӘН

## беҙ Сибайҙар түгелме!




**Сибай балалар сәнғәт мәктәбенең "Гөлдәр" өлгөлө балалар бейеү ансамбле Төркиәнең Аланья ҡалаһында үткән Һәләтле балалар һәм ижади йәштәрҙең V "Уңыш талисманы" халыҡ-ара фестиваль-конкурсынан Гран-при яулап ҡайтты! Бынан тыш, "Гөлдәр"ҙәр тағы бер нисә номинацияла еңеү яуланы. Ҡалабыҙҙың ғына түгел, ә республикабыҙҙың намыҫын яҡлаған, йәмғеһе 5 еңеүсе кубогы алып ҡайтҡан балаларға "Афариндар!" тиергә генә ҡала.**

"Гөлдәр" өлгөлө балалар бейеү ансамбле 27 йыл сәхнә түрен лайыҡлы яулап килә. Халыҡ-ара һәм республика конкурс һәм фестивалдәр лауреаты булған ансамблде талантлы педагог Луиза Рәил ҡыҙы Яхина етәкләй. Ансамблдең репертуарын башлыса халыҡ бейеүҙәре тәшкил итә. "Ҡара юрға", "Һабантуй", "Ҡурай сәскәһе" кеүек халҡыбыҙҙың милли колоритын, рухи йөҙөн, күңел байлығын һүрәтләүсе бейеүҙәр ансамблдең визиткаһына әйләнгән. Әлеге көндә ансамблдә өс йәштән ун ете йәшкә тиклемге 70-кә яҡын бала шөғөлләнә. Уларҙы тырышлыҡ, бейеү сәнғәтенә һөйөү, еңеүҙәргә ынтылыш һәм уртаҡ маҡсаттар берләштерә.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЯҒЫМЛЫ ҺӘМ МӨЛӘЙЕМ

## хоҡуҡ һаҡсылары

**Рәсәй Федерацияһының Эске эштәр министрлығы милиционерҙарға ҡулға алынған граждандар менән ниндәй мөғәмәләлә булырға кәрәклеген ентекләп аңлатҡан яңы бойороҡ сығарған. Хәҙер хоҡуҡ һаҡсылары бөтә граждандар - ауыр енәйәт ҡылғандар, иҫеректәр менән дә матур итеп һөйләшергә, үҙҙәрен лайыҡлы тоторға бурыслы.**

Әлбиттә, улар ҡулға алынғандарҙы бығаулауҙан тыш тиклем дә хөрмәт итергә тейеш ине, был хаҡта 1991 йылда раҫланған "Милиция хаҡында"ғы Федераль закон-да аңлатылған. Әммә яңы бойороҡ ике яҡ араһындағы мөнәсәбәттәрҙең нисек булырға тейешлеген ентекләп, аныҡ билдәләп аңлата. Мәҫәлән, хәҙер кешеләрҙе һорау алырға махсус кабинеттарға ғына саҡырырға мөмкин. Әгәр милиционерҙар кешене хаталыҡ менән ҡулға алған икән, рәсми рәүештә ғәфү үтенергә тура киләсәк. Ҡулға алынған кеше һорауы менән милиционерҙар уның туғандарына, адвокатына шылтыратырға бурыслы. Ҡулға алынған граждан балиғ булмаған үҫмер икән, уны енәйәтселәр менән бер камераға ултыртырға ярамай, шулай уҡ тиҙ арала туғандарын, опекундарын саҡырырға кәрәк.

Милиция бүлегенә килтерелгән граждан иҫерек икән, уны медицина учреждениеһына айнығырға ебәрәләр. Шулай уҡ милиция бүлегенә телефон аша шылтыратҡанда дежур милиционер һеҙҙең һорауҙарға матурлап яуап бирергә бурыслы. Әлбиттә, һорауҙарҙың мәғәнәле, хоҡуҡ һаҡлау органдарының компетенцияһында булыуы шарт.

# МАХСУС ХЕҘМӘТ

## хаттарҙы һәм посылкаларҙы тикшерәсәк

**Коммуникатив бәйләнеш министрлығының "Оператив эҙләү сараларын үткәреү өсөн почта бәйләнеше селтәренә һәм сараларына ҡарата талаптарҙы раҫлау тураһында"ғы 65-се бойороғо көс хеҙмәткәрҙәренә һәр хатты һәм посылканы асып ҡарау хоҡуғын бирә.**

Былар барыһы ла кешеләрҙең хәүефһеҙлеге өсөн эшләнә. Бойороҡта әйтелеүенсә, һәр почта бүлексәһендә махсус әҙерлек үткән көс хеҙмәткәре буласаҡ һәм улар шикле хаттарҙы һәм бандеролдәрҙе асып ҡараясаҡ. Документта был вазифа "дәүләт органы тарафынан вәкәләт бирелгән кеше" тип күрһәтелә. Почта бүлексәһендә уларға айырым бүлмә тәғәйенләнә, өҫтәүенә, почта хеҙмәткәрҙәренә "цензор"ҙар эшенә ҡыҫылыу һәм уларҙың бүлмәһенә рөхсәтһеҙ инеү тыйыла.

Күп кенә йәмәғәт эшмәкәрҙәре һәм адвокаттар бәйләнеш министрының бойороғона ҡаршы, сөнки Конституция рәсәйлеләргә "йәшерен хат яҙышыу, телеграф һәм башҡа хәбәрләшеүҙәр хоҡуғын" гарантиялай һәм был хоҡуҡтан тик суд ҡына мәхрүм итә ала. Әммә бойороҡта көс хеҙмәткәрҙәренең почтаны суд рөхсәте буйынса тикшерергә тейешлеге тураһында бер һүҙ ҙә юҡ.

НИҺАЙӘТ!

# ҺӘЙКӘЛДӘР - ТЕРЕЛӘРГӘ



**Баш ҡалабыҙ Өфөлә башҡорт халҡының легендар ҡаһарманы, генерал Миңлеғәли Шайморатовҡа һәйкәл ҡуйыласаҡ.**

Башҡортостан Республикаһының Төҙөлөш, архитектура һәм транспорт министрлығы БР Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы, Өфө ҡала округы хакимиәте, Рәсәй Рәссамдары союзының Республика бүлеге һәм БР Архитекторҙары союзы менән берлектә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, генерал Миңлеғәли Минһаж улы Шайморатовҡа һәйкәл (бюст) проектын эшләү буйынса асыҡ республика конкурсы уҙғарыу тураһында иглан итте. Проект эштәре 2009 йылдың 1 октябренә тиклем республиканың Төҙөлөш, архитектура һәм транспорт министрлығында ҡабул ителәсәк.

Илебеҙ азатлығы өсөн башын һалған башҡорт батыры быныдай хөрмәткә күптән лайыҡ ине. Башҡорт йәмәғәтселеге уға үлгәндән һуң герой исемен бирҙертеү мәсьәләһен ҡаттан-ҡат күтәреп ҡараһа ла, ил етәкселәре бығауланмаған ата илтифат итмәне. Герой тигән рәсми исеме булмаһа ла, генерал Шайморатов халҡы хәтерендә мәңгегә батыр булып ҡаласаҡ. Шуның өсөн ошо шатлыҡлы хәбәр ватандаштарыбыҙҙың күңелен йылытып, үҙенә күрә бер йыуаныс рәүешендә ҡабул ителер, тип уйлайбыҙ.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП

**Илдар ШӘЙӘХМӘТОВ, Рәсәй дизайнерҙары союзы ағзаһы, республика Хәрби дан музейы хеҙмәткәре:**

- Өфө ҡалаһында генерал Шайморатовҡа һәйкәл (бюст) ҡуйыу тураһындағы ҡарарҙы бик шатланып ҡабул иттек. Был Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына ҡарата яһалған баҙыҡ аҙымдарҙың береһе ул. Әлбиттә, баш ҡалабыҙҙың Дан паркында батырҙарыбыҙҙың бюстары үҙ урынын алырға тейеш, был - аксиома. Әммә Миңлеғәли Шайморатов кеүек батырҙарыбыҙ ҙурырыҡ, мөһабәтерәк һәйкәлдәргә лайыҡлы. Юғиһә, һуңғы ваҡытта беҙ бюст ҡуйыу менән мауығып, мәсьәләне еңел юл менән генә хәл итергә өйрәнеп алдыҡ. Беҙҙең милли батырҙарыбыҙ бик күп, шул уҡ ваҡытта, Салауат Юлаевтан башҡа, уларҙың береһенә лә атлы һәйкәл ҡуйыу зарурлығы иғтибарға алынмаған. Башҡорт яугиры һәм уның тоғро аты айырылғыһыҙ, башҡорт ғәскәрен атһыҙ күҙ алдына ла килтереп булмай. "Ҡайҙа ла ғына бармай, ниҙәр күрмәй, ир-егеткәй менән ат башы", тиелә бит мәшһүр йырыбыҙҙа ла. 2011 йылдың ноябрендә Башҡорт кавалерия дивизияһының ойошторолоуына 70 йыл тулыуын онотмайыҡ. Ил өсөн башын һалған данлы милләттәштәребеҙ рухын мәңгеләштереү өсөн баш ҡалабыҙҙа генерал Шайморатов һыны ла ингән атлы һәйкәл ансамблен ҡуйһаҡ, беҙ бер изге бурысыбыҙҙы үтәүгә өлгәшер инек.

Беҙ әле генә ҡаһарман генералыбыҙ һәм уның батыр яугирҙары ҡан ҡойған Украина еренән ҡайтып төштөк. Беҙгә Петровское ҡалаһына барып, батырыбыҙ ҡаберендә уның енелмәҫ рухына баш әйеү насип булды. Шуныһы ҡыуаныслы: Украина кешеләренең олоһо ла, кесеһе лә ҡаһарман башҡорт генералын һәм уның яугирҙарын онотмаған, етәкселәре лә быға ҙур иғтибар бүлә. Петровское ҡалаһында генерал Шайморатов урамы, уның исемендәге майҙан бар. Штеровка ауылының бер урамы уның исемен йөрөтә, музейында башҡорт атлыларына арналған стенд та бар. Көҙгә табан Петровское ҡалаһында Башҡорт кавалерия дивизияһына һәм уның командиры генерал Шайморатов хөрмәтенә ҙур сквер асылып, унда Капустин гранитынан иҫтәлекле таш ҡуйыласаҡ. Генерал Шайморатовтың тыуыуына 110 йыл тулыуҙы улар тантаналы рәүештә билдәләп үтәсәк. Беҙгә лә ошо украин дуҫтарыбыҙҙан тарихи хәтеребеҙҙе һаҡлау буйынса өлгө алып, әүҙемерәк булыу фарыҙ.

Беҙҙе, данлы башҡорт яугирҙары вариҫтарын, улар һәр ҡайҙа ла оло хөрмәт менән ҡабул итеп, сентябрь аҙағында сквер асыу тантанаһына ихлас саҡырҙы.

Әйткәндәй, Башҡортостан Республикаһының Хәрби дан музейы "Данлы атлылар юлынан" тигән акция проектын эшләп, Президент грантына лайыҡ булғайны. Сентябрь аҙаҡтарында ошо акция сиктәрендә Башҡортостан делегацияһы Украинаның Луганск өлкәһенә мотлаҡ барасаҡ. Киләсәктә Өфөлә генерал Шайморатовҡа ҡуйыласаҡ бюстың икенсе өлгөһөн дә эшләтеп, уның Петровское ҡалаһындағы ҡаберенә алып барып урынлаштырһаҡ, батырыбыҙ рухына бағышланған тағы ла бер изге эш булыр ине. Был ғәмәлгә ашырыу артыҡ ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырмаясаҡ.

Һүҙемде тамамлар алдынан Украина ерендә йәндәребеҙҙе тетрәткән, уй-кисерештәргә һалған бер күренеште иҫкә алмаһам, хилаф булыр һымаҡ. Беҙҙе генерал Шайморатов фашистар менән алышып, башын һалған яланға алып барҙылар. Тап шул ерҙә яңғыҙ мөһабәт имән үҫеп сыҡҡан да, үҙенең кин сатыр-ҡолаһын йәйеп, килгән бер кешене ҡаршылап тора. Беҙгә данлы башҡорт улының рухы шул имән булып ҡалҡып сыҡҡан кеүек тойолдо шул саҡта. Күрәһегеҙ, хатта тәбиғәт тә, ҡаһарманлыҡ рухын хөрмәтләгәндәй, башҡорт батырҙары ҡаны менән һуғарылған ерҙә үҙ һәйкәлен шулай ҡорған.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, республиканың 32 районында хужалыҡтар ураҡҡа төшкән.

✓1 августан Рәсәйҙә хеҙмәт пенсияларының страховка өлөшө 7,5 процентҡа арта. Башҡортостанда был үҙгәреш 943 меңдән ашыу пенсионерға ҡағыласаҡ. Пенсияны тағы ла арттырыу 1 декабрҙә буласаҡ - хеҙмәт пенсияһының база өлөшө һәм социаль пенсия 31,4 процентҡа индексацияланасаҡ. Шулай итеп, 2009 йылда пенсиялар дүрт тапҡыр индексацияланасаҡ.

✓Донъялағы халыҡтың 28 проценты тәмәке тарта, ә Рәсәйҙә ир-аттың - 60, ҡатын-ҡыҙҙарҙың 25 проценты тәмәке тарта. Шуға ла Бөтә Рәсәй "Милләттең сәләмәтлеге лигаһы" йәмәғәт ойошмаһы танылған кардиохирург, академик Л. Бокерия етәкселегендә "Рәсәй - тәмәкегә ҡаршы" программаһы сиктәрендә тәмәкегә ҡаршы көрәшкә йүнәлтелгән ҡултамғалар йыя башланы. БР Президенты Мортаза Рәхимов һәм БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы был инициативаны хупланы. 25 июлдән 25 августҡа тиклем республиканың барлыҡ дауалау-профилактика учреждениеларында "Рәсәй - тәмәкегә ҡаршы" кампанияһы үтәсәк.

✓"Баштехинформ" күргәҙмәләр үҙәгендә 3 августан мәктәп йәрминкәһе башланасаҡ. Йәрминкәлә республиканың 18 предприятиеһы ҡатнашасаҡ, тип көтөлә. Йәрминкәнең адресы: Өфө ҡалаһы, Киров урамы, 15.

✓Баймаҡ районының "Ғәҙелша" ял базаһында "Башҡорт" спорт-патриотик лагеры үҙ эшен тамамланы. Ул Сибай ҡала хакимиәте йәштәр эштәре буйынса комитетының йәйге профилле лагерҙар программаһы конкурсында отҡан грант аҡсаһына ойошторолғайны. 60-ҡа яҡын үҫмер ул лагерҙа спорт-патриотик әҙерлек үтте, ижади конкурстарҙа ҡатнашты.

✓"Салауат Юлаев"хоккей командаһы матчтарын хәҙер словак һәм чех көйәрмәндәре лә ҡарай аласаҡ. Континенталь хоккей лигаһының рәсми сайты хәбәр итеүенсә, Лига КХЛ чемпионаты матчтарын Чехия һәм Словакия территорияһында ла күрһәтеү хоҡуғы тураһында Чехия спорт каналы менән килешеү төҙөгән.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# ҒӘФҮ ИТ, СЕРЖАНТ...

## Йәки Америка президенты беҙҙекенән нимәһе менән айырыла?

**Обама аҙым һайын ғәжәпләндерә мине, йәмәғәт. Прәме, аптырата. Әллә мин бөтөнләй башҡа йәмғиәттә йәшәйем. Әллә ул сит планетанан осраҡлы рәүештә генә ергә килгән бер йән инде?**

Хәйер, бөтәһен дә баштан башларға кәрәктер. Йәғни, минең Америкаға булған мөнәсәбәтемдән. Аңлап торам, ул илгә минең фекерем бар ни ҙә, юҡ ни. Шулай ҙа, кем берәү әйтмешләй, үлһәм дә, әйтеп үләм. Дөрөҫө шул, Американы яратып етмәйем мин. Бәләкәй саҡтан уҡ. Атайым яҙҙырған гәзиттәрҙәге сит ил тормошонан фоторәсемдәрҙе ҡарауҙан килгәнме ул ҡараш, аңлашылмай. Дошман күреп үҫтем мин уны. "Том ағаҡайҙың аласығы" тигән китапты уҡығас иһә, Америкаға ҡарата фекерем нығынды ғына. Бары тик беҙҙең илдә генә гәҙеллек хөкөм һөрә, тип үҫтем. Бары тик беҙҙең илдә генә бөтәһе лә бер-береһе алдында тигеҙ хоҡуҡлы, тип уйлап, кеше булдым. Шул уҡ ваҡытта Америка индеецтары, АҠШ ҡара тәнлеләре өсөн йөрәгем янды. Уларҙы кәмһетәләр, ҡыйырһыталар, хоҡуҡтарын ҡыҫалар, йәшәргә ирек бирмәйҙәр, тип йәнем көйҙө.

Ҡара тәнле Обаманы президент итеп һайлап ҡуйғастар, аптырандым. Әле кисә генә ҡара тәнлеләрҙе америкалылар хайуан урынына эксплуатациялай ине, бөгөн килеп уларҙың вәкилен дәүләт башлығы итеп һайлауҙары башҡа һыймаһы. Быны ғәжәп, тип баш ваттым. Хәҙер Барак Обама быуаттар буйына йәберләнгән, мал урынына егелгән, һуйылған мендәрләгән негр өсөн аҡ тәнлеләрҙән үс ала башлар микән, тип көттөм. Бушҡа көттөм, йәмәғәт. Барак Обама кеше булып сыҡты. Йәғни, ул былай ҙа кеше ине инде. Әммә ул оло мәғәнәлә, ҙур хәрефтән Кеше икәнлеген раҫланы. Үҙенең бер генә ҡылығы менән иҫбатланы ул быны.

Бәлки, мин Америка президентын урынһыҙ маҡтайымдыр. Бәлки, йәмәғәт, бер сиктән икенсе сиккә ташланамдыр? Антиамериканизмдан американизмға биреләмдер? Тәҙәтеңһегеҙ. Хаҡлы түгелһең, тип әйтерһегеҙ, тип ышанам. Хәйер, үҙегеҙ ҡарағыҙ.

Үткән аҙнала Америка Ҡушма Штаттарында Барак Обама менән бәйле шау-шыу ҡуба. Кембридж ҡалаһының полицейскийҙар профсоюзы АҠШ президентына ғәфү үтенергә тәҡдим итеп хат яҙа. Һәм, шуныһы ғәжәп, Барак Обама рәсми рәүештә бар халыҡ алдында ғәфү үтенергә мәжбүр була. Эш нимәлә, тип һорарһығыҙ. Был ваҡиғаның асылына төшөнөр алдынан үҙегеҙгә һорау биргем килә: әйтегеҙ әле, илебеҙ тарихында етәкселәребеҙҙен, айырым кеше алдында булһынмы, әллә тотош халыҡ алдындамы, ғәфү үтенгәндәрен күргән-ишеткәнегеҙ булдымы? Мин - бар. Бер тапҡыр. Борис Ельциндың Яңы 2000 йылды ҡаршылаған төндә: "Ғәфү итегеҙ. Мин арыным. Мин китәм", - тигәне һаман хәтерҙә. Ныҡ тетрәндерҙе уның был белдереүе. Бөйөк илде тарҡатҡаны, халыҡты бөлгөнлөккә төшөргәне, тормошҡа ашыра алмаҫлыҡ хыялдары менән кешеләрҙе алдағаны өсөн ғәфү үтенде микән - хәҙер уны ҡәберҙән торғоҙоп һорап булмай инде. Йәл.

Обама үҙ вазифаһын ташлап китергә йыйынмай. Ә уны ғәфү үтенергә мәжбүр итеүсе сәбәп - ҡара тәнле профессор менән аҡ тәнле полицейский араһында булған низағ. Быуа ул тарих. Гарвард университетының профессоры Генри Луис Гейтс командировканан ҡайта. Әммә йортона инә алмай. Йоҙағы боҙоҡ буламы, әллә асҡысы тап килмәйме - был хаҡта бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ. Аптырағас, профессор ишекте емереп инергә ҡарар итә. Дөрөҫ фекерме? Әлбиттә. Беҙ бөтәбеҙ ҙә шулай итер инек, моғайын. Үҙ йортомдоң ишеге, ни теләйем, шуны ҡылам. Америкала түгел. Профессорҙың һиҙгер күршеһе уны танымай һәм, тәбиғи, полиция саҡырта. Әйтегеҙ әле, һеҙ милицияға йыш шылтыратаһығыҙмы? Урамда ят малайҙар машиналар эргәһендә уралһа, йәки күршегеҙҙән төргәктәр тотоп таныш булмаған бәндә сығып барһа, ә? Шулай шул. Ә Америкала был ғәҙәти хәл икән. Тиҙ арала килеп еткән полицейский сержант Джеймс Кроули профессорҙан аңлатма талап итә. Йәнәһе, кем һин, бында ни эшләп йөрөйһөң? Профессор тауыш күтәрә. Йортом - ҡәлғәм, ти. Бәйләнмәгеҙ минә, ти. Хатта полицейскийҙарға тауыш күтәрә. Ҡара тәнлеләргә бәйләнергә генә эшкинәһегеҙ, тип ысҡындыра, буғай. Сержант оҙаҡ уйлап тормай, тәртип боҙғаны өсөн профессорҙы участкаға оҙата.

Шуныһы ғәжәп - был ваҡиға шунда уҡ президенттың ҡолағына ишетелә. Йәнәһе, полицейскийҙар бер ғәйепһеҙ ҡара тәнле профессорҙы ҡулға алған. Барак Обама оҙаҡ уйлап тормаған. Гейтстың ҡулға алыныуын ҡара тәнлеләрҙе дискриминациялау менән бәйләгән. Уның ошо һүҙҙәренән һуң полицейскийҙарҙың профсоюзы етәкселеге Барак Обамаға мөрәжәғәт итә лә инде.

АҠШ президенты Кембридж полицейскийҙарынан һәм сержант Кроулиҙан ғәфү үтенергә мәжбүр була. Ауыҙымды уйлап асырға һәм һүҙҙәрҙе ентекләберәк һайларға тейешмен, тип белдерә ул. Һәм профессор Гейтс менән сержант Кроулиҙы Аҡ йортҡа һыра эсергә саҡыра. Профессор ризалашҡан, имеш. Ә сержант һаман президент янына барырғамы-юҡмы, тип уйлана икән.

Америка президенты менән бәйле тарих ошо урында тамам. Океан арьяғынан, үҙебеҙгә, Рәсәй Федерацияһына ҡайтайыҡ. Эйе, беҙҙең президенттар әлегә ғәфү үтенә белмәй. Быға тиклем өҫтә әйтеп үтелгән миҫалдан тыш, башҡаларын ишеткән юҡ әле. Әллә сәбәптәре тыумаймы? Әйтәйек, чечен халҡы һуңғы ун йыл эсендә кисергән ҡайғыхәсрәт өсөн иң юғары кимәлдән ғәфү һүҙҙәрен ишетеүгә хаҡлы түгелме? Матди яҡтан улар, бәлки, юғалтҡандарын күпкә арттырып ҡайтарғандарҙыр, ә быna күңел яраларын бер нисек тә уналта алмайҙар. Һәм Рәсәй дәүләтенә булған үпкәләре яман шеш кеүек тулыша ғына.

Дәүләт вәкиле булған милиционер Евсюковтың ҡорбандарының яҡындары алдында кем ғәфү үтенергә тейеш икән?

Шундай бер фекер ишетеп аптыраным - йәнәһе, беҙҙең халыҡ (Рәсәй халҡы, тип аңларға кәрәктер) ғәфү үтенеүгә көсһөҙлөк билдәһе, тип ҡабул итә. Тимәк, уның алдында ғәфү үтенгән етәксене түрә, башлыҡ, тип танымай. Шулай булғас, беҙҙең халыҡ алдында теге йәки был сәбәп менән ғәфү үтенеү - үҙ-үҙенде түбәнһетеү менән бер. Ниндәй етәксе быға барһын инде?

Американдар был йәһәттән нисек икән? Әллә улар ҙа үҙ ғәйептәрен таныған президенттарына көлөп ҡарайҙар микән?

**Таһир ИШКИНИН.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

## БАТЫРҺЫҘ МИЛЛӘТ БАХЫРҒА ӘЙЛӘНӘ

Ауылға ялға ҡайтып барам. Ҡаланың ярты халҡы тиғәндәй автобустарға тейәлгән. Мин ултырған автобуста ла бер аяғында баҫып торорлоҡ та урын ҡалмаған. Пассажирҙар аҡсаны ҡулдан-ҡулға күсереп, билет ала. Ләкин бер ситтәрәк тороусы ике ир генә билетты булырға ашыҡмай. Кеше күплегенә ҡарамаҫтан, контролер быларҙы шәйләп ҡалған икән барыбер. Пассажирҙарҙы этеп-төртөп тигәндәй, алдарына килеп тә баҫты. Был ике ирҙең билет алырға аҡсалары юҡ икән. Сөнки туҡталышта автобус көткәндә уларҙың һуңғы тинен милиция хеҙмәткәрҙәре тартып алған, имеш. Һәр хәлдә, улар шулай тип аҡланды. Контролерҙың әр һүҙҙәренән былай ҙа тар автобус эсе тағы ла бәләкәсәйеп ҡалғандай булды. Һәм ҡолаҡтарҙы: "Сразу видно, башкиренок!" - тигән һүҙҙәр телеп үтте. Гүйә, өҫкә бар донъяның сүп-сары ҡойолдомо ни!

Контролерҙың тупаҫлығына, наҙанлығына түгел, ә әлеге ир-егеттәрҙең сабыр ғына ошо кәмһетеүҙәрҙе тыңлап тороуына, ауыҙ асып бер һүҙ әйтмәүенә асыу килде. Шул рәүешле улар үҙҙәрен генә түгел, ә тотош милләтте кәмһетеүгә юл ҡуйҙы. Автобустағы халыҡ араһынан кемдәрҙендер контролерҙың һүҙенән кинәнес табып, мыйыҡ аҫтынан ғына көлөүе әрнеүемде тағы ла нығыраҡ арттырҙы. Батырһыҙ милләт бахырға әйләнә, тигән халыҡ мәҡәленең дөрөҫлөгөнә инандым шул саҡ. Үҙең бахыр хәлеңә төшкәндә лә үҙ бахырлығыңды милләтеңә япһарма, тип әйтке килде был икәүгә. Ошо һүҙҙәрҙе башҡа егеттәребеҙгә лә төбәйем.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## ЗАМАНЫНА КҮРӘ ХӘБӘРЕ

Кризис нимә ул? Ҡайҙан килеп сыҡҡан? Бер кем белмәй, аныҡ ҡына яуап та бирә алмай. Уның төп асылын аңлаусылар барҙыр, әммә улар аңлағандар бар халыҡтың да зиһененә барып етмәй шул...

Шуға бәйле әсәйҙәр һөйләгән бер ваҡиға иҫкә төшә. Элек тирмән ауылдың байҙарында ғына булған, күптәр бойҙайҙы ҡул тирмәне менән тартҡан бит. Бер саҡ ауыл ҡатын-ҡыҙҙары бер байҙың тирмәненә сиратҡа баҫҡан, ти. Байҙың малайы килеп инә былар янына, әсәһе уға тиҙ генә тирмәндә бойҙай тарттырып алырға ҡуша. Үҙенең хужа икәнен белдерергә теләгәндәй, малай тәүҙә сираттағыларға фыртым ғына көлөмһөрәп ҡарап ала, йәнәһе, һеҙ кем дә, мин кем! 9-10 йәштәр самаһында булһа ла, һөйләшеүе бик насар икән үҙенең. Тирмән төбөнә йәтешләп ултырып алғас, мут йылмайып: "Әсәй! Онно, ярнанны?" - тип ҡысҡырып һорап ҡуйған ти был. Әсәһе: "Ярнанны", - тип яуаплай. Сираттағы ҡатын-ҡыҙҙар был икәүҙең ни тураһында һөйләшкәнен аңламайынса, берберәһенә ҡараша. Аҙаҡ ҡына бер әрһеҙерәк ҡатын һорашып, быларҙың хәбәренең айышына төшөнә. Баҡтиһәң, "Бойҙайҙы онғамы, ярмағамы тартырға?" тигән һорау биргән икән малай...

Кризис та шул "Онно, ярнанны?" һымағыраҡ инде.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостандың дауалау-профилактика учреждениелары Күкрәк менән имеҙеүҙе хуплау буйынса Бөтә донъя аҙналығына ҡушыла. 1-7 августа үткән аҙналыҡ сиктәрендә республиканың ҡатын-ҡыҙҙар консультацияларында, бала табыу йорттарында төрлө саралар үткәреләсәк.

✔РФ Ауыл хужалығы министрлығында Волга буйы федераль округының ҡоролоҡтан зыян күргән төбәктәре менән видеоконференцияла экспертиза үткәреү һәм зыянды федераль бюджеттан ҡаплау өсөн документтар әҙерләү мәсьәләләре тикшерелде. Башҡортостанда 500 мең гектарҙан ашыу майҙанда сәсеүлек юҡҡа сыҡҡан. Ырымбур өлкәһендә был зыян 1,1 миллион гектарҙан ашыу, Һамарҙа - 591, Татарстанда 300 мең гектар майҙанда зыян күрелгән.

✔БР Юстиция министрлығында "Ышаныс телефоны" эшләй башланы. Линия министрлыҡ ҡарамағына ҡараған хеҙмәттәрҙә коррупцияға ҡаршы көрәште көсәйтеү маҡсатында ойошторолдо. (347) 273-40-47 телефоны буйынса шылтыратып, граждандар Юстиция министрлығының үҙәк аппаратында осраҡҡан проблемалар, мировой судьялар, ЗАГС бүлектәре менән эшләгәндә һәм дәүләт нотариат контораларында үҙҙәре килешмәгән күренештәр тураһында хәбәр итә ала.

✔Хәҙер медицина учреждениелары һәм табиптар граждандарға гарантияланған түләүһеҙ медицина ярҙамы күрһәткәндә закон боҙған өсөн ҡәтғи административ һәм енәйәт яуаплылығына тарттырыласаҡ. БР һаулыҡ һаҡлау министры Андрей Евсюков шундай бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы.

✔"Астана-Аркау" төрки музыка фестивале жюрийы Башҡортостан ҡурайсыһы Мөхәмәт Түләбәевтың сығышын юғары баһаланы һәм төп приз - "Халыҡ көйҙәрен үҙенсәлекле башҡарғаны өсөн" дипломын тапшырҙы. Иҫтәлекле бүләкте яҡташыбыҙ "Төрксой" халыҡ-ара ойошмаһы президенты Дюсен Касеинов ҡулынан алды. Мөхәмәт ҡурайсыға шулай уҡ думбыра ла бүләк ителде.

✔Өфө ҡыҙы Гөлназ Ғәбәйҙуллина пятиборье буйынса Египетта үткән Донъя беренселегендә бронза миҙал яулаған.

***✓ Ҡала урамдарын матур итеп биҙәү өсөн быйыл яҡынса 12 миллион һум аҡса тотонолған, был аҡсаларҙың 7 миллионына "Башҡортостан сәскәләре" совхозынан үҫентеләр һатып алынған.***



*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ЭШҠЫУАР БУЛЫРҒА ТЕЛӘЙҺЕҢМЕ?

**Бөтә Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге социологтары рәсәйлеләрҙең шәхси эшҡыуарҙарға мөнәсәбәтен тикшергән.**

Уларҙың һорауҙарына илдең төрлө төбәктәрендә йәшәгән 1600 кеше яуап биргән. Рәсәйлеләрҙең 79 проценты шәхси эшҡыуарҙарға ыңғай ҡарай. Бындай яуап биреүселәрҙең барыһының да таныш эшҡыуары бар, йәштәре 44-тән үтмәгән һәм, ҡағиҙә булараҡ, етеш йәшәй. 13 процент кеше эшҡыуарҙарға кире ҡарашын белдергән, улар башлыса аҙ тәьмин ителгән ғаилә ағзалары.

Көрсөк мәлендә үҙенең эшен асырға теләүселәр һаны ла кәмегән (55 процент), 5 процент респонденттың ғына шәхси бизнесы бар. Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә теләмәүҙең сәбәптәре лә төрлөсә: кемдеңдер башланғыс капиталы юҡ, йәше үткән, һаулығы насар (20-шәр процент), көрсөктән ҡурҡа (2 процент), 11 процент кеше быны өсөн кәрәкле сифаттарым юҡ, тип уйлай, 9 процент рәсәйлененең теләге юҡ. Кемгәлер ялланып эшләүсе булыу нығыраҡ оҡшай, кемдер бюрократик кәртәләрҙе үтергә теләмәй.

Кем үҙен эшҡыуар итеп күрергә теләй, улар магазин асыу тураһында хыяллана (22 процент), 8 процент респондент - хеҙмәтләндереү өлкәһендә, 7 проценты ауыл хужалығында үҙен һынап ҡарарға теләүен белдерә. Автомобиль, төҙөлөш бизнесы, йәмәғәт туҡланыуы өлкәһендә эшләргә теләүселәр ҙә бар. Рәсәйлеләрҙе медицина, косметология, туризм, йөк ташыу, информацион технологиялар һәм компьютерҙар (2-шәр процент), мәғариф (1 процент) өлкәләре лә ҡыҙыҡһындыра.

Рәсәйлеләр фекеренсә, көрсөк ваҡытында эш асыу тураһында уйлау аҡылһыҙлыҡ (66 процент). Был яуапты башлыса бәләкәй ҡалала йәшәүселәр (73 процент), килем күләме түбән йәки уртаса булған кешеләр (66-68 процент) биргән. Көрсөк осорон эшҡыуарлыҡ өсөн ыңғай мәл, тип, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта һәм уртаса ҙурлыҡтағы ҡалала йәшәүселәр (22-шәр процент) һәм матди яҡтан ауырлыҡтар кисермәгән рәсәйлеләр (30 процент) һанай.

# ЙӘШТӘР ӘҮҘЕМЛӘШӘ

**Рәсәй Федерацияһының Дәүләт Советы ултырышында Дмитрий Медведев урындағы үҙидара органдарына һайланыу йәшен 18 йәшкә тиклем түбәнәйтергә тәҡдим иткәйне.**

Йәштәр әле үк урындарҙа булдырылған йәмәғәт палаталары ярҙамында сәйәсәткә ҡушылып китә ала. Өфөлә бындай палата өс ай дауамында эшләп килә. Был ваҡыт эсендә йәштәр экологик шәмбеләр уҙғарырға, Йәштәр көнөнә арналған саралар ойоштороға өлгөргән. Йәштәр палатаһының ағзалары ҡала округы Советының бар ултырыштарында ла ҡатнаша. Өфөнөң Йәштәр палатаһына 17 кеше, тағы ла 22 йәш кеше кадрҙар резервында. Йәштәр палатаһы тураһында положениеға ярашлы, унда ҡала округы территорияһында йәшәүсе 16-28 йәшлек Рәсәй Федерацияһы граждандары инә ала.

Ҡала Советы рәйесе Ирек Ниғмәтуллин әйтеүенсә, йыл һайын әүҙем йәштәр һаны күбәйә бара. Улар асыҡ ултырыштарҙа ҡатнаша, ҡала трибунаһынан үҙенең фекерен белдерә, шуға ла Совет Йәштәр палатаһын булдырырға тигән ҡарарға килә. Бындай мәктәп үткән йәштәр киләсәктә үҙ эшен юғары кимәлдә белгән идара итеүсегә әйләнәсәк.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

**Баш ҡалабыҙ йылдың һәр миҙгелендә лә төҙөк һәм матур күренә, әммә йәй көндәрендә урам һәм майҙандарҙы сәскәләр менән биҙәү уны тағы күркәмерәк итә. Бының өсөн ғәҙәти клумбалар, газондар, альп өйөмдәренән тыш, вертикаль йәшелләндереү, йәғни яҡтыртыусы бағаналарға һәм махсус терәүҙәргә сәскәле кашполар элеү, күп ҡатлы газондар ҙа ҡулланыла.**



# БАШ ҠАЛАЛА...

## төҙөкләндереү мөғжизәләре

Ҡала урамдарын матур итеп биҙәү өсөн быйыл яҡынса 12 миллион һум аҡса тотонолған, был аҡсаларҙың 7 миллионына "Башҡортостан сәскәләре" совхозынан үҫентеләр һатып алынған. Сәскәләр һайлағанда төрлө төҫтәге петунияға өҫтөнлөк бирелә, унан тыш, ҡаланы биҙәү өсөн тағы 10 тиҫтәнән артыҡ үҫемлек сорты ҡулланыла.

Урамдарҙы һәм майҙандарҙы биҙәү эшенән тыш, баш ҡаланың коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы төрлө ремонт һәм төҙөлөш эштәрен башҡарыу, автомобиль юлдары селтәрен яҡшыртыу, уларҙың техник торошон күҙәтеү өсөн дә яуаплы. Был йәһәттән дә баш ҡалала яңылыҡтар байтаҡ ҡына. Мәҫәлән, Өфөнөң бер нисә урамында "зебра"лар ҡыҙыл һәм аҡ төҫтәргә буялды. Юлдың йәйәүлеләр үтә торған өлөшөн былай биҙәү юлдарҙа авариялар һанын кәметеп кенә ҡалмай, юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген арттырасаҡ. Шулай уҡ төнгө ваҡытта "зебра"ны күрһәтеп тороусы яҡтылыҡ сағылдырыусы материалдар ҡулланыу ҙа планлаштырыла. Киләсәктә термопластик ҡулланып, юлдарҙы билдәләп сығыу ҙа ҡаралған.

Быйыл ҙур төҙөлөш-монтаж эштәре бер нисә объектта бара. Октябрь районында ташҡындан һаҡлаусы дамба төҙөлә башлаған. Орджоникидзе районында Бөрө трактының тимер юлы менән киҫелешендә транспорт сиселеше төҙөү буйынса әҙерлек эштәре башҡарыла. Был проект 2010 йылда тормошҡа ашырыла башлаясаҡ. Ленин районында Ағиҙел йылғаһы аша күперҙә (Затон күпере) капиталь ремонт бара. Уның оҙонлоғо - 836 метр, киңлеге 14 метр. Был объектта ремонт эштәре 20 сентябргә тамамланырға тейеш. Өфөнөң автомобиль юлдарын иркенәйтеү маҡсатында Галле урамы башланған урындағы күперҙә йәйәүлеләр юлы төҙөү, Киров районындағы Пугачев урамын ремонтлау ҡаралған. Тәүге этапта Степан Кувыкин урамы дауам итәсәк транспорт сиселеше төҙөләсәк. Дим районының көнсығыш өлөшөндәге тимер юлы аша сығыу юлы төҙөү ҙә планлаштырыла. Бынан тыш, Совет районының Галле урамын реконструкциялау ҡарала, унда Салауат Юлаев проспекты аша Комсомол урамына тиклем юл күпере төҙөләсәк. Калинин районында Интернациональ урамын Вологда урамынан Машиналар төҙөүселәр урамына тиклем һуҙыу ҡаралған. "Үҫмерҙәр китапханаһы" туҡталышы районында йәйәүлеләр өсөн ер аҫты юлы проекты ла әҙерләнә. Жуков урамынан Богородская урамына тиклемге участкала Салауат Юлаев проспектының, шулай уҡ Баҡалы урамынан Менделеев урамына тиклемге арауыҡта Әй урамының, Софья Перовская урамынан Пугачев урамына тиклем Степан Кувыкин урамының дауамын проектлау эштәре алып барыла. Ҡеүәтле транспорт коридорын төҙөү маҡсатында М-5 һәм М-7 федераль трассаларын тоташтырыу планлаштырыла.

**Шулай итеп, баш ҡала төҙөкләндереү һәм төҙөлөш-биҙәү буйынса башҡа ҡалаларға ла өлгө күрһәтеүҙе дауам итә.**

*ШУЛА-АЙ ИКӘН...*

# УҠЫУ ЙОРТТАРЫНДА...

## ҡыҙыу осор дауам итә

**Быйыл республиканың ун дәүләт вузының бюджет бүлектәренә 9554 студент уҡырға ҡабул ителәсәк, уларҙың 8048-ҙе көндөҙгө бүлектә белем аласаҡ.**

Илдә Берҙәм дәүләт имтихандары индерелеү сәбәпле, юғары уҡыу йорттарына абитуриенттар ҡабул итеү процедураһы ла үҙгәрештәр кисерҙе. Яңы ҡағиҙәгә ярашлы, быйыл вуздарға ҡабул итеү бер нисә этаптан тора. 27 июлгә тиклем ҡабул итеү комиссиялары бөтә имтихандарҙың һөҙөмтәләрен ҡарап, уҡырға ингәндәр һәм резервта булғандар исемлеген әҙерләгәйне. Конкурсты үткән абитуриенттар 28 июлдән 3 августа тиклем ҡабул итеү комиссияһына вузға уҡырға инеү өсөн кәрәкле документтарҙың төп нөсхәләрен килтерергә тейеш. 4 августа вуздар уҡырға ҡабул ителгәндәрҙең исемлеген билдәләйәсәк. Әгәр ҙә вакант урындар ҡалһа, вуздың ҡабул итеү комиссияһы 5 августа яңы исемлек әҙерләй. Конкурсты үткән абитуриенттар 12 авгусҡа тиклем документтарының төп нөсхәһен тапшырып өлгөрөргә тейеш. 13 августа вузға ҡабул ителгәндәр исемлеге әҙерләнәсәк. Тағы ла урындар булһа, резерв исемлегендәге абитуриенттарҙан яңы исемлек төҙөләсәк, улар документтарын 14 августан 20 авгусҡа тиклем тапшырырға тейеш. 21 августа уҡырға инеүселәрҙең тулы исемлеге билдәле буласаҡ.

Ҡабул итеү комиссияһы ағзалары белдереүенсә, почта аша ғариза ебәреү мөмкинлеге менән ҡулланып, абитуриенттар бер юлы 10-15 вузға документтарын ебәргән - һөҙөмтәлә, вуздарға илдең төрлө төбәктәренән ғаризалар күп килгән. Быны, комиссия ағзалары фекеренсә, абитуриенттар бюджет урындарҙа уҡырға теләү принцибына таянып эшләй, ә вуз ҡайҙа урынлашыуы улар өсөн мөһим түгел. Шулай уҡ быйыл төрлө льготаларға эйә булыусылар һаны күбәйгән, хатта ҡайһы бер вуздарға бюджет урындарҙы БДИ-ны яҡшы һөҙөмтәләргә тапшырыусы абитуриенттар араһында түгел, ә льготаға эйә булыусылар араһында бүлергә тура килгән. БДУ-ла бар бүлектәрҙә лә конкурс юғары булған, шулай ҙа иң ҙур конкурс - социаль-иҡтисад факультетында һәм хоҡуҡ институтында. БДАУ-ҙа иң юғары конкурс "Менеджмент", "Финанс һәм кредит", "Предприятиеларҙы энергия менән тәьмин итеү", "Ер төҙөлөшө", "Ер кадастры" бүлектәрендә булған. БДПУ-ла "Информацион системалар һәм технологиялар", "Информатика", "Педагогика", "Генетика", "Инглиз теле" һөнәрҙәрен һайлаусылар күберәк булған.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә граждандарҙың быйылғы тәүге ярты йыллыҡта хакимиәткә килгән мөрәжәғәттәре тураһында һүҙ барҙы. Ошо осорҙа граждандар барлығы 9840 хат менән хакимиәткә мөрәжәғәт иткән. Ә хакимиәттең идаралыҡтарына һәм комитеттарына барлығы 22 мең граждан ғаризалар менән мөрәжәғәт иткән.

✓Өфөлә юл төҙөлөшөндә яңы типтағы ҡатышма - тиҙ туҙмай торған ҡырсынташ-мастика бетон асфальты ҡулланыла башланы. Әле ул Салауат Юлаев проспекты юл төҙөлөшөндә һәм ремонтлауҙа һынала. Быйыл баш ҡалала соҡорҙарҙы ремонтлауға аҡса былтырғыға ҡарағанда 30-40 процентҡа аҙыраҡ тотонолған, был былтыр юлдарҙа сифатлы капиталь ремонт үткәреү һөҙөмтәһе.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте бойороғо менән 10 сентябрҙән 9 октябргә тиклем опекун, ҡабул иткән һәм патронат ғаиләләр араһында "Иң яҡшы ҡабул итеүсе ғаилә" конкурсы үткәреләсәк.

✓18 августа 11 сәғәттә "Аҡбуҙат" ипподромы алдында урам баскетболы буйынса "Ҡыҙғылт-һары туп-2009" Бөтә Рәсәй күмәк ярыштары үтә. Унда Башҡортостандың төрлө райондарынан йыйылған ике меңгә яҡын профессиональ булмаған спортсы ҡатнашасаҡ.

✓Быйыл июль-октябрь айҙарында Өфө ҡала округы хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты "ИНДИГО" үҙәге менән берлектә "Йәш ғаилә -2009" конкурсы үткәрә. Конкурста 35 йәштән өлкән булмаған ғаиләләр ҡатнаша ала.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты августан ноябргә тиклем документаль һәм художестволы фотографиялар эшләүселәр өсөн Асыҡ ҡала йәштәр конкурсы үткәрә.Конкурста ике йәш категорияһында - 18 йәшкә тиклемгеләр һәм 18-35 йәштәгеләр ҡатнаша ала. Эштәр Өфө ҡалаһы, Октябрь прспекты, 118 адресы буйынса ҡабул ителә.

✓"Өфө ҡалаһы торлаҡ хужалығы идаралығы" МУП-ының www.ughufa.ru адресы буйынса рәсми сайты эшләй башланы. Сайтта торлаҡ-коммуналь комплексы тураһындағы хоҡуҡи документтар менән таныша, һорауҙарығыҙға яуаптар ала алаһығыҙ.

ИҠТИСАД ӘЛИФБАҺЫ

**Донъя иҡтисадында күҙәтелгән финанс көрсөгө мәлендә ялған аҡса яһаусылар үҙҙәренең енәйәт эшен әүҙемләштерҙе. Юғары технологиялар үсеше менән ялған аҡсалар сығарыу процесы күпкә ябайлашты. Ябай ҡулланыусыға енәйәтселәрҙең был ҡармағына эләкмәҫ өсөн нимәләрҙе белергә кәрәк? Башҡортостан Республикаһы Милли банкыһының түләү системаһы һәм ҡулаҡса менән эш итеү идаралығы начальнигы Татьяна ЗОТОВА менән әңгәмә ошо хаҡта.**

# АҘЫМ ҺАЙЫН АЛДАНАБЫҘ,

## хәҙер бына ялған аҡса менән...

**● Татьяна Вениаминовна, ҡулға уның ысын булыуына шик тыуҙырған аҡса килеп эләккәндә ниндәй саралар күрергә?**

- Әгәр ҙә банкноттың төп нөсхә булыуына икеләнеүҙәр барлыҡҡа килһә, унан ҡотолоу сараһын ниндәй ҙә булһа сауҙа нөктәләре йәки баҙарҙар аша күреү ярамай. Бындай аҙым енәйәткә булышлыҡ итеү кеүек ҡараласаҡ. Билдәле булыуынса, Рәсәй банкыһы билеттарын ялған юл менән сығарыу закон буйынса эҙәрлекләнә. Шуға күрә лә, бындай осраҡтарҙа экспертиза үткәреү өсөн коммерция банкыларына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Тик улар ғына купюраның түләй алыу һәләтен билдәләй ала.

**● Ҡайһы саҡта магазиндарҙа аҡсаның ысынлығына шикләнеп, уны ҡабул итеүҙән баш тарталар. Бындай осраҡтарҙа нимә эшләргә һәм һатып алыусының быға хоҡуғы бармы?**

- Банкнотты түләүгә ҡабул итмәйҙәр икән, бының сәбәбен асыҡларға кәрәк. Әлбиттә, аҡсаның ялған булыуына шик тыуған осраҡта кассирҙар банкнотты ҡабул итеүҙән баш тарта һәм милиция саҡырта ала. Ҡалған осраҡтарҙа быға банкноттың майҙаны 55 проценттан кәм булыуы йәки унда "өлгө" йәки "алмаштырыуға яраҡһыҙ" тигән яҙыулы штамптар банкнотты ҡабул итмәүгә сәбәп булып тора ала.

**● Банкомат ялған аҡса бирә аламы? Бындай осраҡта нимә эшләргә?**

- Һуңғы ваҡытта Рәсәй банкыһы банкноттарын ҡабул итеүсе төрлө түләү автоматтарын киң йәйелдереү ялған аҡсалар һатылыу хәүефе менән янай башланы. Ялған аҡса яһаусылар был автоматтарҙа ҡулланылған аҡсаның ысынлығын тикшереү ҡоролмаларының сикле мөмкинлектәре менән файҙалана һәм махсус рәүештә бындай автоматтар аша һатыуға сығарыуға йүнәлтелгән ялған аҡса әҙерләй. Шуға ла аҡса биреү йәки халыҡтан аҡса алыуға бәйле төрлө техникала сығарылған банкнот ҡабул итеүсе ҡоролмаларҙы тикшереү бөгөн иң төп бурыстарҙың береһе. Үҙәк банк бындай ҡоролмаларҙың ялған аҡсаларҙы һәм, шул иҫәптән, сифатлыларын ни тиклем айыра алыуалмауына тикшереү башларға планлаштыра.

**● Ялған аҡса яһаусыларҙың шул тиклем юғары әүҙемлек күрһәтеүенең сәбәбе нимәлә? Улар ялған аҡса эшләү өсөн ниндәй купюраны хуп күрә?**

- Компьютер техникаларының камиллашыуы шуға килтерҙе: хәҙер сағыштырмаса юғары хаҡта булмаған принтерҙар банкноттағы төп һүрәттәрҙе һәм күп визуаль һыҙаттарҙы бик һәйбәт кенә эшләп сығара ала. Ялған аҡса яһаусылар быны яҡшы белә һәм маҡсаттарына өлгәшеү өсөн ошондай принтерҙы файҙалана. Бөгөн ялған аҡсалар араһында 1000 һумлыҡтар иң популяры булып тора. 2008 йылда уларҙың өлөшө 95 процент тәшкил итте.

Ялған аҡсаны ысын аҡсанан айырырға була. Ялған банкноттарҙың сифат күрһәткесе тураһында һүҙ алып барғанда, шуны әйтеп китергә кәрәк, 10, 50, 100 һәм 500 һумлыҡ ялған банкноттарҙы ысынға оҡшатып эшләү өсөн ялған аҡса яһаусылар артыҡ көс һалмай, ә бына 1000 һумлыҡ ялған аҡсалар йылдан-йыл камиллаша бара. 2008 йылдың аҙағына 1000 һумлыҡ ялған банкноттарҙың 55 проценты юғары дәрәжәләге, 40 процент тиреһе уртаса дәрәжәләге хәүеф янаусы, тип баһаланған. Хәүеф барыһынан бигерәк ялған аҡса яһаусыларҙың банкнот һүрәтен дөрөҫ итеп сағылдырыу, ҡатылығы һәм ҡалынлығы буйынса яҡын торған ҡағыҙ ҡулланыу менән бер рәттән, ультрофиолет нурҙарында күренгән банкнот һүрәтен ярайһы тап килтереп эшләй башлауында. Бының менән улар кассирҙар араһында киң таралған ультрофиолет лампаһы аҫтында аҡсаның ысынлығын тикшереү ысулының әһәмиәтен юҡ кимәлгә төшөрҙө. Шулай уҡ ялған аҡса эшләүселәр тарафынан микроперфорация, өлөшләтә күренгән һаҡлаусы еп, үҙгәреп барыусы оптик буяу кеүек юғары технологиялы һаҡлаусы билдәләр ҙә ярайһы сифатлы эшләнә башлана.

**● Рәсәй банкноттарын уртаса ҡулланыу ваҡыты күпме?**

- 10 һәм 50 һумлыҡ банкноттарҙың хеҙмәт итеү срогы бер йылдан аҙыраҡ, 100 һәм 500 һумлыҡтарҙың ике йылдан артмай, 1000 һәм 5000 һумлыҡтарҙыҡы биш йылға тиклем барып етә. Тимер аҡсаларҙың хеҙмәт итеү срогы банкноттарҙан айырмалы рәүештә күпкә юғары - 25-30 йыл.

**● Ҡулаҡсаһыҙ түләү системаһы популярлашыуына бәйле ҡулаҡса әйләнеше ҡыҫҡартылмаймы?**

- Банк карталарының һаны һәм был карталар ярҙамында башҡарылған операциялар күләме юғары тиҙлектә үҫеүенә ҡарамаҫтан, юридик һәм физик шәхестәр тарафынан улар менән тауар һәм хеҙмәткә түләү буйынса ҡулаҡсаһыҙ иҫәпләшеү өлөшө бары тик 10 процент ҡына тәшкил итә. Ә ҡалған 90 процент ҡулаҡсаларҙы алыу операцияһына тура килә.

**● Шулай ҙа ҡулаҡсаның банк карталары алдында өҫтөнлөгө барҙыр бит?**

- Электрон түләү ысулы тулыһынса ҡулаҡсаны алмаштыра алмай. Хатта ҡулаҡсаһыҙ түләү ярайһы киң таралған һәм унар йыл дауамында үсешкән ныҡ алға киткән илдәрҙә лә ҡулаҡса менән иҫәпләшеү күләме ҙур килеш ҡала килә. Белгестәр фаразлауынса, артабан да ҡулаҡса бөтә донъяла бөрәмләп түләүҙең кәм тигәндә өстән ике өлөшөн хеҙмәтләндерәсәк. Түләү ысулының универсаллеге, файҙаланыу еңеллеге, анонимлыҡ, дәүләттең бөтә территорияһында ла тәүлек әйләнәһенә һәр төрлө түләүҙә лә ҡабул итеү мәжбүрилеге һәм банк карталарына ҡарағанда ҡулаҡса менән иҫәпләшеү хаҡы күпкә арзанараҡ булыуы ҡулаҡса знактарының төп өҫтөнлөгө булып тора.

**Ольга ГОРЮНОВА. "Башинформ".**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# УРАМ ЕНӘЙӘТТӘРЕ КӘМЕЙ

**Баш ҡалала криминаль хәл ябай булмаһа ла, йәмәғәт урындарында һәм урамда яһалған енәйәттәр һаны кәмей бара.**

Быйыл Өфөлә алты ай эсендә халыҡ күпләп йыйылған урындарҙа 3977 енәйәт эшләнгән, был былтырғы менән сағыштырғанда, 11 процентҡа аҙыраҡ. Бындай тенденция ҡаланың бөтә районларында ла күҙәтелә, тик Орджоникидзе районында ғына енәйәт ҡылыу 204 процентҡа артҡан. Урамдарҙа яһалған енәйәт һаны 2187-гә еткән, былтыр 2455 факт теркәлгән булған.

Дөйөм алғанда, хоҡуҡ һаҡлау органдарының ярты йыллыҡ эш һөҙөмтәһен анализлау енәйәтселек үсеше темпының кәмеүен күрһәтә. Енәйәт ҡылыу былтырғыға ҡарағанда 0,5 процентҡа түбәнәйгән һәм ун мең кешегә яҡынса 120 енәйәт тура килә. Өфөлә башлыса фатир талау, алдау, урлау кеүек енәйәт өҫтөнлөк итә. Йыл башынан үлтереүҙең - 63, һаулыҡҡа зыян килтереүҙең 115 осрағы теркәлгән. Енәйәтте асыҡлауҙың дөйөм коэффициенты 61,2 процент тәшкил иткән.

Өфө ҡалаһында 2009 йылдың тәүге яртыһында 864 юлтранспорт осрағы теркәлгән. Унда 24 кеше һәләк булған, 988 кеше төрлө ауырлыҡтағы йәрәхәт алған. Водителдәр ғәйебе буйынса 655 авария теркәлгән, 14 кеше һәләк булған, 784 кеше яраланған. Был осор эсендә 309291 юл хәрәкәтендә ҡатнашыусы административ яуаплылыҡҡа тарттырылған, уларҙың 271623-һе - водитель, 33119-ҙы - йәйәүле.

# ЙӘШЕРЕН ЭШСЕЛӘР

**Миграция хеҙмәткәрҙәре ошо көндәрҙә республиканың Ҡырмыҫҡалы районында һәм Өфө районының Булгаково ҡасабаһында тикшереү үткәрҙе.**

Сара барышында Ҡырмыҫҡалы районында урынлашҡан бер теплица хужалығында 7 сит ил гражданының эшләп йөрөүе билдәле булды. Был теплица хужаһы бар эшселәренә лә документтар эшләгән. Бары тик ваҡытында миграция хеҙмәтенә мигранттарҙы эшкә йәлеп итеүе тураһында хәбәр итергә "онотҡан". Бының өсөн уға һәр бер гастарбайтер өсөн 2-шәр мең һум штраф түләргә тура киләсәк. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: Рәсәйҙең Административ кодексына ярашлы, ошондай яуапһыҙлыҡ өсөн юридик шәхес булған эш биреүсе һәр мигрант өсөн 400 меңдән 800 мең һумға тиклем штраф түләргә тейеш.

Миграция хеҙмәткәрҙәре тағы ла Өфө районының Булгаково ҡасабаһында, Өфө-Стәрлетамаҡ трассаһы буйында урынлашҡан баҙарҙы тикшерҙе. Һөҙөмтәлә, асыҡ һауала урынлашҡан бер кафела бер ниндәй документһыҙ-ниһеҙ шөшлөк бешереп һатып тороусы сит ил гражданына тап булынған. Санитар кенәгә тураһында ул хатта белмәй ҙә икән. Законға ярашлы, мигрант эшләргә рөхсәт биреүсе документтарһыҙ эшләргә тейеш түгел. Бындай яуапһыҙлыҡ өсөн уға 2 меңдән 5 мең һумға тиклем штраф һәм Рәсәй биләмәләренән ҡыуыу ҡаралған. Ә бына кафе хужаһына закон алдында икеләтә яуап тотorға тура киләсәк. Беренсенән, сит ил гражданына эшләргә рөхсәт биреүсе документтарһыҙ эшкә ҡабул иткәне өсөн - был яуапһыҙлыҡ закон тарафынан 25 меңдән 50 мең һумға тиклем штраф менән янай. Икенсенән, кафе хужаһы миграция хеҙмәтенә сит ил гражданын эшкә йәлеп итеүе тураһында хәбәр итергә тейеш. Бының өсөн дә 35 меңдән 50 мең һумға тиклем штраф ҡаралған.

**Быйыл алты айҙа эшләргә рөхсәт биреүсе документтарһыҙ эшләп йөрөүселәр һаны былтырғы йылдың ошо осоро менән сағыштырғанда 21 процентҡа, ә сит ил гражданын эшләргә рөхсәт биреүсе документтарһыҙ эшкә ҡабул итеү осраҡтары 40,8 процентҡа артҡан.**

**Салауат ХИЛАЛОВ.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## Әрләмә шайтан таяҡты - дауалай ул аяҡты

Шайтан таяғын һис һанға һуҡмайҙар, ә ул һыҙлаған тубыҡты дауалай. Бер нисә төп шайтан таяғының ер өҫтөндәге өлөшөн киҫеп алырға, алдан әҙерләнгән тоҡҡамы, тоҡсайғамы турап тултырырға һәм ялғашҡа һалырға. Шартлап ҡайнап торған һыуҙы өҫтөнә ҡойорға ла ябырға. Бешермәҫлек булғас, тубыҡланып ултырырға. Мунса һайын бешереп йыуыуынһан да файҙаһы тейә.

## Ҡан таҙалау

Уның бик ябай ысулдары бар, шуларҙы һеҙгә тәҡдим итәм: 1) ике лимон һәм ике әфлисунды иҙеп, ике ҡалаҡ бал ҡушып болғатырға. Бер тәүлек бүлмә температураһында тотҡас, һыуытҡысҡа ҡуйырға. Сәй эскән һайын 1-2 балғалаҡ ҡабырға. Был ысул ҡан баҫымын рәтләй, инсульт, инфарктты киҫәтә, уны булдырмаҫҡа ярҙам итә; 2) ярты литр ҡайнаған һөткә биш шаҡмаҡ шәкәр, ярты лимон һутын ҡушырға һәм әҙерәк әсегәс, эсергә. Дауаланған саҡта балыҡ, ит, йомортҡа ашамайынса, һөт менән генә туҡланып торорғоҙ. Эсмәгеҙ, тартмағыҙ, үләндәр менән генә дауаланығыҙ.

## Һалҡын тейеп, баш ауырыһа

Ни ғәжәп, хәҙер бөтә әҙәм йыл буйы яланбаш йөрөй. Башты ҡояш яндыра, һалҡын туңдыра. Һалҡын тейгәндә баш зәңкеп-зәңкеп ауырта, ул саҡта: 1) лимон менән маңлай һәм сикәләрҙе ышҡырға, әгәр температура булһа, лимонды йылытырға; 2) корицаны ҡайнар һыу менән болғап, әҙ генә шәкәр ҡушып эсергә. Башың түҙеп торғоһоҙ итеп ауыртһа, корицаны ҡалаҡ осо менән түгел, күберәк ҡушып болғарға кәрәк.

## Тештәр һыҙлаһа

Ҡышҡа ҡарағанда, йәй тештәр йыш һәм ныҡыраҡ һыҙлаусан. Ул саҡта: 1) имән ҡайырыһының һәм юл япрағының төнәтмәһе менән ауыҙҙы сайҡарға; 2) соҡорланған теш һыҙлаһа, уға атҡолаҡ үләнен әҙәп ҡуйырға; 3) ярты һуғанды нәҙек кенә итеп киҫкеләп, марляға төрөп, һыҙлаған тешкә ҡаршы яҡ ҡолаҡ тишегенә тығырға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ Ә бит буҙаның да файҙаһы иҫ китмәле. Буҙаны даими эсеүселәр ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарынан ҡотолоуҙары, алкоголле эсемлеккә тартымдарының кәмеүе, хатта тәмәкене һирәгерәк тарта башлауҙары тураһында ҡыуанып һөйләйҙәр.



МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ЙӨРӘГЕҢӘ КҮҘ ҺАЛ...

## Йәки атайҙарҙың вазифалары тураһында

**Ҡөрьән аяттары, Бәйғәмбәребеҙҙең өлгөһө атайҙарҙың, ғаилә башлыҡтарының иңенә ни тиклем мөһим һәм етди бурыс һалынғанлығын күрһәтә.**

Атайҙарҙың яуаплылығы - бөгөнгө замандың актуаль темаларының береһе булып тора, сөнки ғаиләлә яуапһыҙ булыу ирҙәрҙең абруйы юғалыуға, күп һанлы ғаилә фажиғәләренә килтерә. Ирҙәр эштән бушамай, йә күберәк аҡса эшләү теләге менән, йә минминлек арҡаһында ғаиләһе алдындағы мөһим бурысты үтәргә теләмәй, йә быға көстәре етмәй. Күп осраҡта ҡатындары менән балалары ғаилә башлығын бөтөнләй күрмәй. Таң һарыһынан эшкә киткән һәм кис һуң ғына ҡайтып, арыған йә тормошҡа ҡыҙыҡһыныуын юғалтҡан, көнө-төнө телевизор ҡараған атайҙар балаларына тейешле тәрбиә бирә алмай. Шулай итеп, атайҙар балалары алдында өлгө булыуҙан туҡтап, үҙҙәренең абруйын юғалта. Был осраҡта балалар аталарынан үҙләштерә торған сифаттарҙан мәрхүм ҡала.

Бөгөнгө көндә атайҙар вазифаһы башҡалар иңенә һалынды; шулай ҙа бүтән кешеләр, ойошмалар, мәктәптәр, институттар атай бурысын тулыһынса үтәй алмай. Ҡөрьән аяты атайҙарҙың вазифаһы мөһим икәнлеген күрһәтә: "Был нурлы шәмдәл байтаҡ ҡына өйҙәрҙең эсен яҡтырта. Шундай өйҙәрҙең абруйы артһын, тип һәм шунда Үҙенең исемен зикер итһендәр өсөн (Аллаһ) рөхсәт бирҙе. Ул өйҙәрҙә иртә-кис Уға тәсбих әйтәләр. Бар шундай кешеләр, уларҙы сауҙа һәм алыш-биреш эштәре лә Аллаһҡа зикер итеүҙән, намаҙ уҡыуҙан, зәкәт биреүҙән айыра алмай" ("Ән-Нур", 36-37).

Аяттарҙа сауҙа эштәре Аллаһы Тәғәләне иҫкә төшөрөүгә, намаҙ уҡыуға, хәйер бирергә ҡамасау була алмай икәнлегенә төп баҫым яһала. Үкенескә күрә, бөгөнгө көндә эш мотлаҡ үтәләсәк ғибәҙәттәрҙе һәм намаҙҙарҙы тотҡарлай. Ошо сәбәпле, ирҙәрҙең ҡатындарына һәм балаларына ҡарата бурысы һәм яуаплылығы аҙаҡҡа ҡалдырыла, йә бөтөнләй үтәлмәй.

Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис сәләм үҙенең бер хәҙисендә былай тигән: "Һеҙҙең һәр берегеҙ көтөүсе булып тора һәм ул үҙенең көтөүе өсөн яуаплы. Дәүләт кешеһе башлыҡ булып тора һәм уға ышанған халыҡ өсөн яуаплылыҡ йөрөтә; ир кеше ғаиләһенең идара итеүсеһе һәм ул уға яуаплы; ҡатын-ҡыҙ өй йылыһын һаҡлаусы һәм үҙенең вазифалары өсөн яуаплылыҡ йөрөтә; ҡол хужаһының мөлкәтен һаҡлай һәм шуға яуаплы булып тора. Шулай итеп, һеҙҙең һәр берегеҙ көтөүсе булып тора һәм ул үҙенең көтөүе өсөн яуаплы".

Ир кешенең яуаплылығына ғаиләне матди яҡтан тәьмин итеү керә. Шулай ҙа кешенең ихтыяжы бының менән генә бөтмәй әле. Балалар үҙҙәренең ата-әсәһен, йортон яратырға, матур мөхиттә үҫергә тейеш. Өй усағын һаҡлаусы ҡатын-ҡыҙ өсөн иң ҙур бәхет - был донъяла ғына түгел, Ҡиәмәт көнөндә лә уның өсөн яуап биргән, балалар тәрбиәләшергә ярҙам итеүсе, терәк булыусы тормош юлдашының янында булыуы. Балаларға атай абруйы кәрәк, нәҡ атайҙарға хөрмәт уның үҙ-үҙенә ышаныслығына, үҙенә дөрөҫ баһа ҡуйыуына нигеҙ булып тора.

... Дөрөҫ һәм ныҡ, ихлас инаныу кешенең тормошон тыштан ғына йәмләп ҡалмай, йәнен дә тынысландыра, тәртипкә килтерә, әйләнә-тирәләгеләр менән мөнәсәбәттәрҙе яйларға ярҙам итә. Ундай кешегә ғаилә тормошо буш булып тойолмай, ә тәрән мәғәнәгә эйә була. Бәхеткә илтеүсе дөрөҫ юл ҡайҙа икәнлеге тураһында фекерләүсе аҡыллы кеше үҙенең бәхете өсөн генә түгел, ә үҙенең ҡарамағындағы кешеләр бәхете өсөн дә тырышасаҡ.

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ

# ҺАЙ, БАШҠОРТ

**"Киске Өфө" һәр ваҡыт үҙенең көтөлмәгән яңылыҡтары, уйламаған һәйбәт рубрикалары менән шатландыра. Был юлы ла "Ете мөғжизә" тураһында ғәжәп һөйләшеү башланы. Гәзит биттәренә башҡорттоң ниндәй генә мөғжизәләре тураһында яҙылманы. Хатта авторҙарҙың береһе, ете түгел, етмеш хазинаһы бар халҡымдың, тигән фекер ҙә әйтеп ҡуйҙы. Уныһы дөрөҫ, сөнки бөтөн Башҡортостан - үҙе мөғжизә һәм ошо урынды төйәк итә белгән халыҡ та мөғжизә. Гәзит биттәрендә баҫыла барған мәҡәләләр тап ошоно раҫлай. Үҙебеҙ генә үҙебеҙгә тейешле баһа биреп етә алмайбыҙ әле.**

Ошо фекеремде раҫлар өсөн бер фекер әйтке килә. Ете мөғжизәне ике төркөмгә бүлеп ҡарарға кәрәктер. Беренсе төркөм - тәбиғәт мөғжизәләре. Тауҙарыбыҙ, мәмерйәләребеҙ, йылға-күлдәребеҙ, урмандарыбыҙ, башҡорт тоҡомло йылҡыбыҙ, солоҡ ҡорттарыбыҙ. Һәм икенсе төркөм - мөғжизәле илдә башҡорт аңы, аҡылы менән бар ителгән, булдырылған, быуаттар буйы һаҡланып килеп, бөгөн дә файҙаланылған ҡиммәттәр. Йырҙарыбыҙ, ҡурайыбыҙ /тәбиғәт емеше булһа ла уны кеше аҡылы тиңдәшһеҙ музыка ҡоралына әйләндергән/, сюжетлы бейеүҙәребеҙ, йөҙәр ҡулсалы сылбырлы ижауыбыҙ, эпостарыбыҙ, һәр өлөшө сәләмәтлекте лә иҫәпкә алып тегелгән кейемдәребеҙ, һоҡландырғыс биҙәнеү әйберҙәре һәм милли ризыҡтарыбыҙ. Әле иһә мин башҡорт аҡылы менән булдырылған мөғжизәләрҙең береһе - башҡорт аштары тураһында яҙмаҡсымын.

Ниндәй генә халыҡты алма, ҡайһы ғына төбәккә күҙ ташлама - уның үҙенә генә хас милли аҙығы була. Милли аҙыҡ халыҡтың йәшәү урынына, шарттарына, ғүмер итеү рәүешенә ярашлы барлыҡҡа килә һәм уның бар булмышына тәьҫир итә. Ризыҡ халыҡтың булмышына тәьҫир итә, тигән фекерҙең әрәсәһе шул - рус, сит ил һәм үҙ ғалимдарыбыҙҙың, хәрби етәкселәрҙең фекеренсә, башҡорттар иҫ китмәле сыҙам, ауырыуға тиҙ бирешеп бармаҫ, йылғыр, оһолло яугирҙар. Оһолло булыу даими физик күнекмәләрҙән килһә, ауырыуҙарға тиҙ бирешмәү, сыҙам булыуҙың ғилләһе туҡланыуға ҡайтып ҡала.

Әлбиттә, мөғжизәләрҙең дә мөғжизәһе - **башҡорт ҡымыҙы**. Башҡорт ҡымыҙы тураһында "Киске Өфө"лә бик ентекле итеп яҙылды. Уға туҡталмайым. Ә бына халыҡ аҡылы уйлап тапҡан эсемлектәребеҙҙән **буҙаны, күбекмәй** айранын телгә алмай китеү дөрөҫ булмаҫ. Ғөмүмән, башҡорт эсемлектәренән фәҡәт ҡымыҙ ғына тикшерелгән һәм дауалау өсөн файҙаланыла. Ә бит буҙаның да файҙаһы иҫ китмәле. Буҙаны даими эсеүселәр ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарынан ҡотолоуҙары, алкоголле эсемлеккә тартымдарының кәмеүе, хатта тәмәкене һирәгерәк тарта башлауҙары тураһында ҡыуанып һөйләйҙәр. Тәндәге теләһә ниндәй шештәр, йөҙҙә йәмһеҙләп торған сабыртмалар бөтә буҙанан. Башҡорт аҡылы шыттырылған иген бөртөктәренең иҫ китмәле ҡеүәте тураһында борондан уҡ белгән һәм уны ғәмәлдә файҙаланған. Силәбе башҡорттары буҙаны шыттырылған бойҙайҙан - үҙҙәренсә әйткәндә, һалаттан эшләгәндәр, башҡа яҡта шыттырылған арыш, һоло ҡушалар. Һыйырҙың эске майын йәки, үпкә ауырыуы менән яфаланғандарға тәғәйенләп, бурһыҡ майы менән дә яһағандар буҙаны һәм әле лә яһайҙар һәм шул ысул менән дауаланалар. Ҡымыҙ һалып әсетелгән, балалар эсерлек кимәлдә генә ҡеүәтләндерелгән күпереп торған буҙаны туҡлыҡлы ла, файҙалы ла, шифалы ла булғаны өсөн халҡыбыҙ борон-борондан ҡуллана килә. Шафиҡ Тамъяни башҡорттоң аҙыҡтарын юғары баһалап, оҙон ғүмерле булыуының сәбәбен былай тип аңлата:

- Халҡыбыҙ ҡунаҡ, байрам ашы тип кенә түгел, ауырыуҙарҙы дауалау өсөн тағы бер аҙыҡ ҡулланған. Ул - күбекмәй һәм уның айраны. Аш үтмәгән, ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары менән яфаланғандарға, әсә һөтө менән туҡланыуҙан мәхрүм сабыйҙарға күбекмәй бешеп ашатҡандар, айранын йотторғандар. Ҡарыуы ҡайтып, ашауҙан яҙған ҡарттарға ла ошо туҡлыҡлы, ашҡаҙанға эшкәртеүе еңел булған ризыҡты әҙерләгәндәр. Иҫ китмәле һөт ризыҡтарыбыҙ, игендән әҙерләнгән оҙаҡ һаҡланмалы аҙыҡтар, һәр төрлө шифалы үләндәрҙән әҙерләнгән үлән сәйҙәре лә иғтибарҙан ситтә ҡала. Ни өсөндөр беҙҙең профессиональ медицина белгестәре /ғалим Вәрис Ғүмәровтан башҡалары/ был йәһәттән милли аҙыҡтарыбыҙға битарафлыҡ күрһәтә. Ә бит борон-борондан һыйыр малын ҡулына эйәләштергән, иген игеү менән шөғөлләнгән башҡорт халҡының йылдар буйы һаҡлап булған туҡлыҡлы ла, шифалы ла аҙыҡтары бихисап.

"Мин дә әрәм итергә,
Үгеҙ һине тырышмам,
Яфаланып, көс түгеп,
Һинең менән сайҡашмам.
Донъяла һин кешенән
Көслө юғын таныйһың, -
Үҙең түгел, тоҡомоң менән
Кешегә ҡол булырһың!"

Меңәр йылдар элек ижад ителгән "Урал батыр" эпосынан алынған ошо юлдарҙа - халыҡтың күптән инде һыйыр аҙығынан файҙаланғаны күренһә, ижадыбыҙ аша башҡорттоң иген менән дә элек-электән шөғөлләнеүен күрәбеҙ. Уҫҡа эҫе ҡурмас йомдороп сер әйттереү, талҡан ашап һауығыу, ҡурмас ашатып йылҡы малын дауалау һымаҡ фекерҙәрҙең осрауы игенселек менән күптән шөғөлләнеүен дәлилләһә, игендән ғәжәп аҙыҡ әҙерләй белеүе борондан камиллаша килгән тәжрибәһен билдәләй.

Байтаҡ донъяуи мөғжизәләргә бай булған халҡыбыҙҙың иҫ китмәле шифалы һөт, иген ризыҡтары әҙерләй белеүе ғәжәп тә түгел һымаҡ, әлбиттә. Тик уларҙың онотолоуға дусар ителеүе, атай-олатайҙарҙың шул ризыҡ менән туҡланып, йөҙәр йәшкә етеүенең иҫәпкә алынмауы, үҙ ризыҡтарыбыҙҙың шифалы яғының бөтөнләй иғтибарҙан ситтә ҡалыуы, меңәр йылдар һынау үткән, әле булһа традицияһын һаҡлап ҡалған ауылдарҙа ярайһы уҡ киң ҡулланылған был ҡиммәттәргә ҡарата битарафлыҡ ҡына аптырата. Был йәһәттән аш-һыу тирәһендә уралған өләсәй-әсәйҙәребеҙгә, инәйҙәргә рәхмәт - улар байтаҡтарын беҙҙең көнгәсә һаҡлап килгәндәр.



Күмәс менән сәй эсәбеҙ...

✓ *Һолоноң көс-ҡеүәте ғәжәп - уныһы билдәле. Беҙ һоло талҡанын ҡабығы менән бергә етештерәбеҙ. Был, әлбиттә, уның файҙаһын тағы ла арттыра. Сөнки һоло ҡабығындағы көс ер ҡыртышындағы көскә тиң, ти халыҡ.*



# АШТАРЫ!



Был мәҡәләлә көндәлек әҙерләнә торған ризыҡтарға туҡталмайынса, оҙаҡ һаҡлана торған, туҡлыҡлы булыуҙан тыш, дауалау йәһәтенән дә әһәмиәтле аҙыҡ-түлектәргә генә иғтибарығыҙҙы йәлеп итмәксемен.

**Ҡорот.** Башҡорттар һыуыҡ тейеүҙән дә, ашҡаҙан сирҙәренән дә, күңел болғаныуҙан да ҡорот файҙаланған. Хатта эркет өҫтөндәге үңәҙҙе киптереп, сабый кендеген дауалау өсөн ҡулланғандар. Ҡорот һарҡытҡандан йыйылған эркет һыуын эсеү, баш йыуыу, тәндәге ваҡ шештәрҙе бөтөрөү өсөн ҡулланғандар. Яһалма юл менән әҙерләнгән ҡоротҡа ниҙәр генә өҫтәлмәй: болғар боросо, һарымһаҡ, тоҙ, ҡыҙыл борос һәм башҡа өҫтәмәләр. Тимәк, тәбиғи ҡоротта уларҙың барыһы ла бар тигән һүҙ. Башҡорт аспирины, башҡорт фесталы тип тәҡдим итәләр уның файҙаһын белгән кешеләр. Телеңде йоторлоҡ тәме булған ыҫланған ҡоротто бер тапҡыр ашап ҡараған кеше һәр ваҡыт танһыҡлап торорлоҡ. Туҡлыҡлы ла, ашауға еңел дә ул. Башҡорттар уны алыҫ юлдарға, походтарға, яуға алғандар һәм икмәк урынына ла файҙаланғандар.

**Ҡыҙыл эремсекте, әжегәйҙе** һөйәк ауырыуҙарынан, буйға үҫмәүҙән яфаланған, эсе ҡатып йонсоҡан балаларға ашатҡандар.

**Иретелгән һары май.** Башҡорттар май һәм июнь баштарында май йыйып, иретеп дауаланыу өсөн һаҡлап алып ҡалғандар. Үләндең иң көслө, үҫергә, йәшәрергә, сәскәләнергә ынтылып, көс-ҡеүәт туплаған сағында һыйыр малы, әлбиттә, иң шифалы һөт йыя. Һары майҙы тәндәге ваҡ-төйәк яраны, тәнгә сыҡҡан йоғошло сирҙәрҙе дауалау өсөн дә файҙаланғандар. Ә инде ҡыш көндәре ҡорот һыулап, һары май һалып эсеп ебәрһәң, грипп кеүек һыуыҡ тейеүҙән килгән сирҙәрҙең ни икәнен дә белмәҫһең. Тамаҡ шешеүҙән яфаланғандар ҙа ас ҡарындан һары май йотоп дауаланған. Тән яраларына ла, үксә ярылғанда ла иретелгән май йәки майға балауыҙ иретеп ҡушып яһалған ҡатнашма һөрткәндәр.

**Игендән әҙерләнгән ризыҡ.** Башҡорт борон-борондан шыттырылған игендең көс-ҡеүәтен белгән халыҡ, тигәйнек. Шытыу самаһына еткерелеп бүрттерелгән игендән әҙерләнгән талҡандың шифаһы бөтөнләй тиерлек өйрәнелмәгән. Шыттырып буҙа әҙерләгән икән халыҡ, моғайын, талҡанды ла игенде ябай ғына итеп ҡыҙҙырып әҙерләмәгәндер, тик ул ысул онотолғандыр, тигән фекер килеп төштө бер саҡ. Шулай итеп, халҡыбыҙ һаулығы өсөн файҙалы, туҡлыҡлы, бер генә лә зыяны булмаған талҡан етештереү эшен башлап ебәрелде.

Әлбиттә, сертификат алыу өсөн һәр төрлө лаборатор анализдар, тикшереүҙәр үткәрелә. Әммә унда аҙыҡ-түлектең шифаһына иғтибар ителмәй. Талҡан етештерә башлағас, кешеләр дауаланыу өсөн алып файҙалана башланылар. Сөнки ризыҡ менән дауаланыу - иң ҡулайлы ысулдарҙың береһе. Файҙаһы теймәгән сүрәттә лә зыяны булмай. Беҙ талҡанға лаборатор анализ яһатҡандан һуң, уның составында ниндәй аминокислоталар, витаминдар, ферменттар, аҡһым һәм башҡа ҡиммәтле ҡатнашмалар барлығы хаҡында ғына мәғлүмәт бирә алабыҙ. Ошо мәғлүмәттәргә ҡарап алып дауаланалар. Ниндәй фекерҙәр ишетәбеҙ?

Шәкәр диабетынан, ашҡаҙан ауырыуҙарынан, һөйәккә тоҙ ултырыуҙан, хатта ҡайһы бер төр шештәрҙән һәм башҡа шундай сирҙәрҙән дауаланыуҙары хаҡында рәхмәт хаттары яҙалар, шылтыраталар, почта аша талҡан һалып ебәреүҙе үтенәләр. Яңыраҡ етештерә башлаған һоло, арпа, арыш талҡандары тураһында ла фекерҙәр ғәжәп. Йөрәк, бауыр, бөйөр сирҙәренән һоло талҡаны бик килешә, тип ҡыуаналар. Һолоноң көс-ҡеүәте ғәжәп - уныһы билдәле. Беҙ һоло талҡанын ҡабығы менән бергә етештерәбеҙ. Был, әлбиттә, уның файҙаһын тағы ла арттыра. Сөнки һоло ҡабығындағы көс ер ҡыртышындағы көскә тиң, ти халыҡ.

Талҡан менән дауаланып һауыҡҡан бер ир кешенең тәҡдиме менән халҡыбыҙҙың тағы бер аҡылын файҙалана башланыҡ. Ул дүрт төрлө игендән етештерелгән талҡан. Бойҙай, һоло, арыш, арпа. Был талҡанда, әлбиттә, ер ҡеүәте тотош тупланалыр. Ер шарында юҡҡа ғына һәр төрлө иген барлыҡҡа килмәгәндер. Халҡыбыҙ юҡҡа ғына уларҙы шыттырып файҙаланмағандыр. Ғалимдар юҡҡа ғына һәр милләттең көс-ҡеүәтен, сәләмәтлеген арттырыуҙа үҙ милли аҙығы иҫ китмәле әһәмиәткә эйә, тигән һығымтаға килмәйҙер, тигән фекерҙән сығып, халҡыбыҙға үҙ милли аҙығын ҡайтарырға, ә бөтөн донъя халҡына башҡорт милли аҙығының дауалау үҙенсәлегенән файҙаланыу мөмкинлеген күрһәтергә, тигән маҡсаттан сығып етештерә башланыҡ талҡанды.

**Ит аҙыҡтары.** Иттән, бигерәк тә йылҡы итенән нидәй генә ризыҡ әҙерләмәй ҡатын-ҡыҙҙар! Ҡаҙылыҡ, ҡарта, тултырма, ҡаҡланған ит, ыҫланған ит. Ҡаҡланған ҡаҙ ите. Халыҡ хәтерендә һаҡланғандары ни саҡлы, онотолғандары, бәлки, унан да күберәктер.

**Емеш-еләк, үлән сәйҙәре.** Үлән сәйен ни өсөндөр йә бер төрлөнән генә, йәки таҡ һанлы итеп төрлө үләндәрҙән әҙерләгән боронғолар. Өс, биш, ете, туғыҙ. Һәр төрлө шифалы үләнде йыйып, ниндәйе менән ниндәйенең тап килеүен белеп, бесән аҫтына һалып бешектереп алып, сәй яһағандары иҫтә ҡалған. Туғыҙ төрлө үләндән яһалған сәй эскәйнем Көйөргәҙе районының Илкәнәй ауылында йәшәгән Факиһа Малбаева бикәмдәрҙә /иремдең апаһы була/. Тәме, еҫе әле лә хәтеремдә. Сәйгүнгә һалып, самауырҙан ҡайнар һыу ағыҙа башлағайны, тотош бүлмә эсен болон наҙы солғап алды. Тимәк, һинең тәнеңде лә сихәтләндерә бит инде ошондай сәй үҙенең шифаһы менән.

**Емеш-еләк ҡаҡтары.** Йәйҙең бөтөн шифаһын, тәмен, үҙенсәлекле төҫөн һаҡлай бит ул емеш-еләк ҡаҡтары. Йоҡа ғына итеп ҡойолған, еләҫ, күләгәле урында ғына киптерелгән, бишбармаҡ ҡамырындай йоҡа, төйөрһөҙ генә итеп йәйелгән ҡаҡтар емеш-еләктең тотош татын, файҙаһын һаҡлап ҡалалыр. Ундағы витаминдарҙың, һәр төрлө дауалау үҙенсәлектәренең иҫәбе-хисабы юҡтыр, моғайын. Ер еләге, ҡайын еләге, ҡурай еләге, ҡарағат, сейә, балан ҡаҡтары.

Башҡорт ир-егеттәренең туҡтауһыҙ ихтилалдарға күтәрелеүгә мәжбүр булыуҙары, Рәсәй хөкүмәтенең уларҙы һәр бер һуғышҡа йәлеп итеүҙәре билдәле. Был тарихи дөрөҫлөк тураһында телгә алыуҙың ғилләһе шунда - уларҙы аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү ҡатын-ҡыҙҙар елкәһендә булған. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының аҡылы, зирәклеге һөҙөмтәһе ул - шифалы ла, туҡлыҡлы ла, иң мөһиме - оҙаҡ ваҡыттар сифатын үҙгәртмәй һаҡлана торған милли аҙыҡтарыбыҙ.

Талҡан, буҙа, айран, ҡорот, эремсек, эркет һыуы, иттән әҙерләнгән аҙыҡтар, емеш-еләк ҡаҡтары - шифалы булыуҙары яғынан тикшерелһә, башҡорт халҡының мөғжизәләр тыуҙырыуға маһирлығының тағы бер дәлиле булыр ине. Ә ауырыуҙарға иһә үҙ сирҙәренән ҡотолоу өсөн үҙ еребеҙҙең барлыҡ ҡеүәтен туплаған, үҙ аҡылыбыҙ менән бар ителгән бик тә файҙалы һәм бөтөнләй зыянһыҙ бер ысул булыр ине, сөнки организмға артыҡ май ҙа тупламай, артыҡ-мортоҡ ҡалдыҡтарын таҙартып, дауалап та тора, мейе эшмәкәрлегенә лә файҙаһы тейә, спиртлы эсемлектәр ҡулланыуға ла сик ҡуя, киң таралған ваҡ-төйәк сирҙәргә лә ҡаршы тора ала ул башҡорт милли аҙыҡтарының ҡеүәте.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**



Талҡан тартабыҙ, ҡымыҙ бешәбеҙ...



Бишбармаҡҡа саҡырабыҙ.

*БАҠСА*

# ЕМЕШТӘРЕН ТИРЕР САҠ

**Бына йәй ҙә тамамланып бара, яйлап көндәр ҡыҫҡара, төндәр һалҡыная. Август етһә, көҙ етә, тип бушҡа ғына әйтмәгәндер инде боронғолар. Был ваҡытта баҡсала төрлө емеш-еләк, йәшелсә өлгөрә - йыйып, эшкәртеп кенә өлгөр! Киләһе йыл да яҡшы уңыш алам тиһәң, августа ла баҡсала эштәрҙе дауам итергә кәрәк.**

Емеш ағастары был осорҙа үҫеүҙән туҡтай. Ҡыш көнө һалҡындарға бирешмәһен, тиһәгеҙ, ағастарҙы фосфор-калий ашламаһы менән туҡландырығыҙ. Ағас төптәрен йомшартып, ҡый үләндәрен йолҡоп торорға кәрәк. Көндәр эҫе торһа, аҙ ғына күләмдә һыу һибергә мөмкин, күберәк ҡойһаң, емештәр ҡойоласаҡ. Ҡойолған алманы йыйып алып тороғоҙ. Иртә өлгөрә торған алма һәм грушаларҙың емештәрен йыйып алғандан һуң ике аҙна тирәһе ваҡыт үткәс, ағастарҙың тамырҙары әүҙем үҫешә башлай. Шуға ла 1 квадрат метрға 4-5 кг тиреҫ, 30-40 г аммофоска индерергә кәрәк. Ҡарағат, крыжовник ҡыуыҡтарын ентекләп ҡарап, ҡороған йәки сирле ботаҡтарын киҫергә, төптәрен йомшартырға, тиреҫ менән ашларға. Август айында һырғанаҡ емештәрен йыйып алығыҙ, юғиһә, улар ныҡ бешеп, йомшарасаҡ һәм йыйыуы ауырлашасаҡ. Ҡурай еләгенең емеш биреп бөткән һәм насар ботаҡтарын төбөнә тиклем ҡырҡығыҙ, был төрлө сирҙәрҙе булдырмаҫҡа һәм йәш ботаҡтарҙың яҡшыраҡ үҫеүенә ярҙам итәсәк. Ай аҙағында йәш үҫентеләрҙең дә башын өҙөп алығыҙ, был уларҙың буйға үҫеүен туҡтатасаҡ. Ҡыуаҡ төптәренә ашлама индерергә лә була. Августың икенсе яртыһы баҡса еләген ултыртыу өсөн яҡшы ваҡыт.

Йәйҙең һуңғы айында ла йәшелсәләргә һыу ҡойоуҙы, төптәрен йомшартып тороуҙы дауам итегеҙ. Томат, татлы борос һәм баклажан ошо осорҙа яҡшы уңыш бирә башлай. Был культураларҙы ай башында органик йәки минераль ашлама менән туҡландырыу мөһим. Помидорҙың сәскә атыусы ботаҡтарын киҫегеҙ, улар барыбер емеш биреп өлгөрмәйәсәк. Борос һәм баклажанға мул итеп һыу һибергә онотмағыҙ, уңышты 3-5 көн һайын йыйып алығыҙ. Ҡыяр уңыш биреүен дауам итһен, тиһәгеҙ, һыу ҡойоғоҙ, ашлама индерегеҙ. Һуған ҡыяҡтары һарғайып, ергә ятһа, уны йыйып алып, еләҫ урынға киптерергә һалығыҙ. Һарымһаҡты япраҡтары һарғайғас та ҡаҙып алырға кәрәк. Һуң өлгөрә торған кәбеҫтә был осорҙа яҡшы үҫешә, уны айына бер тапҡыр туҡландырып, йышыраҡ һыу ҡойоп тороғоҙ, кәбеҫтә күбәләгенән һаҡлағыҙ. Сөгөлдөр, кишер һәм ҡабаҡҡа һыу ҡойоуҙы дауам итегеҙ, ә бына таш ҡабаҡҡа августа һыу ҙа ҡоймайҙар, ашлама ла индермәйҙәр. Уның артыҡ сәскәләрен өҙөп ташларға кәрәк. Август башында икенсе тапҡыр уңыш алыу өсөн укроп, петрушка, редис сәсәләр.

Август - күп йыллыҡ сәскәләр үрсетеү өсөн яҡшы ваҡыт. Примула, ҡыңғырау сәскә, баҡса ромашкаһы, пион, астильба, флокс, дельфиниум, лилиә һәм башҡа сәскәләрҙе бүлеп ултыртығыҙ. Рауза һәм башҡа ҡыуаҡлы сәскәләрҙең яңынан барлыҡҡа килгән ботаҡтарын төбөнән киҫеп алығыҙ. Был осорҙа георгин, хризантема, рудбекия, күп йыллыҡ астраларҙы өҫтәмә рәүештә туҡландырыу мөһим. Георгиндарҙың аҫтағы япраҡтарын төрлө сирҙәр барлыҡҡа килмәһен өсөн өҙөп ташлағыҙ. Айҙың икенсе яртыһында ике йыллыҡ һәм бер йыллыҡ сәскәләрҙең үҫентеләрен күсереп ултыртырға кәрәк. Был айҙа бер йыллыҡ сәскәләрҙең орлоҡтарын йыйып алып торорға онотмағыҙ.

# ТИТУЛЛЫ ХАЛЫҠ ҮҘЕНӘ

## йәки Этномилләтселектең хәҙерге

**Бынан бер нисә ай элегерәк БР Фәндәр академияһы Гуманитар фәндәр институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре Азат БЕРДИН билдәле политолог, Рәсәй Фәндәр академияһы Ижтимағи-сәйәси тикшеренеүҙәр институтының баш ғилми хеҙмәткәре, химия фәндәре докторы, профессор Сергей Георгиевич КАРА-МУРЗА менән Рәсәйҙең киләсәге өсөн үтә мөһим булған этносәйәсәт проблемалары хаҡында бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле әңгәмә ҡорғайны. Ғалимдың бигерәк тә оло илебеҙҙә барлыҡҡа килгән ҡабатланмаҫ цивилизацияны һаҡлап ҡалыу, Рәсәй республикаларындағы милли күтәрелештең тарихи роле, илде унитарлаштырыу, губерналаштырыу сәйәсәтенең тарихи ахмаҡлыҡҡа тиң булыуы тураһындағы фекерҙәре иғтибарға лайыҡ. Әлбиттә, политологтың этномилләтселеккә ҡарата әйтелгән бар фекерҙәре менән дә килешеп булмай, ул үҙе бәләкәй этнос вәкиле булғанда ғына милләт хәлен тәрәнерәк аңлай алыр ине. Шулай ҙа интернет селтәренә сығарылған был әңгәмә зыялыларыбыҙ араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты, әммә ул, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ваҡытлы матбуғатта баҫылып сыҡманы. Ошо һөйләшеү барышында күтәрелгән мәсьәләләр яҡын киләсәктә лә үҙенең актуаллеген юғалтмаясағын иҫәпкә алып, был әңгәмәне һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.**

**▸ Хөрмәтле Сергей Георгиевич, А. В. Самохиндың диссертацияһында Һеҙ евразиясылыҡ яҡлылар иҫәбенә индерелгәнһегеҙ. Һеҙ ошоға үҙ мөнәсәбәтегеҙҙе белдереп, евразиясылыҡтың киләсәге тураһында асыҡлыҡ индереп китмәҫһегеҙме икән?**

Мин евразиясылыҡ буйынса белгес түгелмен. Әгәр мине ошо йүнәлешкә индерәләр икән, тимәк, коллегаларымдың баһалауына ярашлы, мин уның ҡайһы бер ҡараштарын сағылдырам. Ысынлап та, мин Евразия территорияһында теүәл, үҙенсәлекле һәм тотороҡло цивилизация барлыҡҡа килгән тип иҫәпләйем. Уға үҙәк булараҡ, рус халҡы һәм донъяға ҡараштары уртаҡ булған күп һанлы халыҡтар инә.

Бынан изгелек һәм яуызлыҡ, тормош проблемалары, бергәләп йәшәүҙең этнос-ара ҡоролошо буйынса бик мөһим дөйөм ҡараштар хасил була. Беҙҙә ҙур мәҙәни һәм этник система барлыҡҡа килеп, үҙенең уртаҡ цивилизация траекторияһын булдырған. Ул беҙҙең ҡатмарлы тәбиғи һәм геосәйәси шарттарҙа йәшәй алыуыбыҙға ғына түгел, ә лайыҡлы, рухи мәғәнә менән тулы, шәхес мөмкинлектәрен асыусы һәм бөтә донъя халыҡтарының, шул иҫәптән беҙҙең цивилизация дошмандарының ихтирамын уятыусы тормош ҡороп, артабан үҫешә барыуыбыҙға булышлыҡ итә. Шуға күрә ошо цивилизация траекторияһын өҙөү йәиһә алыштырыуҙа бер ниндәй мәғәнә лә юҡ. Был колоссаль тарихи ахмаҡлыҡ булыр ине.

**▸ Евразиясылыҡ менән иҫ киткәнсе мауығыу икенсе бер сикләнгәнлек - рус этномилләтселеге яғына кинәт ауышыу менән алмашынды. Гуманитар белемдең төрлө өлкәләрендә бер төркөм ғалимдарҙың, бик хөрмәтле бер тарихсы әйтеүенсә, "үҙенең евразиялы үткәне менән иҫәпте өҙөргә" ынтылыуы сәйер тойола. Һеҙ ошо тенденцияның сәбәптәрен һәм эҙемтәләрен нисек баһалар инегеҙ?**

Беренсенән, "үҙенең евразиялы үткәне менән иҫәпте өҙөргә" ынтылыуҙы нисектер фән менән бәйләнгән, тип иҫәпләмәйек. Интеллигенция мөхитендә бындай ынтылыш ваҡыты-ваҡыты менән барлыҡҡа килә, шундай комплекс бар. Үҙҙәренең ата-бабалары эшенән ваз кисеүҙе бәғзе берәүҙәр "прогресс" билдәһе тип иҫәпләй. Бигерәк тә үҙ илең ауыр ваҡыттар кисергәндә.

Сәйәси мәнфәғәттәр яғына килгәндә, рус этномилләтселеген тоҡандырыу - бөтә евразия цивилизацияһы конструкцияһын тергеҙеүҙе туҡтатыу сараһы ул. Аныҡыраҡ әйткәндә, был берҙәм дәүләттең сәйәси структураларын, берҙәм хужалыҡты, берҙәм мәктәпте, уртаҡ мәҙәни нигеҙҙе тергеҙеүгә ҡамасаулыҡ итеү. Цивилизациялар һәм халыҡтар тураһында асыҡ һәм аныҡ белемебеҙ булмағас, беҙ халыҡтарға һәм уларҙың бергә йәшәү ысулына яһалған һөжүмдән яҡлаусыһыҙ ҡалдыҡ. Был беҙҙең бөтә цивилизацияны тарҡатыу, юҡҡа сығарыу буйынса ҙур программаның бер элементы ине. Бәләгә ҡаршы, беҙҙең интеллектуаль һәм мәҙәни элитаның шаҡтай өлөшө Рәсәйгә ҡаршы тороусылар яғына сыҡты. Абруйлы, халыҡ та яратып ҡабул иткән кешеләр булғас, уларҙың позицияһы беҙҙең сафтарҙы ныҡ ҡаушатты.



Әлбиттә, киҫкен көрсөк мәлендә күптәрҙең этномилләтселеккә ылығыуы өмөтһөҙлөк ғәмәле булып тора. Улар таяныс табыу, хаостан ҡотолоу юлын яҡын кешеләрҙең берләшеүендә күрә, һәм йыш ҡына этник яҡынлыҡ иң аңлайышлы һәм ғәмәлгә ашырлыҡ сара булып иҫәпләнә. Был "ҡан яҡынлығы" сифатында ҡабул ителә. Ил упҡынға табан барып, үҙ-үҙен һаҡлай алмаҫтай тойолғанда, ҙур булмаһа ла, этник berекмә тирәһендә тығыҙ тупланыу ҡотолоу сараһы булып күренә.

Әммә был ышыҡ тарихи юлдың тупикка алып барыусы тармағында урынлашҡан, этномилләтселек үҫеште туҡтата, халыҡтар хеҙмәттәшлегенә һәм уларҙы ҡеүәтле милләткә туплауға ҡамасаулай. Әммә бындай ышыҡтың да бик кәрәк булған мәле була. Иң мөһиме, унда оҙаҡ ултырыу, иҫкелеккә бирелеү ярамай, мәжбүри хәлде идеал итеп ҡарау кәрәкмәй.

Дөйөм алғанда, "рус этномилләтселеге" проекты бик ауыр бара. Әммә, "йыуып булмаһа, тәғәрәтеп" тигәндәй, был проект һаман дауам итә, һәм киң матбуғат сараларының ҙур өлөшө уның өсөн эшләй.

**▸ Хәҙер, СССР тарҡалғандан һуң, Рәсәй Федерацияһының милли субъекттарында ҡәтғи этнократик режимдар урынлашыуы тураһында стереотип киң таралыу тапты. Шул уҡ ваҡытта уларҙы традиционализм "утрауҙары" тип атау дөрөҫөрәк булыр ине. Уларҙың этнократик тәғәйенләнеше бар, әммә уға өҫтөнлөк бирелмәй. Һеҙ быға ниндәй комментарий бирер инегеҙ?**

Был һорауҙа һеҙ бер нисә проблеманы берләштергәнһегеҙ, улар бик ҡатмарлы булып, ҡәнәғәтләнерлек яуаптар әлегә табылмаған. Беренсенән. Этнократия - авторитар властың бер төрө һәм бер үк ваҡытта теләһә ниндәй типтағы власҡа хас булған идеология ул. Мәҫәлән, Латвия йәки Израилдең танылған демократик режимдарына бер үк ваҡытта этнократик принциптар ят түгел. Уларҙың этнократия тип нарыҡланған Рәсәй республикаларынан да этнократиялыраҡ булыуы тураһында әйтергә була. Этнократияның республикала йәшәүсе башҡа этностарға ҡарағанда нығыраҡ ойошҡан титуллы милләттең көрсөктә бар халыҡ өсөн аҙыраҡ юғалтыуҙар менән үтеүҙе тәьмин итерлек һәм үҫеш потенциалын һаҡлап ҡалырлыҡ тормош ҡоролошон ойоштороусы көс ролен алыуында сағылыуы мөмкин. Йәғни, был титуллы халыҡ үҙенә держава йөгөн ала, тигән һүҙ. Бер атама аҫтында, асылда, төрлө режим йәшәүе мөмкин.

Икенсенән. Мәғрифәт заманы тыуҙырған сәйәси философия принциптары, индустриаль цивилизацияның дөйөм кризисы сиктәрендә шулай уҡ көрсөк кисерә. Неолиберализм капитализмдың синфи характерын юҡҡа сығара һәм милекселәр элитаһын ябыҡ сословиеға әйләндерә. Ул да, үҙ сиратында, этник һыҙаттар ала.

Мәҫәлән, нимә һуң ул "алтын миллиард"? Бөтә донъяла хакимлыҡ итеүсе яңы милләт йыйыу утопияһы ул: уға үҙҙәренең милли үҙлегенән яҙҙырылған "яңы ҡолдар" хеҙмәт итәсәк. Быны ҡәтғи глобаль этнократия тип атарға кәрәк.

90-сы йылдарҙа беҙ Рәсәйҙә нимә күрәбеҙ һуң? СССР-ҙы емергән көстәр үҙҙәренең сәйәси режимын ошо глобаль утопия фарватерына йүнәлтте. Улар хосусилаштырыу барышында барлыҡҡа килгән эре милекселәрҙән торған яңы "милләт" йыя башланы. "Алтын миллиард" кеүек үк интернациональ булһа ла, был "милләт"те "яңы рустар" тип атанылар. "Яңы рустар" атамаһы ыңғай ҡабул ителмәне, ул тәүҙән үк кире мәғәнә алды. Әммә проект ғәмәлгә ашырылыуын дауам итте, һәм унда шунда уҡ архаик этнократия һыҙаттары пайҙә булды: Рәсәйҙә "яңы рустар" иҫәбенән яһалма рәүештә "олигархтар" ҡатламы булдырылды. Шул уҡ ваҡытта "иҫке рустар" (ысынында - күп милләтле совет халҡының күпселеге) аяуһыҙ ҙур милектән өлөшһөҙ ҡалды һәм һаҡлап йыйған аҡсаларынан яҙҙы, килем бүлеүҙә, төп социаль һәм граждандар байлығынан үҙенә тейеште алыуҙа дискриминацияға дусар ителде. 90-сы йылдарҙағы Рәсәй дәүләте - "яңы рустар" власы аҫтындағы ҡәтғи этнократия ул.

Катастрофа шарттарында аҙ һанлы халыҡтарҙың "яңы рустар" этнократияһынан һаҡланыу һәм бәлә-ҡазаны үтеп сыға алыу маҡсатында этник нигеҙҙә берләшеү юлын эҙләүе ошондай проекттарға ерлек бирә. Этнократик ышыҡ рус булмаған халыҡтарҙың ғәҙәттән тыш һаҡланыу сараһына әйләнде, ә рустар үҙҙәренә ошондай һаҡланыу сараһын булдыра алманы һәм хәҙер өлгөрмәйәсәктәр ҙә. Уларға халыҡ булараҡ үҙ-үҙен ҡотҡарып ҡалыу өсөн державаны тергеҙеү ҙурыраҡ мөмкинлек бирә.

Өсөнсөнән. Катастрофаны, бомбаға тотоу ваҡытындағы һымаҡ, этнократик ышыҡта ултырып уҙғарып була. Әммә унда оҙаҡ ултырырға ярамай, сөнки ул халыҡҡа бомбаға тотоуҙан да былайыраҡ бәлә алып килеүе бар. Этнократия - архаик режим, ул халыҡты ҡәбилә аңына кире ҡайтарыусы регресс юлына этә. Ул артҡа, килмешәктәр тарафынан туҡтатылған Алтын быуат утопияһына илтә.

Беҙҙең тарихи яҙмышыбыҙ шулай: халыҡтарҙың күп быуаттар буйына күсеп йөрөүе этностарҙың аралаш урынлашыуына килтерҙе. Беҙҙә хатта бер район масштабында бер нисә этник төркөмдөң яҡын күршеләрсә йәшәй алыуын тәьмин итергә кәрәк. Был аҡыл һәм йөрәк менән эшләй алыуҙы талап итә, әммә быға альтернатива - этник-ара конфликттар. Уларҙың тәбиғәте ахырынаса өйрәнелгән, уларҙы тоҡандырып ебәреүе еңел, ә һүндереүе ҡыйын. Улар тиҙ тоҡанып барған бар "кеше материалы" янып бөткәнсе бысҡып ятасаҡ. Үҙенә таяныс булған, сәйәсиләштерелгән һәм тиҙ арала контролдән сығып барыусы этник төркөмдәрҙе ойоштороусы этнократия йыш ҡына ошо упҡынға табан йүнәлеш ала. Ә ошо утҡа май һибеүселәр Рәсәйҙә лә, сит илдәрҙә лә етерлек.

***90-сы йылдарҙа кешеләр дөйөм милли бәлә, катастрофа кисерҙе. Уны кисереп сығыу өсөн кешеләр бөтә мәҙәни ресурстарҙы, шул иҫәптән этник символдарҙы, шуларҙың иң мөһимдәренән булған тыуған ер образын, уның сиктәрен үҙаңында ҡайтанан тергеҙҙе. Уларҙы юйып ташлап, Рәсәйҙе губерналарға бүлгеләү - символдар ҡалҡанын емереү, яңынан рухи хаосҡа дусар итеү ул. Был бар халыҡтарҙың да Рәсәй Федерацияһы сиктәрендә берләшеүенә килтерерме һуң? Юҡ, әлбиттә. Хәҙерге заманда этник тойғоларҙы сәйәси саралар менән баҫтырырға теләү кире һөҙөмтә бирәсәк. Мәҫәлән, паспорттан милләт графаһын алып ташлау ниндәй һөҙөмтә бирҙе, ә?***

***✓ Уларҙы юйып ташлап, Рәсәйҙе губерналарға бүлгеләү - символдар ҡалҡанын емереү, яңынан рухи хаосҡа дусар итеү ул. Был бар халыҡтарҙың да Рәсәй Федерацияһы сиктәрендә берләшеүенә килтерерме һуң? Юҡ, әлбиттә.***

# ДЕРЖАВА ЙӨГӨН АЛА,

## сәйәси роле тураһында

**Һеҙ этнократия һәм традиционализм араһындағы бәйләнеште нисек күрәһегеҙ?**

Был бәйләнеш туранан-тура түгел. Улар асылы буйынса төрлө күренештәр, уларҙың йүнәлештәре айырылып тора, улар икеһе лә бер-береһен сара, хатта битлек сифатында ҡуллана ала. Уларҙың ҡапма-ҡаршы булыуҙары ла мөмкин. Беҙҙең заманда иң мөһиме - айыҡ аҡыл һәм алдан уйлап эш итеү. Һәр төрлө "измдар"ға бер нисек тә бирелергә ярамай, килеп тыуған хәлде иғтибар менән өйрәнеп, теге йәки был коридорҙың ҡайҙа алып барыуын күҙаллай алыу фарыз. Беҙ хәҙер бер юл сатынан икенсеһенә күсәбеҙ, һәм һәр ҡайһыһында һайлаған юлың өсөн яуаплылыҡ тойорға кәрәк. Бында көрсөк тыуҙырған радикаллыҡҡа ҡаршы тора алыусы, традицион аңға хас булған аҡыл алдан йөрөргә тейеш. Айыҡ ҡараш һәм сама белеү - бына ошолар хәҙер дәүләткә лә, йәмғиәткә лә, халыҡҡа ла бик кәрәк. Тарҡалыуға эшләгән бер нәмәне лә алға сығарыу ярамаҫ ине.

**А. Б. Чубайстың "неолибераль империя" идеологияһы илдең унитарлашыуын күҙаллай (Дөрөҫ, хәҙер был идеяның авторлығы хаҡында иҫкә алмауҙы хуп күрәләр). Патриотик риторика ҡулланған күптәрҙә унитарлаштырыу, губерналаштырыу идеялары киң яҡлау таба. Вертикалде иҡтисади һәм сәйәси нығытыу тәртип урынлаштырыу буйынса айыҡ проекттан күҙгә күренеп неолибераль проект һыҙаттарын ала бара. Бәлки, властың йәмғиәт менән килешеү таба алыу мөмкинлеге тап ошо йүнәлештә башҡарылыр. Һеҙ губерналаштырыу идеяһына нисек ҡарайһығыҙ?**

Унитарлаштырыу идеяһын һәр кем үҙ ерлегенән сығып ҡабул итә, уларҙы бер төркөмгә берләштереп булмай. Чубайс бер маҡсат ҡуйһа, "яңы аҡтар"ҙыҡы - икенсе, монархистарҙыҡы - өсөнсө төрлө. Уларҙа империя образы ла төрлөсә.

Бәлә бына ниҙә: беҙҙә бик күптәр хәҙерге проблемаларҙы боронғолатырға әүәҫ. Берәүҙәр Рәсәй империяһындағыса йәшәүҙе хуплаһа, икенселәре совет осорон маҡтай. Хәҙер тегеһе лә, быныһы ла - тарих ҡына бит! Аналогиялар ҙур хаталарға килтереүе мөмкин. Мәҫәлән, һуғыш бөтөү менән, 1945 йылда ҙур полиэтник совет халҡының берҙәмлеге шул тиклем көслө була, административ сиктәрҙең нисек үткәрелеүе, урындағы властарҙың ниндәй милли символдар ҡулланыуы кешеләрҙе борсолдормай. Ә 90-сы йылдарҙа кешеләр дөйөм милли бәлә, катастрофа кисерҙе. Уны кисереп сығыу өсөн кешеләр бөтә мәҙәни ресурстарҙы, шул иҫәптән этник символдарҙы, шуларҙың иң мөһимдәренән булған тыуған ер образын, уның сиктәрен үҙаңында ҡайтанан тергеҙҙе. Уларҙы юйып ташлап, Рәсәйҙе губерналарға бүлгеләү - символдар ҡалҡанын емереү, яңынан рухи хаосҡа дусар итеү ул. Был бар халыҡтарҙың да Рәсәй Федерацияһы сиктәрендә берләшеүенә килтерерме һуң? Юҡ, әлбиттә. Хәҙерге заманда этник тойғоларҙы сәйәси саралар менән баҫтырырға теләү кире һөҙөмтә бирәсәк. Мәҫәлән, паспорттан милләт графаһын алып ташлау ниндәй һөҙөмтә бирҙе, ә?

Бәлки, либераль этнолог-конструктивистарҙың күбеһе, административ саралар менән миллилекте һүрәнәйтә биреп, гражданлыҡты көсәйтеп була икән тип, ысын күңелдән ышаналыр. Әммә ысынбарлыҡ шарттарында бының кире һөҙөмтәгә килтереүе бар. Был бензин һаҡлағыстағы янғынды һыу менән һүндереүгә тин. Миллилек хаос шарттарында ҡотолоп ҡалыу өсөн тупланыу сараһы булғанлыҡтан, уны баҫтырырға ынтылыу һалҡын этник һуғышҡа алып барасаҡ. Нисек бындай әйберҙәр менән уйнарға була?!

**Бөгөн Һеҙҙе традиционалист-консерватор тип иҫәпләйҙәр. Һеҙ власты йәмғиәт килешеүе системаһына табан барыуға саҡыраһығыҙ. Әммә ваҡыт үтеп бара, ә Рәсәй йәмғиәтен либераллаштырыу дауам итә. Һеҙ бер нисә тапҡыр күҙаллаған система кризисы, шул иҫәптән 2010 йылға ҡарағаны ла, әле булманы. Һеҙ үҙегеҙҙең позицияғыҙға коррективалар индереү мөмкинлеген ҡарамайһығыҙмы?**

Коррективаларҙы һәр саҡта ла индерергә тура килә, шунһыҙ мөмкин түгел. "Система кризисы" төшөнсәһе үҙе лә бигүк аныҡ түгел. Уның үлемесле булыуы бар, һәләкәт янамай торған сир рәүешендә лә барып, ваҡыты-ваҡыты менән әҙлөгәүгә килтереүе лә мөмкин. Беҙҙә деградацияның төп һәм массив процестары дауам итә, улар әлекке кеүек тиҙ бармаһа ла, туктамаған. Ә ҡайһы берҙәренең темпы 90-сы йылдарҙағынан кәм түгел. Тимәк, улар ҡотолғоһоҙ рәүештә беҙҙең тормошобоҙҙо системалы үҙгәртеүгә мәжбүр итеүсе һөҙөмтәләргә килтерәсәк. Был һығымтаны яңынан ҡарау өсөн әлегә нигеҙ юҡ.

Һүҙҙә генә традицион ҡиммәттәрҙе һаҡлау һәм тергеҙеү, тарихи үткәнде ихтирам итеү яҡлы булып, ғәмәлдә артабан да деструкцияға (тарҡалыуға, емерелеүгә) алып барыусы неолибераль курсты дауам итеүсе власть менән хеҙмәттәшлек итеп буламы һуң?

Властың деструкцияны тиҙләтеүе лә мөмкин бит, әммә ул быны эшләмәй. Был үҙе ҙур ҡаҙаныш, был өмөт бирә. Әгәр йәмғиәт үҙенең хәҙерге халәтендә көрсөктән сығыу юлын таба алмай һәм әлегә берләштереүсе проект та төҙөүгә әҙер түгел икән, беҙҙең бар өмөтөбөҙ яҡынлашып килеүсе көстәр килеп етеп өлгөрһөн өсөн кризисты шул ваҡытҡа тиклем һуҙа алыуҙа ғына. Хәҙерге студенттар йәмғиәт аренаһына сыҡҡанда актуаль шарттарҙа эш алып барыуға оло быуынға ҡарағанда яҡшыраҡ әҙерләнгән буласаҡ. Был өмөт әлегә юғалмаған, шулай булғас, ваҡиғаларҙы ашыҡтырыу кәрәкмәй.

**Хөрмәтле Сергей Георгиевич! Һеҙ беҙҙең йәмғиәтте тарҡатҡан конфликттың синфи түгел, ә цивилизацион-ҡиммәти характерҙа булыуына иғтибар иткән һул йүнәлештәге фекер йөрөтөүселәрҙең береһе булып тораһығыҙ. Үҙ ваҡытында сәйәсиләшкән этниклыҡ күтәрелеше менән бәйле милли хәрәкәттәр ысынында йыш ҡына этник һаҡланыуҙың, тимәк, цивилизацион үҙлектең, ҡәҙимселектең үҙгәрә биргән формалары булып тора. Рәсәй халыҡтарының, мәҫәлән, башҡорттарҙың этник үҙлеген һаҡлап ҡалыу хәрәкәттәре XX быуаттың беренсе сирегендә күп осраҡта "халыҡсылар" (народниктар) һәм эсерҙар, һуңынараҡ - большевиктарҙың тупраҡлы өлөшө идеяларына оҡшаш рәүештә үҫте. Бөгөн был хәрәкәттәрҙе аҫтан хуплауҙың консерватив, һаҡланыу характеры тағы ла асығыраҡ күренә. Икенсе яҡтан ҡарағанда, улар милли төбәктәрҙә 90-сы йылдарҙың хоҡуҡи нигилизмына ҡаршы тороуҙа иң тәжрибәле көс булды. Һеҙҙең ҡарашҡа, ошо үҙгәреш кисергән милли хәрәкәттәр һәм Һеҙ өмөт бағлаған көстәр араһында союз булыуы мөмкинме?**

Принципиаль күҙлектән ҡарағанда, бындай союздың булыуы мөмкин, һәм ул логикаға ярашлы. Әммә йәмғиәттә барлыҡҡа килеүсе ҡапма-ҡаршылыҡтар һәм конфликттарҙың үҙ динамикаһы ла бар бит. Унда "тупһанан аша үтеү" күренештәре барлыҡҡа килеп, уларҙан һуң яңы факторҙар эшләй башлай. Әгәр конфликт ниндәйҙер сикте үтә икән, уның баштағы сәбәбе үҙ көсөн юғалта. Конфликт үҙе яңы сәбәптәр һәм һылтауҙар тыуҙыра башлап, үҙ-үҙен яңыртыу һәм, йыш ҡына, үҙен-үҙе тиҙләтеү режимына күсә.

Шуның өсөн, конфликттарҙың эске төҙөлөшөн асыҡлайым тиһәң, һалҡын ҡанлылыҡ менән һәм үҙ фекереңде өҫтөн ҡүрмәйенсә генә уларҙың һәр береһенең динамикаһын билдәләргә кәрәк. Һәр конфликт уникаль булып тора. Чечнялағы һәм Приднестровьелағы конфликттарҙың уртаҡ ҡанундары хаҡында тартып-һуҙып ҡына әйтергә була, уларҙың үҙ моделе бар. Ошондай конфликт усағында киләсәкте ҡайғыртыусы кешеләр әле һүҙ барған сик аша үтмәҫкә тырышырға тейеш. Әлбиттә, конфликт берләштереү ҡеүәһенә эйә, һәм ул йәмғиәтте туплаусы фактор була ала. Әммә кирегә әйләнмәй торған процестар башланасаҡ тупһа аша үтмәү хәйерле. Берләшеүҙе конфронтация аша башлаған лидерҙар ошо акцияның динамикаһын уйҙан бер айға йәки бер йылға ғына түгел, иң кәмендә, ярты быуатҡа тиклем күҙалларға тейеш. Минеңсә, Чечняла халыҡ өсөн үтә ҡиммәткә төшкән байтаҡ сиктәр аша үтелде. Ә Украинала башланған конфликтты ике йыл элек үк украиндарҙың Рәсәй яҡлылары һәм уға ҡаршылары араһында диалог алып барыу аша "туңдырып" тоторға була ине.

**Совет цивилизацияһының символдар донъяһын емереү Рәсәйҙең төрлө тарафтарында төрлөсә барҙы. Башҡортостанда, мәҫәлән, уны ныҡ ҡына йомшарта алдылар. Хәҙер ошондай төбәктәрҙә был емергес процестарҙы тәрәнәйтергә теләү күҙәтелә. Бының өсөн һыналған алымдар ҡулланыла: мәҙәни садизм, фәнгә ҡаршы килгән мифтар (атап әйткәндә, "Аҡ хәрәкәт" тураһындағы неолибераль миф), этник конфликтлылыҡты ҡуҙғытыу, "шәхес культы"н дискредитациялау һәм башҡалар. Һеҙ бындай ҡотҡоға нисек ҡарайһығыҙ? Һеҙҙеңсә, быға "һул" фекер ниндәй мөнәсәбәттә булырға тейеш? Тотош алғанда, Рәсәй йәмәғәтселегенән ниндәй ҡараш талап ителә?**

Мин быны һуғыш барышында ҡапма-ҡаршы яҡтарҙың нормаль хәрәкәте рәүешендә ҡабул итәм. Символдарға ҡаршы һуғыш - үлемесле алыш, бында килешеүгә барыу бик ҡыйын. Быға тыныс халыҡ күпләп йәлеп ителә, ә ул үҙенең оятһыҙ сәйәси көстәр өсөн бульдозер булыуын аңламай. Бульдозерҙың рычагтары артында катастрофаға әтәреүсе радикалдар ултыра. Бында һүҙ тап Совет цивилизацияһының ғына символдар донъяһын емереү хаҡында бармауы тураһында әйтеп үтергә кәрәк. Һуғыш Рәсәй (Евразия) халыҡтары милли аңы символдарының бөтә пантеонына ҡаршы бара. Совет осорондағы, мәҫәлән, Стаханов, Чкалов, Зоя Космодемьянская, Гагарин кеүек символдарҙың күбеһенең уртаҡ булыуы икенсе мәсьәлә. Сталин да бит ғәмәлдә барыһы өсөн дә, шул уҡ Сталинға ҡаршылар өсөн дә уртаҡ символ булып тора. Әммә былар менән бер рәттән, һәр халыҡты нығытып тороусы милли символдар бар.

Мәҫәлән, рустар өсөн Александр Невский образы бик мөһим. Рәсәйҙең Евразия иле булараҡ яҙмышын билдәләгән тарихи күтәрелеште рустар уның исеме менән бәйләй. Был символдың әһәмиәтен тарихсы Г.В. Вернадский бына нисек аңлата: "Александр Невскийҙың ике ҡаһарманлығы - Көнбайыштағы һуғыш батырлығы һәм Көнсығышта баш баҫып йәшәүгә дүнеүе - бер маҡсатҡа йүнәлтелгәйне: православиены рус халҡының әхлаҡи-сәйәси көсө сифатында һаҡлап ҡалыу. Ошо маҡсатҡа өлгәшелде: Александр әҙерләгән ерлектә рус православие батшалығы үҫеште. Александр тоҡомо Мәскәү державаһын төҙөнө".

Үҙгәртеп ҡороу осоронда Александр Невскийҙы "хәйләкәр, власть яратыусы һәм яуыз хаким" сифатында фашлау маҡсаты ҡуйылды. Бының өсөн халыҡ-ара конференциялар уҙғарылды, сит ил профессорҙары саҡырылды, китаптар нәшер ителде. "Александр Невский тураһындағы ете йөҙ йыллыҡ мифты фашлау" программаһы, йәнәһе, рустарға тевтон рыцарҙарына бирелеү һәм улар аша Көнбайышҡа ылығыу файҙалыраҡ булған, тигән фекерҙе расларға йүнәлтелгәйне. Был кампаниянан бер ниндәй фәтүә булманы, халыҡ хәтере көслөрәк булып сыҡты. Уйлауымса, ошондай кампаниялар башҡа халыҡтарҙың да символдарына ҡаршы алып барыла.

**Эйе, Башҡортостанда бер төркөм публицистар Салауат Юлаевтың образын "фашлау" буйынса әүҙем кампания алып бара. Был кампания "тарихи дөрөҫлөк" табыу әләме аҫтында барһа ла, уның идеологик маҡсатта алып барылыуын, тарих фәне менән бер уртаҡлығы ла булмауын күреү ҡыйын түгел. Бөгөн ошондай кампанияларҙың көсөн нисек баһаларға була?**

Әлбиттә, бындай кампаниялар - халыҡтың милли үҙаңын көсһеҙләндереүсе, унда төрлө сатнаған урындар, ярыҡтар һәм тарҡалыштар булдырыусы программаның бер ҙур булмаған элементы ғына. Теләһә ниндәй ярыҡ киңәйеп китеп, хатта упҡынға әүерелеүе бар. Ғөрәф-ғәҙәттәр аша ҡабул ителгән символдарға ҡаршы алып барылған һуғыш ошоноң өсөн хәүефле лә инде. Бөйөк антрополог Конрад Лоренц символдарҙы емереүҙең бик хәүефле булыуы хаҡында яҙа. Беҙ теге йәки был символдың мәҙәниәттә ниндәй роль уйнауын аныҡ ҡына белмәйбеҙ, һәм уны юҡ иткән саҡта мәҙәни нормаларҙың бар системаһының, шәм яҡтыһы кеүек, һүнеп ҡалыуы бар.

Башҡорттарҙың заманса мәҙәниәтендә Салауат Юлаев образының әһәмиәтен баһаларға базнат итмәйем. Үҙемә килгәндә, бала сағымда Салауат Юлаев хаҡындағы китапты уҡып сыҡҡас, уның образы аша минең хәтеремә башҡорттарҙың оло хөрмәткә лайыҡлы халыҡ булыуы тураһындағы фекер һеңеп ҡалған. Һәм мин бөгөн кемдәндер ошо образды емереү өсөн үҙенең бысраҡ ҡулдарын минең йәнемә тығырға маташыуын теләмәйем. "Тарихи дөрөҫлөк"тең быға бер ниндәй ҙә ҡатнашлығы юҡ, символдарҙың даирәһе башҡа.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әҙерләне.**

***✓ Сәйер ҡыштырлау ишетеп ҡалған Айбулат күтәрелеп өҫкә ҡараны. Унда, бер-береһенә үрелеп үҫкән ялбыр ботаҡтар араһына боҫа биреп, тейен ултыра ине. Бәләкәс кейектең ифрат килешле һорғолт-күк төҫтәге туны йылҡылдап тора.***



Айбулат, оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай ғына, көнлөк ризыҡ һалынған биштәре менән мылтығын иңбашына аҫып, биленә саҡсаһын* быуҙы. Ишек алдына сыҡҡас та, ниндәйҙер мөһим әйбер иҫенә төшкәндәй, ҡапыл туҡталып ҡалды ла, гаражына инеп, әҙер ҡыулау** алды, өсәүҙе: төнгөләккә ҡалһа, йәиһә берәй ҡараңғы урынға тарыһа, кәрәге тейеүе бар.

Түбәһен ялбыр болоттар эсенә йәшереп ятҡан уйсан Ирәндек һырты тарафтарына ыңғайлаған Айбулаттың артынан сөм-ҡара төҫтәге, аҡ түшле, шулай уҡ дүрт тәпәй осо ла аҡ лайкаһы эйәрҙе. Һунар эте, ҡулында мылтыҡ бар сағында, хужаһынан тотам да ҡалмай, шулай күнеккән. Хужаһы һунарға киткәндә бәйҙә тороп ҡалыу уның өсөн үлемгә тиң. Ошоно яҡшы үҙләштереп алған Айбулат тәүҙә, ҡамасау булыр, тип, Аҡтырнағын алырға икеләнә ине, ахырҙа, кире уйлап, ҡул һелтәне: "Ярай, йөрөһөн әйҙә, эт - эт булыр әле, ни тиһәң дә урманға барыла лабаһаң. Урман - ҡунаҡ йорто түгел, унда һине ҡолас йәйеп ҡаршы алыр дуҫың юҡ. Урман - ҡырыҫлыҡ, урман - йәнде лә, тәнде лә, хатта рухты ла һынау урыны. Урман бәләкәй генә һаҡһыҙлыҡты ла ғәфү итмәй, шунлыҡтан, уның менән шаярмайҙар. Ана шул, үҙе ымһындырғыс, үҙе томһа, белгән өсөн һыйлы, белмәгәнде яҡын юлатмаған, хатта астан үлтерер урманды гиҙгән саҡта эттән тоғро юлдашты эҙләп тә таба алмаҫһың".

Йәйәү - йәйәү инде, ҡарап тороуға бына ғына ятҡан кәрәкле урынға барып етеүгә көн үҙәге яҡынлашты ла ҡуйҙы. Көн йонсоулығына ҡарамай, ыуыҙ ҡар шәпләп ирей башланы. Айбулатты көйөндөрөп, асыҡтағы тапанды урындар, ҡалҡыу шоссе һырты инде тулыһынса тиерлек асылырға ла өлгөрҙө. Нисек көйөнмәҫһең, барлыҡ эҙҙәр ус төбөндәгеләй ярылып ятҡан епшек ҡар бөтөнләй иреп бөтһә, унын юлы уңмаҫы көн кеүек асыҡ. Әлеге сәфәре - бушҡа ваҡыт үлтереү генә буласаҡ.

Шулай ҙа, сәнскеле ҡыуаҡтар менән ҡапланған Ирәндек битләсенә күтәрелә башлап, артабан ағастар араһында нисек яуған - шул килеш ҡымшанмай ҙа ятҡан селт аҡ йәймәне күргәс, күңеле ирей төштө. Ә инде әле генә сабып уҙған ҡуян эҙҙәренә юлыҡҡандан һуң, ҡанатланып уҡ китте: тәбиғәт-әсә үҙе уға ярҙам ҡулы һуҙа түгелме? Тауға үрмәләп, унын томанлы һыртына яҡынлашҡан һайын, ҡар ҡатламы күҙгә күренеп ҡалыная бара. Быныһы, әлбиттә, яҡшы.

Күптән түгел генә эш башлауына ҡарамаҫтан, Айбулат был тирәләрҙе яҡшы белә. Хатта, биш бармағы кеүек, тип әйтергә була. Ошо яҡтарҙың гүзәллегенә таң ҡалып, ғорур тауҙарының мөһабәтлегенә һоҡланып бөтә алмай, бала саҡтарында, аҙағыраҡ үҫмер ҡорона ингәс тә йыш ҡына походтарға йөрөгәндәре кисә генә һымаҡ. Хәйер, һөнәр һайлағанда ла, шул рәүешле, тәбиғәт яратыуының шауҡымы ҡағылмай ҡалмағандыр. Әлбиттә, ҡағылған. Ул бит тыуып үҫкән төйәгенә сабый саҡтан ғашиҡ.

Ирәндектең һунар өсөн тыйылған зона тип иғлан ителеүенә ҡарамаҫтан, нәфселәренә баш була алмаған бәғзе бер әҙәмдәр юҡ-юҡта барыбер килеп урағылай тора. Үҙебеҙсә әйткәндә, браконьерлыҡ итәләр. Ундайҙар бигерәк тә елле-елле дәүләт машиналарында, шул уҡ дәүләт бензинына елдереүсе түрәләр араһында күп. Ҡарап тороуға зыялы ғына, әҙәпле генә кешеләр һымаҡ, ә оят менән намыҫ юҡ. Ә инде тотола ҡалһалармы? Тотола ҡалһалар, абруйҙарына төрттөрөп, эш урындарын атайҙар. Ҡайбер һөмһөҙҙәре асыҡтан-асыҡ янауға тиклем барып етһә, икенселәре хатта ришүәт төртөүҙән дә тартынмай. Ләкин Айбулат тиҙ генә өркөп тора торған ир түгел һәм аҡсаға ҡыҙығыуҙан күңеле лә аҙып бармай. Унын өсөн бөтәһе лә тиң: ҙур түрәме ул, әллә ябай колхозсымы - һунар ҡануниәтен боҙғанһың икән - яуап тот һәм тейешле язаһын ал. Ҡыҫҡа ғына ваҡытта, законһыҙ рәүештә һаҡланып, былай ҙа наҡыҫая барған йәнлектәр донъяһына йүнәлтелгән биш мылтыҡты тартып алып, хужаларына протокол төҙөүе ошоға асыҡ миҫал. Айбулатты юхалап та, әүрәтеп тә әүҙерә алмағас: "Былай ҡыланһаң, ҡустым, әлеге урынында оҙаҡ ултыра алмаҫһың, нәвирнә", - тип асыҡтан-асыҡ әйтте бер ҡапҡорһағы. "Күпме эшләһәм дә эшләрмен, әммә һинең һымаҡтарға барыбер көн күрһәтмәм, ҡапаҡлама", - булды тура яуап. Ошо әйткәне тегегә, ауыр һүҙ ишетеп өйрәнмәгән еңмеш эшем эйәһенә, ғәләмәт оҡшаманы. Оҡшамаһа ла, һырмалы мылтығын тапшырып, ҙур ғына күләмдә штраф түләргә тура килде. Анһат ҡотолдо. Юғиһә, тыйылған һырмалы винтовка һаҡлағаны өсөн ултыртып ҡуйырға ла була ине. Әлеге шул "блат" инде: ҡайһылыр прокуратурала унын ниндәйҙер туған-тыумасаһы эшләй тиме?..

*саҡса - патронташ, **ҡыулау - факел.

лыҡтың өҫ яғынан, Ирәндек һырты башланған урында, күгелйем ташлы бейек кенә ҡаяһы бар. "Бурһыҡ ташы", тип атала ул. Әйтергә кәрәк, исеме есеменә тап килеп тора: ҡая аҫтын һимеҙ бурһыҡтар төйәк итеп алған, һәм уларҙы унан бер нисек тә ҡыуып сығарырмын тимә. Айбулат, тура тартып, ана шунда юл тотто.

Әрәмәлек ышығында тыныс, елдең әҫәре лә юҡ. Шуға ҡарамаҫтан, уҫаҡтың ҡыу япраҡтары шыптыр-шыптыр килә, ниндәйҙер билдәһеҙ көс тарафынан ағасынан айырылып, бәхилләшкән ише кәйелә-кәйелә ҡар өҫтөнә төшкәндәре лә күренгеләп ҡала. Уларына баҙыҡ-һары ҡайын япраҡтары ҡушыла. "Ағас та әле япраҡ ҡойоп бөтмәгән, ахыры, ҡары ла һуңға ҡалыр, - тип үҙенсә юрай Айбулат, - ә ҡар яумаған йылды үҙәктәргә үткәрер һыуыҡтары көслө була торған..."

Ана, алдараҡ, үҙе һаман йәшел булһа ла, тәлгәштәре ялҡынланып янған бөҙрә ҡыуаҡлыҡ тора. Балан икән! Унын бешеп тулышҡан, үтә күренмәле ҡыҙыл




гәрәбә ише емештәре күҙ яуын алып емелдәшә. Унан ҡалыша буламмы, тигәндәй, арыраҡ өйкөм гөлйемеш ҡыуағы баҙлап ултыра. Сабылмай ҡалған ҡаулан, башын күндәм генә эйгән дә, ярты-лаш күмелеп, ҡар аҫтында ята. Һауала, танауҙы ҡытыҡлап, серей башлаған япраҡ еҫе эленеп тора. Шыҡһыҙ һонтор ҡурай ботаҡтарында, күптән түгел генә үтеп киткән ҡояшлы көндәрҙе - "Әбейҙәр сыуағын" хәтерләтеп, көмөш сүс ише үрмәксе ауҙары йылҡылдаша. Йәй мәлендә йәйрәп үҫкән абаға хәҙер инде кибеп шоҡорайған да, епшек ҡар аҫтында, һәлмәк ауырлыҡты күтәрә алмайса, кәкерәйеп ҡалған. Әҙәм буйлыҡ ағас еләге үҫентеләре араһынан үткәндә кейемең генә сыҙаһын: сат йәбешеп алалар ҙа, ебәрмәй ыҙалаталар. Унда-бында уларҙың бешергә өлгөрмәйсә сөрөшкән һорғолт еләктәре күҙгә ташлана. Ә ана тегендә, шырлыҡтың ситендә, ҡаяға арҡа терәп үҫкән миләш ағасын ғауғасыл барҡылдаҡтар һырып алған. Емештәре унын ғәләмәт суҡ икән дә, үҙ уңышын үҙе күтәрә алмайынса, хатта ботаҡтары һығылып төшкән. Мылтыҡлы кеше менән этте күрә һалып алған барҡылдаҡтар, мәж килеп, элеккегә ҡарағанда ла көслөрәк шау-шыу күтәрҙе. Ул шау-шыуҙан хәҙер тик ҡасып ҡотолорға ғына мөмкин.

Шулай ҙа ҡай саҡ бында тыйылған зона икәнлеген ысынлап та белмәй килеп сыҡҡандар ҙа осраштырып ҡуя, һәм ундайҙарҙы һунар белгесе "тегеләренән" һис хаталанмайынса айыра.

Хужаһының бер-береһенә ялғана килгән уйҙарын бүлеп, ҡайҙалыр, әрәмәлек эсендә, Аҡтырнаҡтың сыйнау ҡатыш өрөп ҡуйғаны ишетелде. Һағая биреп, аҙымдарын йышайтҡан Айбулат күп тә барманы, йыбырлап уҙған йәнлектең ваҡ эҙҙәр сылбырына тап булды. Уларҙың алдынан ғына әле өңөнә ятырға өлгөрмәгән кәкере аяҡ терпе үткән ине. Терпе оҙайлы йоҡоға талмаған, тимәк, ҡыш килергә әле иртәрәк. Айбулат барып еткәндә, Аҡтырнаҡ, йомарланған көйө тырт та фырт һикереп-төшөп ятҡан сәнскеле йомғаҡты абалай ине. Уны тешләмәксе булып, ауыҙ-моронон ҡанға батырған.

- Аҡтырнаҡ! Аҡтырнаҡ, кемгә әйтәм, ә? Үҙеңдән бәләкәйҙәрҙе йәберләү ярамаған эш, - хужа кеше ярһыуы еткән этен ипле генә тыя һалды, - әйҙә, киттек бынан. - Тегеһе, әйтерһең дә, ошо үҙен-үҙе яфалауға тиң шөғөлдөң тиҙерәк тамамланыуын көткән, эре-эре һикереп, алға ҡарай сапты һәм тиҙ арала күҙҙән дә юғалды. Һунар этемен тигән эт өсөн хужа һүҙе - закон. Башҡаса уйлайһың икән - иҫәпкә һаналып, эйәреп тә йөрөмә.

Бына ошо урында үҙе тәрән, үҙе шомло үҙәк үтә. Унын төбөндәге, ағасы аяуһыҙ ҡырҡылып, үләне малдан тапалған шишмәһе инде ҡорор сиккә еткән. Уға ҡыҙғаныс төҫ менән ҡарап торған Айбулат: "Их, саҡ ҡына алданыраҡ ябып өлгөрмәнеләр шул Ирәндекте", - тип әсенде. Сал тау күкрәген ярып сыҡҡан шишмә башы бар донъянан йырып үткеһеҙ шырлыҡ менән ышыҡланған. Шыр-

Айбулат шул рәүешле, көҙгө урмандың әкиәти матурлығы менән сихри һиллегенә һоҡлана-һоҡлана, ашыҡмай ғына юлын дауам итә. Бара-бара ла, онотолоуҙан уйҙарға бирелеп китә. Унын резина итегенең быжыр табаны аҫтында ҡалып иҙелгән йомшаҡ ҡар өҙлөкһөҙ ғырт-ғырт килә, гүйә, әрһеҙлек менән тапап үткәнгә ризаһыҙлыҡ белдерә лә әлеге тупаҫлыҡҡа рәнйеп ыңғыраша. Көтмәгәндә-уйламағанда уны ныҡ һиҫкәндереп, аяҡ аҫтынан тиерлек ҙур ғына һоро ҡош осоп сыға. Был хас урман ҡошо - ҡурпысыҡ. Йылы яҡтарға китергә әле ашыҡмай икән, тимәк, был ҡар оҙаҡҡа бармай иреп бөтәсәк. Ҡуйы ботаҡтар араһынан, ниндәйҙер мөғжизә менән береһенә лә ҡағылмайса, кәйелә-кәйелә барып күҙҙән юғалған ошо серле ҡош хәҙер, ни сәбәптәндер, торған һайын һирәгерәк осрай.

Ауыр һәм оҙайлы гөрһөлдәп, ҡыуаҡтар араһынан ҡоштар бәһлеүәне һуйыр күтәрелде. Һуйыр - шымтояҡ, баҫалҡы ҡурпысыҡ түгел, аңғармайыраҡ барһаң, ҡотондо алыуы бар. Әскелтем һутлы балан менән һыйланырға килгән икән, ана, ҡыуағы аҫтында йөнтәҫ-эре эҙҙәре ярылып ята. Шунда уҡ һуты имеп ташланған емештәре лә күренә. Ҡайһы бер тәлгәштәрҙә бары яланғас һөйәктәр генә тороп ҡалған. Шул ҡәҙәре лә яратыр икән баланды берәү. Айбулат та унын ике-өс бөртөгөн өҙөп ҡаба. Әсеһе бөтөп килә икән дә. Һыуыҡтар башланыуға ул бөтөнләй тәмләнәсәк. Ә бына гөлйемешәлморондоң әле иң татлы ла, иң шифалы ла сағы. Форсат булып, ошо мәлдә ҡышҡылыҡҡа йыйырға кәрәк ине лә бит.

Йығылып ятҡан ярым серек ҡайын киҫкәһе һыртында ҡала кешеһе күҙенә нисектер салынмай ҡалған баллы бәшмәк өйкөмө күренә. Аҡһыл-һары эшләпәле тос бәшмәктәрҙең араһында, миҙгел ахырына хас, бөртөк тә боҙолғаны юҡ, ә үҙҙәренең күплеге-е! Салғы менән сабып йыймалы, валлаһи! Биштәргә тултырып алғанда инде... Юҡ, әлегә кәрәкмәй. Ҡасан, ҡайһы рәүешле ҡайтырыңды белеп булмай, нәҙберек-мурт эшләпәләр онталып әрәмгә сығасаҡ.

Торған һайын текәрә барған тауға күтәрелеүе һиҙелерлек ауырлаша. Өҫтәүенә, шыйғалаҡ ҡарҙа итектәр тайып йонсота. Ирәндек һыртына менеп еткәнсе Айбулаттың арҡаһынан ҡара тир бәреп сыҡты. Ул ҡулдан бәйләнгән дебет фуражкаһы менән битен һөртөп алды ла, арҡаһын терәп, йыуан, ҡытыршы ҡарағас төбөнә ултырҙы. Ҡайҙалыр китеп олаҡҡан Аҡтырнағы килеп күренмәне, тауыш-тыны ла тойолмай.

Сәйер ҡыштырлау ишетеп ҡалған Айбулат күтәрелеп өҫкә ҡараны. Унда, бер-береһенә үрелеп үҫкән ялбыр ботаҡтар араһына боҫа биреп, тейен ултыра ине. Бәләкәс кейектең ифрат килешле һорғолт-күк төҫтәге туны йылҡылдап тора, төймәсек-күҙҙәре ҡыҙыҡһыныу ҡатыш ҡурҡыу менән яна. Һунарсының күҙ ҡарашын шунда уҡ тойоп алған тейен йәшеренгән урынынан сыҡты ла күҙ эйәрмәҫ етеҙ хәрәкәттәр менән ағас олоно буйлап юғары үрмәләүгә, сирып булашҡан тубырсығы Айбулаттың алдына килеп төштө. Урыны-урыны менән ҡауы ҡайырылған тубырсыҡ яртылаш буш ине.

- Әх, шилма, миңә лә өлөш сығарҙыңмы ни? Әһ-һә, орлоҡтарҙың иң эре, иң туҡтарын үҙең ашағанһың, ә миңә сөрөш кенәләрен ҡалдырғанһың. Уға шулары ла ярап торор тигәнһеңдер инде, - күңеле булған Айбулат ихлас йылмайҙы, - ни эшләйһең, ошонооһона ла шөкөр итергә ҡала. Рәхмәт, кейек.

Ҡапыл-ҡара һалҡын алдырып ҡуймайым, тип, йылы фуражкаһын кеймәккә урынынан һаҡһыҙ ҡуҙғала биргән кеше ҡотон алдымы, йәнлек йәшен тиҙлеге менән күрше ҡарағайға һикерҙе лә ыҫпай ылыҫтар араһына сумып юҡ булды. Яҡынын оҙатҡан һымаҡ, нисектер, моңһоулап киткән Айбулат, моҡсайынан термосын сығарыуға, теле һәленеп төшкән Актырнағы килеп һыйынды. Хужаһы уға ҡалын ғына итеп май яғылған икмәк һыныҒы ҡаптырҙы. Үҙенең шыпа ашағыһы килмәй ине, шуға күрә сәй менән генә мөрхәтһенде.

- Аҙ ғына тын алайыҡ та ары китербеҙ, Аҡтырнаҡ, - һунарсы, иркәләп, этенең маңлайынан һыйпаны, - ошонда ятып тор.

**(Дауамы бар).**

✓ *"Төньяҡ һулышы" тип аталған коллекциябыҙ менән IV Волга буйы йәш модельерҙар һәм художник-дизайнерҙар фестивалендә ҡатнашып, I урын яуланыҡ.*

*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

**Әбйәлил районы йәштәр берлеге үткәргән "Камил инсан" конкурсында егеттәр өсөн тегелгән "Төньяҡ һулышы" кейем коллекцияһы тамашасыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятҡайны. Уның авторҙары - Әбйәлил районының Буранғол ауылында тыуып үҫкән Әлфиә менән Гөлфиә Хамматовалар әлеге Өфө дәүләт сервис һәм иҡтисад академияһының конструктор-модельерҙар факультетында 4 курсты тамамланы. Студент ҡына көйө төрлө мода форумдарында ҡатнашырға ла өлгөргән улар. Күптән түгел генә ҡыҙҙар "Магия стиля" йәш дизайнерҙар конкурсында III урын яулаған. Һүҙ - ҡыҙҙарҙың үҙҙәренә:**

# ӘҘӘМ КҮРКЕ СЕПРӘК ИКӘН -

## тимәк, сепрәктән мөғжизә тыуҙырыу кәрәк

### Икебеҙ бер йән кеүек

Мәктәпте тик "бишле" билдәләренә генә тамамлаһаҡ та, тәүге йылда юғары уҡыу йортона уҡырға инә алманыҡ. Шуға ла Сибай ҡалаһына барып, 24-се һөнәри лицейында тегенсе һөнәрен үҙләштерҙек. Ошо лицейҙа уҡыған саҡта тегенсе һөнәренә ҡыҙыҡһыныу уянды. Бер йылдан һуң тағы баш ҡалаға килеп, һынау тотоп, Өфө дәүләт сервис һәм иҡтисад академияһы студенттары булып киттек.

Игеҙәк булып йәшәү бик ҡыҙыҡ ул. Беҙ һәр ваҡыт бергә йөрөйбөҙ, бер иш кейенәбеҙ, хатта ҡыҙыҡһыныуҙарыбыҙ, хыялдарыбыҙ, маҡсаттарыбыҙ, уйҙарыбыҙ ҙа бер үк төрлө. Яңғыҙ ҡалған осраҡта бер-беребеҙ өсөн ҡурҡабыҙ, борсолабыҙ. Кемебеҙҙер магазинға яңғыҙ сыҡһа, икенсебеҙ уны түҙемһеҙләнеп, тәҙрәнән ҡарап көтөп ала. Икәү булыуыбыҙ, игеҙәк йән булыуыбыҙ менән бәхетлебеҙ. Был беҙгә уҡыуҙа ла ярҙам итә. Әлфиә теүәл фәндәрҙән алдыра. Ул курс эштәрен икебеҙ өсөн дә барыһынан алда эшләп ҡуя. Гөлфиә бәләкәй сағынан әҙәбиәт, тарих, география фәндәрен үҙ итте. Мөһим булмаған фәндәрҙән ниңә икебеҙ ҙә ыҙалып уҡып ултырырға тейеш әле? Имтихан-зачеттарҙа төрлө фәндәрҙән әҙерләнеп, бер-беребеҙ өсөн һынау тотоп сығабыҙ. Инде дүрт йыл уҡыйбыҙ, ә уҡытыусыларыбыҙ һаман айырмай беҙҙе. Былай хәйләләшергә студент булғас ҡына өйрәндек. Мәктәптә уҡыған саҡта һәр беребеҙ үҙе өсөн үҙе яуап бирә торғайны.

### Һөнәрле кеше юғалмаҫ

Нәҫелебеҙҙә оҫта ҡорама яһаусы инәйҙәребеҙ, өләсәйҙәребеҙ булды. Бала саҡтан шулар араһында энә, еп, сепрәк тотоп үҫтек инде. Бер туған Рәүиә апайыбыҙ тегергә яратты. Беҙ 11 класты тамамлағас, сығарылыш кисәһенә бер ҡайҙан ҡарамайынса, үлсәмәйенсә, күҙәбеҙгә төбәп кенә икебеҙгә лә күлдәк тегеп бирҙе. Беҙ, уның кеүек, кешенең һынына һалып, үлсәмәйенсә тегеү төрөн әле саҡ 4-се курста үттек. Беҙ әле үҙләштергән белемде апайыбыҙ әллә ҡасан уҡ белгән, тип көләбеҙ. Рәүиә апай киске уйындарға сығырға, йә берәй ҡунаҡҡа барырға кейем кәрәкһә лә үҙе тегә лә ала ине. Әсәйҙең матур-матур кейемдәрен ҡырҡҡыслап әрләнгәне лә булды. Ул оҙаҡ уйламай, тиҙ-тиҙ эшләп бөтөрә лә ҡуя. Ҡырҡып та ебәрә, тегеп тә ебәрә. Килеп сыҡмаһа, ҡырҡылған тауар киҫәктәрен икенсе маҡсатта файҙалана. Ҡул эштәренә маһирлыҡ ана шулай быуындан-быуынға күсә килгәндер инде.

Бәйләү һөнәрен нығыраҡ яратабыҙ. Мәктәптә уҡыған саҡта хеҙмәт дәрестәрендә лә, өйҙә лә ҡулыбыҙҙа гел бәйләм булды. Уҡытыусыбыҙ: "Тегеп, йә сигеп ҡарамайһығыҙмы?" - тиһә, "Беҙ бәйләргә генә яратабыҙ", - ти торғайныҡ.

Хәҙерге көндә магазин кәштәләрендә, баҙарҙа кейем тулып ятһа ла, кеше үҙенсәлекле кейем кейеүгә өҫтөнлөк бирә. Шуға ла тегенселәргә мөрәжәғәт итеүселәр күп. Әлбиттә, үҙебеҙгә кейемдәрҙе үҙебеҙ тегеп кейәбеҙ. Дөйөм ятаҡта ваҡ-төйәк ремонт менән дә шөғөлләнәбеҙ. Егеттәр-ҡыҙҙар кейемдәрен ҡыҫҡартыуҙы, йә тарайтып тегеп биреүҙе һорап килә. Уҡыу тығыҙ булғанға күрә, өлгөрмәй ҙә китәбеҙ. Әммә ҡыҙҙар, ябай ғына итеп булһа ла күлдәк тегеп бирегеҙ инде, тип үтенә. Магазиндан һатып алғансы, сифатлы материал алып текһәң, ябай ғына булһа ла кейем матур ҙа, үҙенсәлекле лә була шул. Иң мөһиме, башҡа бер кемдә лә ундай күлдәк булмаясаҡ.

Тегенсе һөнәре бик килемле һөнәр. Мәҫәлән, бүлмәлә дәрес эшләп ултыраһың, кемдер ишек шаҡый һәм салбарын ҡыҫҡартып биреүҙе үтенә. Был ни бары 5 минутлыҡ эш. Ә студент кешенең кеҫәһенә ул да ярап ҡала. Шулай итеп, эшкә урынлашмай, өйҙә ултырып та аҡса эшләргә мөмкин.

### Тәүге уңышыбыҙ

Мода көн һайын үҙгәреп, яңырып тора. Беҙ ҙә үҙебеҙ теккән кейемдәр менән шул модаға ниндәйҙер өҫтәмәләр индереп ебәрәбеҙ. Үҙебеҙ күбеһенсә аҡ, ҡара, йәшел төҫтәргә өҫтөнлөк бирәбеҙ. Кейем коллекцияларын да үҙебеҙ уйлап табабыҙ. "Композиция", "Рәсем", "Технология" тип аталған махсус дәрестәрҙә беҙ һүрәт төшөрөргә, төҫтәр һайларға өйрәнәбеҙ, төрлө коллекцияларҙы ҡарап, уның ниндәй йүнәлештә булыуын күҙаллайбыҙ. Һәр һүрәт уйланылған, тормошҡа ашырлыҡ, теккәс кейә алырлыҡ булырға тейеш.

"Төньяҡ һулышы" тип аталған коллекциябыҙ менән IV Волга буйы йәш модельерҙар һәм художник-дизайнерҙар фестивалендә ҡатнашып, I урын яуланыҡ. Коллекциябыҙҙың исемен уҡытыусыбыҙ менән килешеп, үҙебеҙ һайланыҡ. Беҙ бит Башҡортостандың төньяғында тыуып үҫтек. Кейемдәребеҙҙә милли орнаменттар ҙа урын алған. Тағы ла беҙ теккән кейемдәр күләмле: киң балаҡлы, киң еңле, йәғни ҡыш өсөн. Был беҙҙең сәхнәгә сығарған тәүге эшебеҙ булды, артабан хәйерле дауамдары булыр, тип ышанабыҙ.

Ниңә беҙ егеттәр кейемен һайланыҡ, тиһегеҙме? Ҡыҙҙар модаһы ныҡ үҫешкәнгә күрә, беҙ егеттәр модаһын шәйләмәйбеҙ ҙә. Кем мода менән ҡыҙыҡһына, кем яңынан-яңы кейемдәр кейгеһе килә - улар, әлбиттә, ҡыҙҙар. Ә егеттәргә көндәлек кейемдәр кәрәк, уларҙың бөтәһе лә сағыу кейемде үҙ итмәй һәм күбеһе кеше араһында артыҡ айырылып торорға теләмәй. Шуға ла беҙҙең нәҡ ир-егеттәр өсөн тегеп, уларҙың модаһын күрһәтке, аҫҡы килде.

### Кейемгә ҡарап ҡаршылайҙар…

Ҡайһы берәүҙәр кейемгә артыҡ иғтибар итмәй, нисек теләй, шулай кейенеп ала. Европа илдәрендә күберәк кешегә нисек уңайлы, шулай кейенәләр. Мәҫәлән, эшләгән саҡта еңел булһын өсөн ябай кейемдәр һайлайҙар, кроссовки, джинсы, футболка - уларҙың көндәлек кейеме. Рәсәйҙә мода артыҡ үҫешмәгән булған, яңыраҡ ҡына уның алға китеше тойола башланы. Кешеләр кейемгә иғтибарын арттыра, модаға эйәрә башланы. Әммә, модалы кейенәм, тип, үҙенә бөтөнләй килешмәгән кейем кейеүселәр бар. Мәҫәлән, бер йылда ҡыҙыл төҫтәр модаға инде һәм бөтәһе лә шул төҫтәге кейем алып кейә башланы. Иғтибар итһәгеҙ, ҡайһы бер кешегә ҡыҙыл төҫ бөтөнләй килешмәй. Шулай уҡ мода артынан ҡыуып, бәғзе берәүҙәр һәлберәп, йә, киреһенсә, артыҡ һығып торған кейем кейеп ала. Модалы түгел, ә билдәле бер стилдә кейенеү мөһим, йәғни кәүҙәңә нимә килешә, шуны һайларға кәрәк.

Беҙ иң тәүҙә кейем тектерергә килгән кешене өйрәнеп алабыҙ. Кейем кешенең кәмселектәрен дә ҡаплай ала. Ул кеше йәмғиәттә үҙен уңайһыҙ хис итмәһен өсөн уның ҡайҙа эшләүе, ҡыҙыҡһыныуҙары, холҡо - барыһы менән дә ҡыҙыҡһынабыҙ. Шул ваҡытта ғына кешегә килешле кейем тегеп була.

Ошоға тиклем һөнәребеҙ әллә ни күңелгә ятмай ине. Хәҙер матур кейемдәр тегеп кейә башлағас, ҡыҙыҡһыныуыбыҙ арта төштө. Ошо уҡыу йортонда уҡыуыбыҙға ҡыуанып бөтә алмайбыҙ. Кеше һәр ваҡыт өйгә, ризыҡҡа һәм кейемгә мохтаж, шуға күрә беҙгә эшһеҙлек мәсьәләһе бер ҡасан да янамаясаҡ. Үҙебеҙҙең юлыбыҙҙы таптыҡ, тип уйлайбыҙ.

**Шулай итеп…**

**Игеҙәктәрҙең монологын бер кеше ауыҙынан сыҡҡан рәүештәрәк ҡорҙоҡ, сөнки улар аралашҡанда икеһе бер кеше кеүек. Береһе һөйләй башлаһа, икенсеһе уның фекерен дауам итә, гүйә, бер-береһенең фекерҙәрен уҡыйҙар. Киләсәктә ҡыҙҙарға уңыштар теләйек, үҙләштергән һөнәрҙәренең мәнфәғәтен күрһендәр.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА**
**яҙып алды.**



Ҡыҙҙарҙың “Төньяҡ һулышы” кейем коллекцияһы.

ӘСТӘҒӘФИРУЛЛА!

**Депрессияны XXI быуат чумаһы тип йөрөтәләр һәм, ысынлап та, уны урта быуаттың иң ҡурҡыныс ауырыуы менән сағыштырыу юҡҡа түгел: иҫәпләүҙәр буйынса, 2020 йылда депрессия башҡа ауырыуҙар араһында бөгөнгө лидерҙарҙы - инфекция менән йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын уҙып китеп, беренсе урынға сығасаҡ; нәҡ XXI быуатта депрессия беренсе урында торған үлтереүсе буласаҡ. Хатта әле лә ер йөҙөндәге кешеләрҙең 50 проценты депрессия хәлендә үҙ-үҙенә ҡул һала. Статистика күпте белә - ул юғалтыуҙарҙы ла һынап сығара ала, ваҡиғаларҙы алдан хәбәр итеп тә ҡуя, әммә ул депрессия хәлендәге кешенең күңеленә үтеп инә алмай. Уларҙың һәр береһенең үҙ ауырыуы, ҡурҡыуы, үҙ сәбәбе бар. "Минең депрессия" - йыш ҡына беҙ был һүҙҙәрҙе мәғәнәһенә төшөнөп етмәйенсә ҡабатлайбыҙ. Ә депрессия нимә һуң ул?**

# БЫУАТЫБЫҘҘЫҢ ТӨП ҮЛТЕРЕҮСЕҺЕ...

## Күңел төшөнкөлөгө генәме?

Депрессия - ул кәйеф төшөү тигән генә һүҙ түгел. Кешегә, беҙ кире тип йөрөткән - күңел төшөү, бойоғоу, һағышланыу, рух төшөнкөлөгө кеүек төрлө тойғолар кисереү тәбиғи хәл. Тормош бер урында ғына тормай - беҙ ҡайғырабыҙ һәм шатланабыҙ, илайбыҙ һәм көләбеҙ, икенсе һүҙҙәр менән әйткәндә, йәшәйбеҙ. Ә депрессия ваҡытында күңел төшөнкөлөгө бер-нисә көндән бер-нисә айға тиклем дауам итергә мөмкин. Оҙаҡҡа һуҙылған депрессия ваҡытында ул йылдар буйы дауам итеүе лә бар. Уның бер билдәһе - өмөтһеҙлеккә бирелеү. Ҡайһы бер ваҡытта кеше үҙенә ҡыйын булһа ла был хәлдең ваҡытлыса ғына икәнен аңлай. Ул йылмайып, тормоштан йәм таба ала. Әммә депрессия ваҡытында был мәңге кеүек тойола, ә киләсәк тоноҡ буяуҙарҙа ғына һүрәтләнә.

Депрессия характерҙың кәсһеҙ икәнен билдәләүсе түгел - был ысын ауырыу, уға медицина ярҙамы талап ителә. Депрессия ваҡытында кеше организмындағы биохимик процестар боҙола - йыш ҡына мейенең нервы күҙәнәктәре араһында мәғлүмәт ебәреүсе химик матдәләр кимәле кәмей.

## Билдәләре ниндәй?

Медицинала депрессияның төп өс төрөн билдәләйҙәр: хәрәкәт әүҙемлеге кәмеүе (акинезия), бөтә нәмәгә вайымһыҙ мөнәсәбәт (абулия) һәм кәйеф төшөүе (апатия). Депрессия "теләмәйем" тигән һүҙҙән башлана: быға тиклем яратҡан эшең менән шөғөлләнергә теләмәү, кешеләр менән аралашырға һәм аралашырға теләмәү, быҒаса үҙенән-үҙе эшләнгән көндәлек эштәрҙе эшләргә теләмәү. Донъя ҡараңғылана, тормош төҫһеҙләнә, һин туҙанлы вокзал тәҙрәһенән ҡарап тораһың кеүек, ә эргәлә генә уттары янып торған, матур көйҙәр ишетелгән поезд китеп бара, әммә туҡтамай, артабан елә. Күптән түгел генә тыныс, аһәңле, нурлы күнел ҡурҡыу, үҙ-үҙенә ышанмаусанлыҡ менән тула. Артабан "теләмәйем" һүҙенә тағы ла ауырыраҡ һүҙ ҡушыла: "эшләй алмайым". Ысынлап та, күп эштәрҙе, хатта ябай ғыналарын да эшләй алмайһың. Теләк тә юҡ, көс тә юҡ. Иртәнсәк тороуҙар батырлыҡҡа әйләнә, ҡыҫҡа төндәр тынысһыҙ килтермәй. Аңраланаһың. Яңы ғына үҙенән-үҙе башҡарылған эштәр бик ҡыйынға, хатта мөмкин булмаҫлыҡ хәлгә әйләнә. Тормош ҡот осҡос.

## Ул нисек барлыҡҡа килә?

Депрессияға төрлө хәлдәр этәргес булыуы мөмкин - ауырҙарынан башлап, көндәлек ваҡ-төйәккә тиклем. Төп сәбәптәре - стрестар. Яҡын кешендең вафат булыуы, эш урыныңды юғалтыу, яҡын кешеләр менән конфликттар, яңғыҙлыҡ, бойомға ашмаҫ хыялдар. Әлбиттә, яҡын кешеңде юғалтҡан саҡта күңел төшөүе һәм юҡһыныуҙар тәбиғи, әммә ҡайһы бер осраҡтарҙа улар шул тиклем көслө була һәм медицина ярҙамына мөрәжәғәт итеүҙән башҡа сара ҡалмай. Артыҡ ҙур булмаған хәлваҡиғалар ҙа беҙҙең психикабыҙҙа эҙһеҙ үтмәй - йәйлап йыйыла торғас, улар кешене депрессияға килтерә.

Күп кешеләр үҙҙәрендә депрессия булғанын һиҙмәй ҙә, сөнки улар ниндәй ҙә булһа тән ауырыуына ышыҡлана һәм йыш ҡына йөрәге йә ашҡаҙаны ауыртыуына зарлана, ә сәбәп бөтөнләй унда булмай сыға. Депрессияның дистимия тип аталған төрө бар. Дистимия ваҡытында депрессия симптомдары асыҡ күренмәй һәм кеше, гүйә, инерция буйынса ғына йәшәй. Ул, автомат кеүек, һәр ваҡыт бер торошҡа өйрәнеп һәм шуны ғәҙәти күренеш, тип һанап, шатлыҡһыҙ йәшәй. Ысынында, был да депрессия тип атала һәм унан ҡотолорға мөмкин.

"Һәр күңел хәсрәтенең йәҙ сағылышы бар", - тип әйткән Шекспир. Ҡайһы берәүҙәр бер тапҡыр ғына депрессия үткәрһә, икенселәрҙә ул йыш-йыш ҡабатланып тора. Депрессия беҙҙең тормошобоҙҙо боҙа, уның эште, ғаиләне, дуҫтарҙы юғалтыуға, һимеҙлеккә, эскелеккә килтереүе ихтимал. Йыш ҡына депрессия ваҡытында кешенең фекерләүе тиҫкәреләнә һәм кеше был хәлдән сығыу юлын тапмай. Ул күңел төшөнкөлөгөнә бирелә һәм тормошон яңынан дауам итергә көсө етмәй. Ниндәйҙер маҡсат булған осраҡта кеше һәр нәмәне енеп сығырға һәләтле. Тик был осраҡта бер нәмә өсөн дә йәшәргә, көрәшергә теләмәгән кеүекһең. Үкенескә күрә, күп кешеләр ошо ваҡытта ҡотолоу юлын үлемдә күрә. Эйе, үлем йәшәү мәғәнәһенә бәйле һорауҙарға яуап бирә алмай, әммә ул бер һелтәүҙә бөтә яфаланыуҙарҙы юҡ итеүе мөмкин.

Депрессия менән мотлаҡ көрәшергә кәрәк. Һәм көрәшеп уны еңергә мөмкин. Йәшәр өсөн. Беҙ бит был ергә йәшәр өсөн килгәнбеҙ. Һәр кеше шатланырға һәм ижад итергә хоҡуҡлы.



## *ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП…*

**Депрессиянан нисек ҡотолорға мөмкин, тигән һорауға бер нисә кешенән яуап алдыҡ:**

**Гүзәлиә ҒӘБИТОВА, шәфҡәт туташы:** Әгәр ҙә депрессия енелсә икән, урманда йөрөп килергә, һыу ағышына ҡарарға, болоттар күҙәтеп тынысланырға мөмкин. Тәбиғәт һәр ваҡыт кешене тынысландыра. Тағы ла, мотлаҡ Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәт итегеҙ. Хатта бер ниндәй ҙә илаһи көскә ышанмайым, тигән кешеләр ҙә иң ауыр минуттарында Аллаһҡа ялбара. "Аят әл Курси", "Ихлас", "Фәләк", "Нәс" кеүек көслө һыналған айырым сүрәләрҙе уҡырға һәм бөтә булған проблемаңды, ҡайғы- хәсрәтеңде Аллаһҡа һөйләп, күңелеңде бушатырға кәрәк. Был осраҡта, ысынлап та, Аллаһы Тәғәлә беҙҙең иң яҡын дуҫ. Бер хәҙистә лә әйтелгән бит: "Дуҫ кәрәкһә, Хоҙайға һыйын". Ул беҙҙең серебеҙҙе бер кемгә сисмәйәсәк тә, беҙҙең хәлебеҙҙән көлмәйәсәк тә, тик ярҙам итергә булышлыҡ итер. Ҡөрьән уҡыу бигерәк тә файҙалы. Аллаһы Тәғәләнең Изге Китабында: "Доға уҡымаһағыҙ, ни әһәмиәтегеҙ бар", - тигән һүҙҙәр ҙә бар. Әгәр ҙә Ҡөрьәнде үҙең уҡый белмәйһең икән - тыңларға ла мөмкин. Ҡөрьән тауышы шул тиклем илаһи, күңелдәргә үтеп инә, йөрәк ҡылдарын тирбәлдерә. Ул дауалау сифатына эйә. Ҡөрьән тыңлаусылар араһында иң хәтәр хәлдәрҙән ҡотолоусылар ҙа бар. Депрессия ваҡытында тынысландырыусы дарыуҙар бар, әлбиттә. Тик кеше дарыуға ныҡ өйрәнеп китеүсән, шуның өсөн дә һәр кем ауырлыҡтан үҙ көсө менән сыға белергә тейеш.

**Айгөл АХУНОВА, пенсионер:** Ауыр ваҡыттар, стресс, депрессия һәр кемдең тормошонда була ул. Кемдәрҙер уны еңел үткәрә, ауыр һынауҙарға бирешмәй, кемдәрҙер бөгөлөп төшә һәм артабан тормошон дауам итергә көс тапмай. Депрессия ваҡытында кеше ни эшләргә белмәй һәм күп осраҡта араҡыға, тәмәкегә, наркотикка ҡулын һуҙа. Был насар күренеш. Депрессиянан былдай ҡотолоу юлын көсһөҙ кешеләр һайлай, тип уйлайым мин. Минең тормошомда ла ваҡ-ваҡ күңелһеҙлектәр булып үткәне бар. Ул саҡтарҙа мин үҙемдең яратҡан эшем менән шөғөлләнәм. Ысынлап та, бер аҙҙан стресс үтә һәм һин ҡабаланып ниҙер эшләп ташлауҙан ҡотолаһың, ә барыһын да йәйлап фекерләп, бизмәнгә һалып үлсәп кенә хәл итәһең. Таныштарым араһында стресс ваҡытында ашап тынысланғандар бар. Йылға буйына барырға, парк буйлап йөрөп килергә, тәбиғәт мөғжизәләрен күҙәтергә лә була. Бик тә булмаһа, күптән хыялланған әйберенде һатып ал һәм ҡыуан. Әгәр ҙә яҡын дуҫтарың бар икән, ҡайғыңды улар менән уртаҡлаш.

**Нәҙир ИШБИРҘИН, шофер:** Өс йыл элек иң яҡын кешемде юғалттым. Шул ваҡытта минең өсөн донъя ҡараңғылыныл, тормош һүнгән кеүек булды. Гүйә, йәшәү йәмен юғалттым, артабан йәшәүҙең бер ниндәй мәғәнәһе лә ҡалмаған төҫлө ине. Шул ваҡытта инде оло йәштәргә еткән атайым, арҡамдан ҡағып: "Улым, бирешмә, беҙгә бит артабан йәшәргә, тормош усаған һүндермәскә кәрәк. Һин дә бөгөлөп төшһәң, ҡалғандар ни эшләр?" - тине. Ысынлап та, шул ваҡытта ҡалған туғандарымды уйланым. Мин дә бөгөлөп төшһәм, улар нимә эшләр? Улар кем ҡарауында ҡалыр? Шулай уйлап, яйлап үҙемде ҡулға алдым. Шул тиклем ябыҡҡанмын, хәлһеҙләнгәнмен, бер ниндәй ҙә көсөм юҡ. Шулай ҙа инемә төшкән ҙур яуаплылыҡ бирешергә ирек бирмәй. Бәлки, яуаплылыҡ минең өҫкә төшмәһә, мин дә юғалып ҡалыр инем. Ләкин был осраҡта үҙемде генә түгел, башҡаларҙы ла уйлау кәрәк ине. Хәҙер уйлайым да, күрәһең, шул яуаплылыҡ тойғоһо минә депрессиянан сығырға ярҙам иткәндер. Әҙәм балаһы төрлөсә һынау үтеп кенә тора. шул һынауҙарға бирешмәй, дөрөҫ ҡарар сығарып йәшәй белергә кәрәк.

**Шулай итеп…**

**Аллаһы Тәғәлә ауырлыктарҙы үҙенең яратҡан ҡолдарына ғына ебәрә, ти. Сәхәбәләр ҡырҡ көн проблемалары булмай торһа, Бәйғәмбәребеҙгә йүгереп килгәндәр: "Аллаһы Тәғәлә беҙҙе онот-томо әллә?", - тип ҡайғырған улар был осраҡта. Беҙ ҙә депрессия ваҡытында һынып төшмәйек, быны ваҡытлыса хәл икәнен аңлайыҡ. Уйлап ҡараһаң, һәр кемдең тормошонда ҡыуаныслы минуттар күңелһеҙҙәренә ҡарағанда күберәк була бит.**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА әҙерләне.**

*ТӘҮБӘ*



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 5-се һабаҡ: "Кем ысын дуҫ, кем - шешәләш?"

"Дуҫыңдың кем икәнен әйт, һинең кемлегеңде әйтермен!" - тигән әйтем бар. "Дуҫыңды һынар өсөн уны иҫерткәнсе эсереп ҡара", - тип тә әйтәләр. Ә мин былай тип әйтер инем: "Кемдең ысын дуҫ, кемдең шешәләш кенә икәне эсеүеңде ташлағас күренә". Баҡтиһәң, беҙ эскән саҡта ысын дуҫ менән шешәләште айыра белмәйбеҙ икән. Һинең менән бергә эскәндәр, "күңелле донъяның" барлыҡ рәхәтлектәрен һәм михнәттәрен бүлешкәндәр - барыһы ла бер туғандар, йәнәһе, дуҫтар.

Мин Шешәбикә менән хушлашҡандан һуң элекке шешәләштәрем өс төркөмгә бүленде. Беренсе төркөм был яңылыҡҡа әллә ни әһәмиәт бирмәне: "Ярар, беҙгә күберәк тейә", - тип, киреһенсә, шатланды ғына булһа кәрәк. Икенселәре үҙҙәренең араһында бынамын тигән "коллеганы" юғалтыуға ҡайғырҙы. Сөнки мин улар өсөн яртыға тип аҡса йыйғанда "өсөнсө кеше", ауыр саҡта уларҙы ҡотҡарыусы инем. Улар, үҙҙәре лә аңлап бөтмәҫтән, тағы ла бер йыл һуҙымында, шешә ҡыҫтырып, миңә килеп йөрөйәсәк әле. Мин улар янында һыу йә сәй эсеп кенә ултырасаҡмын, улар миңә эсеүҙең ләззәтен ҡат-ҡат аңлатасаҡ. Уларҙың һөйләгән хәбәрҙәре, тикшергән мәсьәләләре миңә бик ҡыҙыҡ һәм бер ҡатлы тойоласаҡ. "Мин дә яңыраҡ ҡына улар менән бергә шулай ваҡ-төйәк хаҡында "мөһим хәбәр" һатып ултырҙыммы икән ни?" - тип, үҙ-үҙемә аптыраясаҡмын әле. Ни өсөн тигәндә, эскәндәге һөйләшеүҙәр айныҡ кеше күҙлегенән - мәғәнәһеҙлек.

Өсөнсө төркөм был аҙымымды сиктән тыш хәл итеп ҡабул итәсәк, көсләп эсерергә өндәйәсәк. "Эсмәй, әллә кем булып ултыраһың, беҙҙән ҡайһы ереӊ артыҡ, беҙҙе алкашҡа һанайһыңмы, байырға уйлайһыңмы?" - тип, үҙҙәренең миңә ҡарата агрессив мөнәсәбәтен дә күрһәтеп, йоҙроҡ төйнәп, ҡурҡытып маташасаҡ.

Хәҙер инде элекке шешәләштәрем килеп, мине йонсотмай, үҙҙәренсә әйткәндә, "үлеп барғанда" ғына килеп етәләр. Һәр саҡтағыса: "Ошонан төҙәлһәм, бүтән ауыҙыма ла алмайым", - тип ант итәләр. Тәүҙә мин уларҙың хәленә инә торғайным, икенсе тапҡыр килгәндәрендә, биргән анттарын иҫтәренә төшөрәм, намыҫландырам, шунан улар, ғәфү үтенеп, кире китә. Әле килеп, элекке шешәләштәремдең миңә юлы һыуынды булһа кәрәк.

Хәҙер инде ысын дуҫтарым тураһында. Башта шуны ла әйтеп китәйем: ысын дуҫтар күп булмай икән. Кемдер, минең дуҫтарым иҫ киткес күп, ти икән, ул яңылыша. Улар берәү-икәү, уҙа барһа, өсәү генә була. Минең өсөн дуҫ - теләһә ниндәй осраҡта ла һине алмаштыра алырлыҡ кеше, һинең һыңарың. Мин "йәшел йылан" йоғонтоһонан ҡотолғас та, элекке шешәләштәремдең барыһын да айыҡлыҡҡа өндәргә тотондом, үҙемсә аңлатыу һабаҡтары үткәрҙем. Тырышлығым бушҡа китмәне, уларҙың араһынан өсәүһен айырып ала алдым. Хәҙер инде мин уларҙы ысын дуҫтарым тип атай алам.

Исмәғзәм менән беҙ студент йылдарында дуҫлаштыҡ. Ятаҡтың бер бүлмәһендә йәшәнек, йәшлегебеҙҙең күңелле мәлдәрен уртаҡлаштыҡ һәм, әйтергә кәрәк, бергә эсергә өйрәндек. Һыранан башланыҡ та, яйлап-яйлап ҡатырағына күстек. Эсеүҙе ташлап, яңы тормош башлайбыҙ, тигән ынтылыштарыбыҙ ҙа булманы түгел, булды. Иң тәүҙә бүлмәлә йыйылып киткән буш шешәләрҙе тапшырабыҙ ҙа, көн күргән мөйөшөбөҙҙө ҡырып-йышып таҙартабыҙ. Аҙаҡ мунсаға барып, сафланып ҡайтабыҙ. Эсеү тураһындағы фекерҙе ситкә ҡыуыу өсөн спорт кейемдәре кейеп, Ағиҙелдең аръяғына йүгерәбеҙ. Тирләп-бешеп, арып-талып бүлмәгә килеп ауабыҙ. Хатта бер саҡ бокс секцияһына ла йөрөп алдыҡ. Ниәт-маҡсатыбыҙ изге булһа ла, ихтыярыбыҙ тиҙ һына ине. Аҙна-ун көн түҙгәндән һуң, күпереп торған һалҡын һыра беҙҙе барыбер үҙенә кире ҡарата килде.

Ул йылдарҙа, иҫләйһегеҙҙер, ҡаланың теге йәки был мөйөшөндә һыра һатыу киоскылары теҙелеп ултыра ине. Иртә таңдан эңергә тиклем улар янында өс литрлыҡ банка тотҡан ираттар, этешә-төртөшә, темеҫкенә торғайны. Улар араһында Исмәғзәм менән мин дә бар инек. Икебеҙгә көн һуҙымында барлығы 40 литр һыра һемереп, рекорд ҡуйғаныбыҙ ҙа булды.

Ни өсөн беҙ ул йылдарҙа, үҙебеҙсә әйткәндә, "яңы тормош" башлай алмағанбыҙ? Беҙгә ихтыяр көсө етмәгән, тип әйтеү бер яҡлы ғына булыр ине. Хәҙер инде шундай һығымталарға киләм: кеше тота килеп, ҡапыл: "Мин шулай булайым әле", тип, үҙлегенән үҙгәрә алмай. Әҙәм балаһын тәүбәгә килтерерлек, хатта үҙендә яҙмышын үҙгәртерҙәй көс табырлыҡ ғәҙәттән тыш ваҡиға кәрәк икән. Мин 1-се һабаҡта уҡ был турала әйтеп киткәйнем, эйе, "Хоҙай кешене өс тапҡыр иҫкәртә".

Икенсе яҡтан, ул саҡта беҙ барыбыҙ ҙа, шул иҫәптән Исмәғзәм менән мин дә, романтиктар инек. Беҙҙе ул ваҡытта, мәктәптә лә, юғары уҡыу йортонда ла, матур киләсәк һағымында, коммунизм иллюзияһында тәрбиәләнеләр. Ә беҙгә бит тәбиғәттән бөтөнләй башҡаса ҡеүәт-ҡөҙрәт һалынған. Аҡланырға теләмәйем, ләкин беҙ, моғайын, йән яныуыбыҙҙы ҡайҙа ҡуйырға белмәй, үҙ-үҙебеҙҙе бойомға ашыра алмай, эскәнбеҙҙер, тигән уйҙар ҙа башҡа килеп ҡуя. Быны башҡаса нисек аңлатырға? Сөнки беҙҙең ҡанда араҡының "А" хәрефе лә булмаған. Исмәғзәмдең дә, минең дә олатай-ҡартатайҙарыбыҙ бөтөнләй эсмәгән, атайҙарыбыҙҙың да беҙ яралған һәм тыуған осорҙа, илдә карточка системаһы бөтөрөлөп, яңы икмәккә туйған саҡта эске ҡайғыһы булмаған. Ҡыҫҡаһы, ҡаныбыҙ һәр йәһәттән таҙа булған.

Дуҫым Исмәғзәм, бер нисә тапҡыр ынтылып, тәки ҡотолдо был бәләнән. Миңә үҙенең ысын дуҫ икәнен иҫбат итте. Гәзиттә минең яҙмаларым барлыҡҡа килгәс, ул да был хаҡта яҙырға тотондо. Һабаҡтарым баҫылып бөткәс, атымды уның урамына туғарам.

Яңыраҡ бер осрашҡаныбыҙҙа Исмәғзәм миңә: "Беләһеңме, Әхмәр, беҙ айныҡ аҡыл менән беренсе тапҡыр һөйләшеп ултырабыҙ бит, быға тиклем нимә тураһында хәбәр һатҡанбыҙҙыр, иҫләмәйем...", - тине.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

*КИҪӘТЕҮ*

# ОБОЙҘАР ҘА...

## һаулыҡҡа зыян килтерә

Бөгөн баҙар Ҡытайҙан килтерелгән һәм урында етештерелгән насар сифатлы төҙөлөш материалдары менән тулған. Быға етештереүсе компанияларҙың материалдарҙың дәүләт стандарт талаптарын боҙған өсөн закон алдында яуаплылыҡҡа тарттырылмауы һәм һатылған тауарҙарҙың контролдә тотолмауы ла сәбәпсе.

Йортоғоҙға ҡайтҡас, башығыҙ ауырта башлаһа, йыш йүткерһәгеҙ, сөскөрһәгеҙ - фатирығыҙҙы ремонтлау һәм биҙәү өсөн ниндәй материал ҡулланылыуына иғтибар итегеҙ. Тиҙ таҙартып була торған, модалы матур обойҙар ҙа һаулыҡҡа насар тәьҫир итеүе мөмкин. Ҡайһы бер синтетик материалдар фенол, формальдегид, толуол, бензол кеүек химик матдәләрҙән торған быу бүлеп сығара. Әгәр ҙә кеше үпкә, тын юлдарының йәки танауҙың хроник сирҙәре менән яфалана икән, был матдәләрҙең тын юлына тәьҫир итеүе бар. Ҡурылдай астмаһы ваҡытында кеше быуылығырға мөмкин.

Шуға ла төҙөлөш һәм биҙәү материалдары һатып алғанда бик иғтибарлы булыу кәрәк. ПВХ һәм ДСП изделиеларынан баш тартыу хәйерлерәк, сөнки ПВХ-продукттар поливинилхлоридтан яһала, был бик көслө ағыу һанала һәм ул нервылар системаһын сафтан сығара, яман шеш барлыҡҡа килтерә. Саҡ ҡына температура күтәрелһә, винилхлорид тағы ла әүҙемерәк бүленә башлай. Бөгөн күп кенә йорт йыһаздары составында карбамидоформальдегид йәки фенолформальдегид ыҫмалалары булған ДСП-нан яһала. Был матдәләр ағас онтағын тотоштырыусы булараҡ ҡулланыла.

Буяу һайлағанда ла һаҡ булығыҙ. Һыуҙа иҙелә торған йәки казеин һәм эзбизле-казеин кеүек тәбиғи буяуҙар - иң яҡшыһы. Ремонт эштәре менән булышҡанда битлек кейергә һәм бүлмәләрҙе йыш елләтеп торорға ла онотмағыҙ.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Саф намыҫлы бул

Томас Джефферсон замандаштарының береһенә ебәргән хатында былай тип яҙған: "Кем үҙенә бер тапҡыр алдарға юл ҡуя, ул быны еңел генә итеп икенсе, өсөнсө тапҡыр эшләй, йәғни алдашыу уның ғәҙәтенә әүерелә. Ул һөҙөмтәләре тураһында уйлап та бирмәйенсә гел алдашҡас, хаҡ һүҙ әйткәндә лә бер кем дә уға ышанмай. Был тел алдашыуы йөрәк алдашыуына килтерә һәм ниндәйҙер ваҡыт үтеүгә кешенең барлыҡ ыңғай сифаттарын боҙоп бөтөрә".

Джефферсон ғәҙел кешеләр был һынауҙы ваҡыт аша кисерә алһын өсөн алдан ҡайғыртыусанлыҡ күрһәткән. "Ҡайһы саҡта кешегә үҙ-үҙе менән идара итеүҙе ышанып тапшырырға ярамай, тип әйтәләр, - тип яҙған ул. - Ул саҡта был кешегә бүтәндәр менән идара итеүҙе ышанып тапшырырға мөмкинме һуң?" Тар шәхсән донъя сиктәренән сығып ҡарағанда бик матур фекер әйтелгән. Әгәр ҙә һәр милләт бик күп бәләкәй генә шәхсән донъялар бәйләнешенән түгел икән, ул саҡта нимәнән тора һуң? Бына беҙ ҡалабыҙҙағы төрлө ғәҙелһеҙ күренештәрҙе гәзиттәрҙән уҡып ҡалтыранабыҙ. Беҙ нимә эшләй алабыҙ һуң? Нисек итеп беҙгә үҙгәрергә? Хәҡиҡәтте танып белеү беҙҙең ҡулдамы, әллә түгелме?

Һин эшләй алырлыҡ тәүге аҙым - ул үҙеңә һәм башҡаларға ҡарата ғәҙеллек күрһәтеүҙе көндәлек ғәҙәткә әүерелдереү. Ниндәй ҙә булһа әрләшеүҙән ҡасыу йәки "һыуыныу" өсөн тойғоларыбыҙҙы баҫабыҙ икән, беҙ үҙебеҙҙең эске тауышыбыҙҙы өндәшмәҫкә мәжбүр итәбеҙ. Беҙ хәҡиҡәтте баҫабыҙ, әммә ниндәйҙер ваҡыт үтеү менән беҙ был тауышты бүтәнсә ишетә алмайбыҙ. Был бөгөнгө көндә психологтар һәм психиатрҙарҙың ни өсөн эше күплегенең бер сәбәбе. Беҙ үҙебеҙҙең шәхси эске теләкте яңынан уятыу мөмкинлеген белер өсөн аҡса түләйбеҙ. "Ҡабатлау - ғилем әсәһе" тигән боронғо әйтем был хәҡиҡәткә ҡулай тура килә.

Был эште бөгөндән башла. Ҡағыҙ киҫәге ал да, уны ике бағанаға бүл. Бер яғында кеше холҡондағы һиндә ихтирам уятҡан һыҙаттарҙы яҙ. Наҙлылыҡ, көс, юмор тойғоһо, дипломатлыҡ, мөхәббәт йәки хеҙмәт һөйөүсәнлек кеүек сифаттарҙы ла яҙырға тартынма. Икенсе бағанаға һине кәмһеткән, һине үҙеңдән сығарған һыҙаттарҙы яҙып сыҡ. Моғайын да, һин унда асыу, ялҡаулыҡ, алдашыу, ҡурҡаҡлыҡ, тупаҫлыҡ йәки көнсөллөк кеүек сифаттарҙы теркәрһең.

Ә хәҙер ике бағанаға ла күҙ һал һәм үҙеңдә күргән лайыҡлы сифаттарҙы алдашмайынса ғына һанап сыҡ. Был сифаттарҙың ҡайһыһы һиндә сағылыш тапҡанын, ә ҡайһыларын нығытырға һәм шымартырға кәрәклеләрен эҙләп тап. Кире сифаттар теркәлгән бағананы алып, үҙеңдә булғандарын, хатта әллә ни күҙгә салынмағандарын да, билдәләп сыҡ. Бигерәк тә улар һиндә сағылыш тапҡанда теркәй һал. Уларҙан тулыһынса баш тартма, кире осраҡта улар саҡырылмаған ҡунаҡ кеүек, ҡапыл килеп сығасаҡ.

Ғәҙел һәм саф намыҫлы бул. Үҙеңде бөтә өҫтөнлөктәрең һәм кәмселектәрең менән ярат. Һин кеше, һәм һиндәге илаһи асыл - һинең ихласлығың - бүтәндәр кеүек, һине лә камил итә ала. Ғәҙеллек һәм эске азатлыҡҡа эйә булып, һин был донъяла йәшәр өсөн һайлаған сифаттарға эйә буласаҡһың. "Үҙеңде танып бел" тигән оракул. Был наказды үтәп, һин рухи мираҫыңа һәм бөйөклөгөңә хоҡуҡ билдерәһең.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

✓ Теләһә нәмә һатып алыуҙан тыйылығыҙ. Эшегеҙҙән китмәгеҙ, әгәр ҡыуһалар, үҙегеҙҙең эшсе хоҡуҡтарығыҙҙы яҡларға әҙер булығыҙ. Аҙыҡ-түлек һәм ҡулланыу тауарҙарының иреклe һәм юғары хаҡтарҙан азат булған сығанаҡтарын эҙләгеҙ



БЕЛЕП ҠУЙ!

# КӨРСӨКТӨҢ...

## икенсе тулҡыны киләме?

**Иҡтисад һәм финанс өлкәһе белгестәре, көрсөктөң икенсе тулҡыны ҡасан килеп баҫыр донъяны, тип көнө-төнө фараз ҡора һәм күрәҙәлек итә.**

### Беренсе фекер

Үҙенең ҡәтғи һәм күңелгә шом һалыусы фараздары менән билдәле иҡтисадсы Михаил Хазин әйтмешләй, беҙҙә хәҙер ошо "икенсе тулҡын" хаҡында һүҙ алып барыу модаға әйләнде. "Асылда , - ти М. Хазин , - көрсөк башланғаны бирле унының ахыры күренмәй әле. Шуға күрә аңлашылмай: Рәсәйҙәниндәй " икенсе тулҡын " тураһында һүҙ булыуы мөмкин?"

Тулҡын - ул ысын ғына әйткәндә, АҠШ-та, - ти әлеге иҡтисадсы, - сөнки тап унда әле инфляция, әле дефляция... Ә беҙҙә сәнәғәт етештереүе кәмеүен дауам итә генә түгел, хатта тиҙләнеш ала, тип әйтергә була. Әле ул йыл башынан 17 проценттан да ашыуыраҡ кимәлде тәшкил итә. Шуға күрә лә көрсөк дауам итә, тип әйтеү дөрөҫөрәк булыр. Дөрөҫ, йәй осоро, халыҡтың күпләп отпускыла йә булмаһа мәжбүри ялда булыуы көрсөк эҙемтәләрен ныҡлап тойорға форсат бирмәйҙер ҙә әлегә, әммә ул быҫҡып ятҡан усаҡ һымаҡ, аҫтыртын яныуын дауам итә. Бынан тыш, Резерв фонды ла тиҙ кәмей. Унын күп өлөшө әле төбәк бюджеттарын тулыландырыуға китә. М. Хазин фекеренсә, көрсөктөң киҫкенләшеүе ошо көҙгә көтөлә. Был мәлгә халыҡ баҡсаларынан, ялдан ҡайтып, яҙ һәм йәй башында ябылған заводтарҙың һаман да эшһеҙ тороуын күрәсәк. Банк өлкәһендә киҫкен көрсөк башланыуы ихтимал, ти М. Хазин. Көрсөк дауам итәсәк, сөнки хәлде тотороҡландырыу өсөн ныҡлы нигеҙгә ҡоролған сәбәптәр юҡ .

Бөгөн РФ Финанс министрлығы Үҙәк банктың һумды осһоҙландырыуын теләй, щул осраҡта Резерв фонды ҡеүәттәре хатта ике йылға ла етер ине, ләкин Үҙәк банк быны эшләмәй, сөнки бөтә был көрсөк бәләләрендә ул төп ғәйепле булып ҡаласаҡ бит, юғиһә. Икенсенән, был банк системаһы хәлен күпкә мөшкөлләндерәсәк. Шулай итеп, ике ведомство алып барған низағ һәм аппарат уйындары хәлде тағы ла ауырлаштыра, ти иҡтисадсы М. Хазин. Ул ғына ла түгел, Рәсәй Үҙәк банкының бөгөнгө сәйәсәте беҙҙең сәнәғәттең ҡалған ғына өлөшөн дә емереүгә, юҡҡа сығарыуға булышлыҡ итәсәк.

Был осраҡта ике юл бар, ти М. Хазин. Резерв фонды бөтмәҫ элек йә осһоҙланыу була, йә ул булмай. Булмаған хәлдә, төбәк бюджеттарын финанслау ҡыйынға төшәсәк, ә унын эҙемтәһе - уҡытыусыларға, врачтарға, милиционерҙарға эш хаҡы түләү мөмкинлеге бөтәсәк, йәмәғәт транспорты йөрөүҙән туҡтаясаҡ һәм башҡа шундай социаль афәт күренештәре күҙәтелеүе бик мөмкин. Ә йыл аҙағына ни булырын әйтеүе лә ауыр, ти иҡтисадсы-күҙәтеүсе. Ҡайһы бер төбәктәр ҡышҡы осорға йылытыу системаһы торошон тикшереү өсөн дә аҡсаһыҙ ултыра .

Ындай осраҡта, ти М. Хазин, халыҡҡа яҡшы һәм аңлайышлы итеп төшөндөрөргә кәрәк: осһоҙланыу булмаһа, һеҙгә эш тә юҡ, тип. Ә инде осһоҙланыу иҡтисадтың үҫешенә булышлыҡ итәсәк һәм халыҡҡа эш хаҡы ла түләнәсәк .

" Комсомольская правда " гәзитенә биргән ошо интервьюһында (30 июль, № 108 , 2009 йыл) М. Хазин ҡулланыусы ябай халыҡ өсөн ошондай кәңәштәр бирә: "Иң тәүҙә килеп тыуған бындай хәлдең оҙаҡҡа икәнен аңлағыҙ. Кәрәкмәгән, уйланмаған теләһә нәмә һатып алыуҙан тыйылығыҙ. Эшегеҙҙән китмәгеҙ, әгәр ҡыуһалар, үҙегеҙҙең эшсе хоҡуҡтарығыҙҙы яҡларға әҙер булығыҙ. Аҙыҡ-түлек һәм ҡулланыу тауарҙарының ирекле һәм юғары хаҡтарҙан азат булған сығанаҡтарын эҙләгеҙ".

### Икенсе фекер

" Финэкспертиза "ның генеральный директоры Агван Микаэлян әйтеүенсә,

"Нефть ҡиммәтләнә, тимәк, аҡса буласаҡ". Артабан ул шулай дауам итә: Михаил Хазиндың, Резерв фонды бик тиҙ кәмей бара, тип әйтеүе менән ризалаша алмайым. Бюджет күптән төҙөлгән бит инде, ә унда ниндәй сығымдар буласағы, килемдең күпме өлөшө һәм Резерв фондынан күпме аҡса тотоноласағы хаҡында алдан иҫәп-хисап яһалған. Дөрөҫ, аҡса етешмәүе шул ваҡытта уҡ билдәле ине инде, шуға күрә был тишекте ямау өсөн дә сара күрелгәйне. Тик бына Михаил Хазин шуны онотҡан: нефттең унан бюджет сығанаҡ алған уртаса иҫәпләнгән хаҡы элекке хисаптарға ҡарағанда 15 процентҡа артты. Иҫкә төшөрһәк, бюджетҡа баррель өсөн 41 доллар һалынған булһа, хәҙер ул ярты йыл эсендә 53 долларға барып баҫты. Баррель 15 долларға ҡиммәтләнде. Ошондай темп тотолһа, йыл аҙағына беҙ триллион ярым һум аҡсалы булабыҙ, тигән һүҙ . Шулай итеп, М. Хазиндың, аҡса етмәйәсәк, тип хәүефләндереүе төптө буш һүҙ. Хатта иң пессимист ҡараштар буйынса ла киләһе йыл нефттең хаҡы (баррель) 50 доллар, ә оптимист фекерләүҙәр буйынса 130 доллар буласағы көтөлә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

## БАШ ЭШЛӘТМӘК




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**29-се һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Контрабас. Обсерватория. Апломб. Ҡауҙы. Метро. Меркель. Борғо. Медведев. Ябаға. Серпантин. Бенди. Ҡырғауыл. Дон. Каса. Дин. Үҙсәнлек. Атҡарылыш. Обама. Сәтләүек. Абхаз. Алап. Мылтыҡ. Сарказм. Прораб. Туҡыма. Адресат. Маҙа. Ресторан. Анапа. Статер. Ашлама. Татами. Ағас.

**Вертикаль буйынса:** Дауа. Морондоҡ. Холоҡ. Нарказ. Күнәк. Аҡса. Аҡыл. Оран. Мьянма. Штамп. Камендант. Кредо. Идара. Баобаб. Трап. Сари. Ҡыяр. Аппетит. Айва. Берлускони. Осор. Ылымыҡ. Үркәс. Нәркәс. Ыуыҙ. Әлифба. Сират. Вәғәҙә. Леотор. Нөктә. Урал. Үтенес. Лацкан. Килбәт.

*ИҒЛАН*

Өфө ҡалаһында һәм республикала урынлашҡан объекттарҙа эшләү өсөн сантехниктар бригадалары, мастерҙар, участка начальниктары талап ителә. Йәшәү өсөн урын биреләсәк.
Тел.: **8-917-793-77-55**,
тел./факс: **(347) 273-10-87**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАР ДОНЪЯНЫ ХАЙРАН ИТКӘН

## беҙ Сибайҙар түгелме!

(Башы 1-се биттә).

Мәскәүҙә үткән һайлап алыу туры һөҙөмтәһе буйынса "Гөлдәр" өлгөлө балалар бейеү ансамбле был йылы бер аҙнанан ашыу Төркиәлә фестивалдә ҡатнаша. Конкурс программаһы Аланья ҡалаһының үҙәк майҙанында биш көн дауам итә. Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, элекке союздаш республикаларҙан меңгә яҡын ҡатнашыусылар беренсе көндә милли кейемдәрҙә парад менән үтәләр, аҙаҡ үҙҙәренең визиткалары менән сығыш яһайҙар. Беҙҙең Сибайҙар "Ҡурай сәскәһе" бейеүен башҡара. Коллективтарҙы Рәсәйҙең халыҡ артисы, профессор Лидия Абрам ҡыҙы Устинова етәкселегендәге абруйлы жюри баһалай. Коллективтар араһында кемдәр айырып билдәләү бик ауырға төшә жюриға, әммә шулай ҙа иң-индәр билдәләнә. Сибай бейеүселәренең сығыштары ("Кара юрга", "Кәркәүек") Европа фонында үҙенең ҡабатланмаҫ башҡорт милли колориты, бай һәм иҫ киткес матур костюмдары, бейеүҙәренең рухлы булыуы, ҡыҙҙарының һөйкөмлөлөгө һәм егеттәренең гәйәрлеге менән тәүге көндәрҙә үк игтибарҙы йәлеп итә. "Гөлдәр"ҙәрҙең бейеү техникаһын, башҡарыу оҫталығын һәм пластикаһын юғары баһалай жюри. Ансамблдең солисы Элина Яхина һөйкөмлөлөгө, һығылмалығы менән барыһының да һушын ала, һәм хаҡлы рәүештә соло номинацияһында беренсе урынға лайыҡ була. Шулай уҡ дуэт номинацияһында ла Элина Яхина менән Ильяс Ишмөхәмәтов беренсе урынды яулайҙар, улар жюри һәм тамашасы хөкөмөнә нәфис, гүзәл "Күгәрсендәр" бейеүен тапшыра. Ансамблдең етәксеһе Луиза Рәил ҡыҙы Яхина - "Иң яҡшы балетмейстер", а ансамбль үҙе "Иң яҡшы костюм" дипломы менән бүләкләнә. Һәм бына тулҡынландырғыс минуттар яҡынлаша. Фестивалдең еңеүсеһен билдәләргә һынаулы ғына секундтар ҡала. Коллегалары Луиза Рәил ҡыҙына: "Һеҙгә етер инде, беҙгә лә кубок ҡалдырығыҙ",- тип көлөшәләр, ә ул: "Юҡ, беҙ енер өсөн килдек",- тип яуаплай. Һәм, әлбиттә, Башҡортостандың бәләкәй генә Сибай ҡалаһынан "Гөлдәр" өлгөлө балалар бейеү ансамбле халыҡ-ара фестиваль-конкурсының еңеүсеһе! Шатлыҡлы күҙ йәштәрен йәшермәгән 15-16 йәшлек егет һәм ҡыҙҙарҙың ҡыуаныстарының игесиге булмай.



Балалар конкурста ҡатнашып ҡына ҡалмай, ә үҙҙәре кеүек бейеү сәнғәтенә мөкиббән киткән йәш таланттар менән таныша, аралаша. Якут республикаһынан килгән бейеүселәр менән диңгеҙҙән ун метр ғына алыҫлыҡта урынлашҡан ҡунаҡханала бергә йәшәп, дуҫлашып бөтәләр, бер-берененең бейеүҙәрен өйрәнеп ҡалырға тырышалар. Конкурстан буш ваҡыттарында Төркиәнең хозур тәбиғәтендә ял итәләр, рәхәтләнеп һыу инәләр, сәйәхәт ҡылалар. Ҡыҫҡаһы, балалар күңелендә был фестиваль-конкурс ғүмергә онотолмаҫлыҡ хәтирәләр ҡалдырған. Ошондай онотолмаҫ сәйәхәт, мәртәбәле конкурста ҡатнашыу, сит илгә сығыу мөмкинлеге биргән өсөн улар үҙҙәренең бағыусыларына сикһеҙ рәхмәтлеләр.

Ансамблдә килэһе фестиваль һәм конкурстарҙа ҡатнашырға Рәсәй, Венгрия, Франция вәкилдәре алдан саҡырып та ҡуйған. Эйе, башҡорт бейеүен ансамбль төрлә ҡитғаларҙа күрһәтер, тағы ла юғарыраҡ уңыш һәм ҡаҙаныштары алда әле уларҙың.

**Гөлнара ЯҠШЫБАЕВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

ИҒТИБАР!

## З. БИИШЕВА ИСЕМЕНДӘГЕ БАШҠОРТОСТАН "КИТАП" НӘШРИӘТЕ ТӘҠДИМ ИТӘ

**"Башҡортостандың иң гүзәл 100 төбәге" (100 самых красивых мест Башкортостана). Рус телендә.**




Башҡортостан ере иҫ китмәле бай һәм һоҡланғыс. Еребеҙҙә ниҙәр генә юҡ: боронғо йырҙарҙа, легендаларҙа данланған мөһабәт тауҙар, мул һыулы йылғалар, диңгеҙгә оҡшап йәйрәп ятҡан иҡһеҙ-сикһеҙ күлдәр, бөтә донъяға билдәле ғәжәйеп һәм уникаль мәмерйәләр. Әгәр ҙә һеҙ әлегә тиклем тыуған еребеҙҙең шаҡ ҡатырғыс матурлығы менән һоҡланырға өлгөрмәгәнһегеҙ икән, зыян юҡ: фәҡәт һеҙҙең өсөн генә Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте "Башҡортостандың иң гүзәл 100 төбәге" тигән төҫлә, сағыу һүрәттәр менән биҙәлгән күркәм баҫма тәҡдим итә. Был китап республикабыҙҙың тәбиғәте тураһында ентекләп әҙерләнгән белешмә баҫма. Быға тиклем нәшриәттә тәбиғәт ҡомарткылары хаҡында бындай уңайлы форматта белешмә сыҡҡаны булманы. Китап алты бүлектән тора: "Тауҙар", "Ҡаялар", "Йылғалар", "Күлдәр", "Мәмерйәләр", "Шарлауыҡтар". Һәр бүлек әсендә объекттар менән географик карта һәм аралар таблицаһы бирелә.

**Рафиков Б.З. Һуңғы ахмаҡлыҡ.**




Яҙыусы Булат Рафиковтың был китапҡа ингән "Лоулла", "Йыһан азаматтары", "Һуҡайлының һуңғы байрамы" тигән фантастик повестарындағы Йыһан кинлектәрен гиҙеүсе, яны планеталар асыусы батыр йөрәкле, йомарт күңелле геройҙары йәшел планетабыҙҙы - Еребеҙҙе күҙ ҡараһы кеүек һаҡларға кәрәк, тип иҫкәртә.

**2010 йылғы башҡортса йыртма календарь.**




З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә 2010 йылға йыртма календарь донъя күрҙе. 25-се тапҡыр нәшер ителгән был баҫма оло байрамға - Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арнала. Календарҙа төбәктең тарихына һәм бөгөнгөһөнә бәйле бихисап материалдар тупланған, халыҡбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар, шиғырҙар, хикәйәләр, юморескалар, төрлө тестар, кроссвордтар, файҙалы кәңәштәр урын алған, балалар өсөн махсус бит булдырылған.

**Китаптарҙы түбәндәге адрестар буйынса һатып алырға була: Өфө ҡалаһы, Левченко урамы, 4а; Октябрь проспекты, 2 ("Мир фирмаһы" туҡталышы)**
**Тел: (347) 2777-202, 246-09-55**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙ - ҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҺАРЫҠТЫ ЛА...

## бүрегә йә кешегә әйләндереп була

✤ Әхлаҡһыҙлыҡ - ваҡыттарын беҙҙән яҡшыраҡ үткәргәндәрҙең әхлағы.

**(Генри Менкен).**

✤ Бирәүҙәр үпкәләүҙәрен йота, икенселәр - үпкәләтеүсене.

**(С. Крытый).**

✤ Бөтөн донъя алданғанды ярата, шулай булғас, алдаһындар, әйҙә.

**(Карло Караффа).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ҡуйы урман араһындағы бер болонда тылсымсы йәшәгән, ти. Ул күп һайын үҙенең көтөүенән бер һарыҡ һуйып ашай икән. Ә һарыҡтар, хужаларының ниәтен һиҙенеп, урмандың төрлө яғына ҡасып китәлә, тылсымсыға уларҙы тотоу өсөн күп ваҡыт сарыф итергә тура килә, ти. Быны туҡтатыр өсөн тылсымсы бер хәйлә уйлап таба. Ул һәр һарыҡ менән айырым һөйләшеп сыға һәм уларҙы үҙенең һүҙҙәренә ышандыра икән. Беренһенә шулай ти был: "Һин һарыҡ түгел, һин минең кеүек үк кеше. Мин һарыҡтарҙы ғына һуйып ашайым, һинә ҡурҡырға түгел, һин минең дуҫым, кәңәшсем". Икенсеһенә: "Ниңә минән ҡасаһың? Һин бит арыҫлан, ә мин һарыҡтарҙы ғына һуям", - тигән. Өсөнсөһөн шулай тип ышандырған: "Һин бит һарыҡ түгел, ә бүре". Был һөйләшеүҙән һуң һарыҡтарҙың тәртибе бөтөнләй үҙгәргән - улар тыныс ҡына итеп болонда үлән көйшәй, бер ҡайҙа ла ҡасмай. Тылсымсы берәйһен һуйған саҡта ла һарыҡтар: "Ул бит һарыҡты үлтерҙе, ә мин һарыҡ түгел һәм миңә бер ниҙән дә ҡурҡырға кәрәкмәй", - тип уйлай, ти. Тылсымсы ҡорбанға әҙерләгән һарыҡ менән дә йомшаҡ ҡына һөйләшә, ти: "Дуҫым, һинең менән күптән һөйләшкән юҡ, әйҙә, инеп сыҡ, һарыҡтар мәсьәләһендә һинең менән кәңәшләшеп алырға кәрәк". Шунан һуң һарыҡ, ғорурланып, хужаһы артынан эйәрә, ти. Хужа, ысынлап та, тәүҙә көтөү тураһында һорашa, үҙенә кәрәкле мәғлүмәттәрҙе ала ла, ҡорбанын тиҙ генә салып ебәрә икән, хатта һарыҡ быны һиҙмәй ҙә ҡала, ти. Тылсымсы үҙенең хәйләһенән бик кәнәғәт ҡала. Сөнки хужаның һүҙҙәренә ышанған һарыҡтар тыныс ҡына үлән йолҡоп ашай, хатта иттәре лә тәмлерәк була башлаған, ти. Үҙҙәрен бүре, арыҫлан, кеше тип тойоусы һарыҡтар тылсымсыға хатта көтөүҙәге хәлдәр менән уртаҡлашып, ниндәй һарыҡ үҙен сәйер тотоуы тураһында мәғлүмәт еткереп, ярҙам итеп йөрөй башлаған, ти. Икенсе көнөнә үк тылсымсы үҙен сәйер тотҡан һарыҡты барып һуя, ти... Ә һин үҙеңде кем тип уйлайһың: арыҫланмы, бүреме әллә кешеме?"**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)
Тиражы - 5569
Заказ 3244